ТЫУҒАН ЯҠ: ТОПОНИМДАР ҺӘМ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусыларҙың IV Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары
16 апрель 2018 йыл

4-се йыйынтыҡ

РОДНОЙ КРАЙ: ТОПОНИМЫ И РАЗГОВОРНЫЙ ЯЗЫК

Материалы IV Республиканской научно-практической конференции одарённых школьников по диалектологии и ономастике
16 апреля 2018 г.

Сборник № 4

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ им.М.АКМУЛЛЫ
ЦЕНТР РАЗВИТИЯ ОДАРЁННОСТИ ШКОЛЬНИКОВ

ТЫУҒАН ЯҠ: ТОПОНИМДАР ҺӘМ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусыларҙың
IV Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары
16 апрель 2018 йыл

4-се йыйынтыҡ

РОДНОЙ КРАЙ: ТОПОНИМЫ И РАЗГОВОРНЫЙ ЯЗЫК

Материалы IV Республиканской научно-практической
конференции одарённых школьников
по диалектологии и ономастике
16 апреля 2018 г.

Сборник № 4

Өфө 2019 Уфа

УДК
ББК
Т

Печатается при поддержке Благотворительного фонда «УРАЛ»

Автор проекта «Ономастика и диалектология родного края», проводимого в рамках Дистанционной школьной академии «Успех»:

Усманова Минсылу Губайтовна – доктор филологических наук, профессор (ответственный редактор).

Родной край: топонимы и разговорный язык: материалы IV Республиканской научно-практической конференции одаренных школьников по диалектологии и ономастике 16 апреля 2018 г. – Уфа: Издательство БГПУ, 2019. – 130 с.

В сборнике представлены материалы IV Республиканской научно-практической конференции одаренных школьников по диалектологии и ономастике, прошедшей в Кугарчинском районе. Работы посвящены вопросам башкирской диалектологии и ономастики Кугарчинского района: рассматриваются некоторые особенности лексики говоров южного диалекта башкирского языка, фонетическое варьирование слов; содержатся исследования по ономастике.

Сборник рекомендуется школьникам, студентам, аспирантам, учителям башкирского языка и литературы, истории, культуры Башкортостана, а также всем, кто интересуется краеведением, проблемами диалектологии и ономастики.

© Усманова М.Г., 2019
© Издательство БГПУ 2019

Баш һүҙ

Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның "Дистанцион мәктәп академияһы "Уңыш" программаһына ярашлы "Диалектология һәм ономастика" проекты буйынса өс йыл рәттән (2015-2017 йылдар) конкурстар һәм Республика ғилми-ғәмәли конференциялар үткәрелде; эштәрҙән әҙерләнгән йыйынтыҡ "Урал" мәрхәмәт фонды ярҙамы менән йыл да сығарыла килде. Ә 2018 йылда үткәрелгән IV Республика ғилми-ғәмәли конференцияға беҙ Күгәрсен районы уҡыусыларын ғына йәлеп итергә булдыҡ һәм ул 16 апрелдә Мораҡ ауылында үтте.

Конференция мәлендә лә, һуңынан уҡыусыларҙың ғилми эштәре менән яҡындан танышҡанда ла шул күренде: уҡыусылар үҙҙәренең тыуған яғы – Күгәрсен районы менән хаҡлы рәүештә ғорурлана. Ә беҙ, конференцияны ойоштороусылар, был бай тарихлы матур төбәк уҡыусылары, уларҙы илһөйәр итеп тәрбиәләгән оло быуын, уҡытыусылар менән ғорурландыҡ, улар менән һоҡландыҡ.

Уҡыусыларҙың һәр береһе Күгәрсен районынан сығып, районды, халыҡты, республиканы данлаған шәхестәрен һәйбәт белә, улар менән ихлас ғорурлана, ҡыуана. Бигерәк тә, Башҡортостан Республикаһының беренсе президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың уларҙың районы менән һәр ауылдашы, ҡайһы берәүҙәрҙең хатта ауылдашы булыуы улар өсөн айырыуса ҡыуаныс, ғорурлыҡ.

Һәр бер уҡыусының телендә яңғырағанса, ер-һыу атамаларын, ерле һөйләш үҙенсәлектәрен сағылдырған һүҙҙәрҙе йыйып ҡалырға кәрәк: сөнки, беренсенән, уларҙың ҡайһылары тарихи фактарҙы дәлилләүҙә төплө материал булып тора; икенсенән, үкенескә ҡаршы, күп объекттар юғала, ә улар менән бергә атамалар ҙа яйлап телдән төшөп ҡала бара, хатта юҡҡа ла сыға. Бына ошолар тураһында яҙған, һөйләне уҡыусылар. Әйткәндәй, йыйынтыҡҡа ингән эштәрҙең төп нөсхәһе, уҡыусыларҙың фекере һаҡланды.

Уҡыусыларға, уҡытыусыларға тәҡдим ителгән ошо йыйынтыҡта конференцияла ҡатнашыусыларҙың үҙ яғы менән ғорурланып, тырышып материал туплап яҙған хеҙмәттәре индерелде.

Ҡәҙерле уҡыусылар! Тыуған яҡты өйрәнеүҙе артабан да дауам итегеҙ.

Был бик кәрәк һәм мауыҡтырғыс эш.

Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ.

Конференцияны ойоштороуҙа һәм йыйынтыҡты сығарыуҙа күрһәткән ярҙамы өсөн Башҡортостан Республикаһының беренсе президенты, "Урал" мәрхәмәт фонды етәксеһе М.Ғ. Рәхимовҡа рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның Балаларҙың һәләтен үҫтереү үҙәге һәм проект етәксеһе филология фәндәре докторы, профессор М.Ғ. Усманова.

Башҡарҙы: **Абдуллина Гөлсөм Надир ҡыҙы,** 6-сы класс
Етәксеһе: **Аллабирҙина Лира Урал ҡыҙы**

ӘҮЛИӘ ТАУЫНЫҢ ҮТКӘНЕ ҺӘМ БӨГӨНГӨҺӨ

Әүлиә тауының үткәне буйынса эҙләнеүҙәр

Төп эшемде баҫма гәзит-материалдарҙан темаға ярашлы мәғлүмәттәр эҙләүҙән башланым һәм шуны таптым: 2013 йылда “Башҡортостан – әүлиәләр иле” тигән китап донъя күргән. Авторҙары: Салауат Килдин, Сәлмән Ярмуллин, Фәнирә Ғайсина. Китап өс бүлектән һәм ике ҡушымтанан тора.



Унда Башҡортостанда булған әүлиәләр, әүлиә ҡәберҙәре, изге шишмәләр һәм тауҙар исемлеге, улар тураһында фольклор материалдары бирелгән ине. Әүлиәләр исемлегендә беҙҙең яҡташыбыҙ Сәйетҡол ауылы зыяратында ерләнгән Шәмиғол хәлфәне таптым. Әммә Әүлиә тауҙары исемлегендә мин тикшергән тау юҡ ине.

Әлбиттә, атай-әсәйем, ауыл халҡы был тау башында ниндәйҙер изге кешеләр ерләнеүе тураһында әйтеүен әйтте, әммә тауҙың тарихын асыҡ ҡына белгән кеше булманы. Бер көндө әсәйем: “Ҡыҙым, ә бит Тәлғәт бабайың күпмелер йыл элек район гәзите битендә был тауҙың легендаһын яҙып сыҡты”, – тимәһенме. Барса һорауҙарымды туплап, бабайымдарға киттем.

Бабайым, Тәлғәт Ишемғолов, һөнәре буйынса музыка белгесе, журналист, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, миңә тауҙың тарихын өйрәнеү серҙәренең барыһын да асып һалды.

2012 йылдың март айында “Күгәрсен хәбәрҙәре” гәзите биттәрендә “Изге тау – Әүлиә тауы” исемле мәҡәлә баҫтырып сығарған. Бабайым мине тауҙың легендаһы менән таныштырҙы. Һуңынан мин унан легенданы ҡайҙан алыуы тураһында һораштым.

Тәлғәт Ишемғолов

Әңгәмәләшкәндән һуң бабайымдың ниндәй сауаплы ҙур эш башҡарып өлгөрөүе тураһында аңланым. Сөнки ул тауҙың легендаһын белгән, уны дәлилләгән берҙән-бер кеше – Бөйөк Ватан һуғышы һәм педагогик хеҙмәт ветераны Миңнулла ағай Әлимғолов 6 йыл элек 2013 йылда донъя ҡуйған икән.

Миңнулла ағай Әлимғолов

Тәлғәт бабайым ул иҫән-һау саҡта, хатта Башҡортостан телерадиокампанияһын саҡыртып, Миңнулла олатайҙы Әүлиә тауына мендереп, “Әүлиә тауы серҙәре” исемле документаль фильм да төшөрткән булған. Ә Миңнулла олатайға тауҙың тарихын Әүлиә – Шәмиғол хәлфә олатай һөйләп ҡалдырған.

Шәмиғол хәлфә 1868 йылда Күгәрсен районы Сәйеткол ауылында тыуып, 1958 йылда 90 йәшендә донъя ҡуя. Үҙе иҫән-һау сағында яҡын-тирәләге бөтөн әүлиә ҡәберҙәренә йыш зыярат ҡылып, аяттар сығып торор булған. Хәлфә ғүмер буйына кешеләрҙе сирҙәрҙән дауалау менән шөғөлләнә, шәбәйә алмай йәшәүгә өмөттөре бөткән күп кешеләрҙе аяҡҡа баҫтыра. Уның

күрһәткән мөғжизәләре, кирамәттәре тураһында бик күп материалдар йыйып, Миңнулла олатай 2009 йылда “Шәмиғол хәлфә – башҡорт бағымсыларының берәһе” исемле китап та баҫтырып сығарған.

Бына, тауҙың тарихын Миңнулла бабайға һөйләр алдынан нимә тип әйткән ул: “Улым, бына тыңлап тор, кәрәк булыр, балаларҙы, йәштәрҙе тәрбиәләгәндә инандырып, ошолай итеп аңлатып бирерһең”, – тип аманатын тапшырған.

Тимәк, Әүлиә тауының легендаһын Шәмиғол хәлфә Миңнулла олатайға, Миңнулла олатай Тәлғәт бабайыма, Тәлғәт бабайым миңә, ә мин үҙемдең тиҫтерҙәремә һәм минән һуң килгән быуынға ла тапшырырмын. Бына ул тауҙың легендаһын хәҙер һеҙгә лә һөйләйем.

Әүлиә тауының легендаһы

Был тауҙа изге кешеләр ерләнгән, уларҙың йәндәрен дошмандар фиҙа ҡылған, үлтергәндәр. Был кешеләр үҙҙәренең ерҙәрен сит-яттарға бирмәҫ өсөн көрәшкәндәр, шуның өсөн яуыз дошмандар – монгол-татарҙар, Чингиз-хан ғәскәре ҡаҙаҡ ерҙәрен яулап алғас, уларҙың мал тыуарҙарын, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаларҙы монгол ерҙәренә оҙатҡандар, ә ир заттарын ҡол итеп, үҙҙәре эргәһендә ер эшкәртеү, мал аҫырау өсөн тотҡандар. Ошоға түҙмәйенсә бер дин әһеле, мосолман ҡаҙаҡтарын йыйып, дошмандарға ҡаршы яу асҡан.

Әүлиә тауы

Аралырынан һатлыҡйән етәксене һатҡан. Дошмандар был дин әһеленең ғаиләһен – әбейҙе, бабайҙы, улын, киленен һәм сабыйҙы ҡулға алып, баштарын киҫкәндәр. Ерләргә урын бирмәгәндәр. Нимә эшләргә? Мәйеттәрҙе ер өҫтөндә ятҡырып булмай. Күп уйлап тормай, төндә, уларҙы дөйәләргә артмаҡлатып, ошо тауға мендереп күмгәндәр. Ни өсөн бында алып килгәндәрен олатай былай тип һөйләгән:

– Бына оло Эйектең һул яҡ ярында *Майка* тигән урыҫ ауылы урынлашҡан, шунда ҡаҙаҡтарҙың ҡышлауы булған. Улар землянкалар ҡаҙғандар, ҡыш көнө шунда йәшәгәндәр, әле унда уларҙың ҡәберлектәре – кургандар бар. Күрәһең, улар ошо ерләнгән кешеләрҙең нәҫелдәре булырға кәрәк.

Көндәрҙән бер көндө, ул Ураҙа Ғәйете байрамы кисе була, кешеләр тау башында ут балҡығанын күрәләр. Иртәнсәк муллалар, халыҡ йыйылышып, был ни хикмәт тип, тауға менәләр һәм ни күрәләр: тауҙа ҡәберлектәр. Шунан һуң халыҡ был урынды изге урын – *Әүлиә тауы* тип йөрөтә башлай. Ошонан башлап был тауға менгән кешеләрҙең иҫәбе-һаны юҡ.

Изге урындарға йөрөү ғөрөф-ғәҙәттәре

Был эшем барышында, шулай уҡ, изге урындарға йөрөү ғөрөф-ғәҙәттәрен дә өйрәндем. Шәмиғол хәлфә олатай бына былай тип өйрәтеп ҡалдырған:

1. Әүлиәгә зыярат ҡылғанда изге кешеләрҙең рухтарына бағышлап доға ҡылыу – сауаплы ғәмәл һанала .

2. Ә бына ниндәйҙер ярҙам, йәки ауырыуға шифа өмөт итеп килгән кешеләр ярҙамды әүлиәләрҙән түгел, ә фәҡәт Аллаһы Тәғәләнән генә һорарға тейеш. Әүлиәләрҙән һорау – ул ҙур гонаһ эш икәнен һәр кем белергә тейеш .

3. Бигерәк тә изге урындарҙа йөрөгәндә кеше насар һүҙҙәр әйтеү, йәмһеҙ ҡыланыуҙан үҙен тыйырға тейеш. Әгәр ҙә ошо тыйыуҙы тотмаһаң, үҙеңә, туғандарыңа берәй насарлыҡ була, тигән халыҡта ышаныу йәшәй.

Тауҙың бөгөнгөһө (мөғжизәләре)

Хәҙер мин *Әүлиә тауының* мөғжизәләре тураһында һөйләйем.

а) Интернет селтәренән тауыбыҙ тураһында ошондай мәғлүмәт таптым:

Тарихсы, “Башҡортостан – әүлиәләр иле” китабы авторҙарының береһе Сәлмән Ярмуллин 2005 йылда тауға менгән һәм унда күргән мөғжизәне бәйән итә. Уның яҙыуынан өҙөк килтерәм: “Бында ерләнгән әүлиәләр рухына бағышлап доға ҡылған ваҡытта ҡәбер өҫтөнә өйөлгән таш араһынан бер ҙур кеҫәртке килеп сыҡты ла, беҙҙән һис бер ҡурҡыуһыҙ, таштарҙың иң өҫтөнә

менеп ултырҙы. Хатта бармаҡ менән башынан һыйпағанда ла ҡасманы. Доғалар уҡылып бөтөп, уға ғәжәпләнеп ҡарап торҙоҡ, беҙ киткәс тә ул шул килеш ултырып ҡалды“, – ти һәм был Аллаһы Тәғәләнең мөғжизәһе түгелме ни, тип уҡыусыларҙы әңгәмәләшергә саҡыра һәм төшөрөп алған фотоһын тәҡдим итә.

б) Ә бына икенсе миҫал: Миңнулла олатай видеояҙмала 2012 йылда ике ауырыу баланың (береһе һаҡау, тотлоҡҡан, икенсеһе күҙен йыш йомоп уҡый ҙа, телевизор ҙа ҡарай алмаған, олатайҙың әйтеүе буйынса уға күҙ тейгән булған) тауға менеп, Хоҙайҙан ярҙам һорағандан һуң шәбәйеп китеүҙәре тураһында һөйләй.

Вәлиева Зәбирә инәй

в) Бынығы күрше Төпсән ауылынан 76 йәшлек Вәлиева Зәбирә инәйҙең һөйләүенән: “Һәр кемгә ул тауға менеү юлы асылмай икән. Бөйөк Ватан һуғышында булған Ғыйзылхаҡ бабай, ошонан да иҫән-һау әйләнеп ҡайтһам, *Әүлиә тауына* менер инем, тип әйтеү әйткән. Иҫән-һау ҡайтҡан, әммә тауға менә алмаған. Кешеләргә, әллә күпме менергә маташтым, тик юлыма һәр ваҡыт бер ҡара айғыр килә лә сыға, тип һөйләгән.”

Зәбирә инәйҙең һөйләүенән тағы бер миҫал, уға ошо ауыл кешеһе – Ғәли исемле ҡарт бәйән иткән. «Олатай изгелегең өсөн нимә эшләйек”, – тип һорағас: “Мине, улым, ҡул арбаһына ултыртып, анау Әүлиә тауына алып менегеҙ”, – тигән. Ярайһы уҡ мыҡты кәүҙәле был ҡартты алып менгән саҡта арбаның да, хәлфәнең дә ауырлығын тойманыҡ, тип һөйләгән.

Әлимғолова Нәғимә инәй

г) 89 йәшлек Әлимғолова Нәғимә инәйҙең һөйләүҙәренән: “Төрлө яҡтан күп киләләр, Сибай, Ырымбур, Өфө яҡтарынан кеше өҙөлмәй, быйыл Ҡәҙер төнөндә хатта Төркиәнән килеп ултырҙылар. Һөйләшә алмаған балалар һөйләшеп китә, тотлоҡҡан кешеләрҙең теле яҙыла, Бикбулаттан һөйләшә алмаған ике ҡыҙҙың теле асылды”.

Шулай итеп, мин был тикшеренеү эше менән шөғөлләнеүемә ҡәнәғәтмен һәм бик шатмын. Сөнки, эш барышында үҙемә бик күп файҙалы ғилем алдым. Минең яҙғандарҙы кеше иғтибарға алыр, уны быуындан-быуынға һөйләр, тыуған илде һаҡлау, уның ҡәҙерен белеү кәрәк икәнен аңлар, тип өмөтләнәм.

Аллаһы Тәғәлә беҙгә шундай гүзәл ожмахтай ер – Башҡортостаныбыҙҙы бүләк иткән. Ә бит ошо ерҙә изге урындарыбыҙҙың булыуы икеләтә һоҡланғыс. Раббыбыҙ: “Мин үҙемә инанмаған халыҡтарҙы юҡҡа сығарырмын”, – тип әйткән. Тарихтан белеүебеҙсә, бик күп милләттәр ер йөҙөнән юҡ ителгән.

Гүзәл еребеҙҙең ҡәҙерен беләйек, уны һаҡлайыҡ, ата-бабаларыбыҙ аманат итеп ҡалдырған изге йолаларыбыҙҙы онотмайыҡ һәм үтәйек.

Хоҙайҙың, әүлиәләребеҙҙең, ата-бабаларыбыҙҙың ризалығына өлгәшербеҙ, шул ваҡытта халҡыбыҙ үҙенең тура юлынан тайпылмаç.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. “Башҡортостан” гәзите, 2013 йыл, 13 март.

2. “Күгәрсен хәбәрҙәре” гәзите, 2012 йыл, 18 март.

3. С.Килдин, С.Ярмуллин, Ф.Ғайсина “Башҡортостан – әүлиәләр иле”, Өфө, “Китап”, 2012 йыл.

4. М.Әлимғолов. “Шәмиғол хәлфә – башҡорт бағымсыларының береһе”, Өфө, БР-һы ММРУҒМҮ.

5. Интернет ресурстары. Ф.Ғайсина Башҡортостан – әүлиәләр иле.pdf

Башҡарҙы: **Байназарова Гөлдәр Миңнулла ҡыҙы**, 9-сы класс
Етәксеһе: **Алсынбаев Хәким Ғәлийән улы**

ҮРГЕ ҺАҘ АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМДАРЫ

Үрге Һаҙ ауылы исеме тураһында

Үрге Һаҙ ауылы Күгәрсен районының көньяҡ сигендә 314 метр бейеклектә Олотауҙан ярты саҡрымда урынлашҡан. Ауылдың

көнсығышындағы тауҙар имән, саған, йүкә, ҡайын һәм башҡа киң япраҡлы ағастар менән ҡапланған. Был тауҙар бейек түгел. Үрге Һаҙҙың көнбайышында Оло Эйек буйы яландары китә. Ауыл ике урамдан тора; Тау һәм Урыҫ урамдарынан.

Үрге Һаҙ, Түбәнге Һаҙ, Бөркөт кешеләренең Ерекле ауылынан күсенеп, ауыл булып ултырыуҙары тураһында ололарҙан ишетеп беләбеҙ. Тарихсы, ғалим Әнүәр Әсфәндияров үҙенең “Башҡортостан ауылдары тарихы” исемле хеҙмәтендә *Үрге Һаҙ, Түбәнге Һаҙ, Бөркөт ауылдарының* Ерекле ауылынан айырылып сығыуы хаҡында яҙа: “Бәләкәй Абыз (Ерекле) Ҡара Ҡыпсаҡ волосының ҙур ауылдарының береһе. 1850 йылда 36 ир-ат ошо ауылдан айырылып сығып, 12 дворлы *Бөркөт – Бәләкәй Абыз* (хәҙерге *Баш Бөркөт*) ауылына, 1860 йылда Ереклеләрҙең 189 ир-аты *Үрге Һаҙ*, тағы 65 ир-аты *Түбәнге Һаҙ* ауылдарына нигеҙ һала”.

Икенсе бер сығанаҡ буйынса *Үрге Һаҙ* ауылы Ерекле ауылы менән бергә булған. Улар нимәгәлер асыуланышып киткәндәр ҙә икегә бүленгәндәр. *Түбәнге Һаҙ* ауылында *Оло Һаҙ* тигән урын булған, шунда килеп төпләнгәндәр. Уларҙың иң олоһо *Фарман* тигән *ҡарт* булған. Балалары ишәйеп, ир ҡорона еткәс, өйләндереп, уландарын төрлө урындарға таратып ултыртҡан. Дәүләтҡол *Үрге Һаҙ* ауылын нигеҙләгән. Шулай итеп, *Үрге Һаҙ* ауылына 1820 йылдар тирәһендә нигеҙ һалынған. Фармандың улына тормошҡа сыҡҡан ҡатын Гәүһәр исемле була. Ул *Үрге Һаҙ* зыяратына ерләнгән. Уның ҡәбере өҫтөндә «Гәүһәр” тигән таш бар. Яҙыу ғәрәпсә, шунда уҡ ҡайын да ултыртылған. Хәҙер ҡайындың олоно ғына бар, ә таш уртаға ярылған. Гәүһәрҙең ташына «1838 йылда ерләнде», тип яҙылған. Ауылға тәүге күсеп килгәндәр тау битләүенә ултырғандар, ә аҫта, йылға буйында, әйләнәһе өс километрлыҡ һаҙлыҡ бар. Һаҙлыҡ бик хәүефле булған, мал-тыуар ҙа ҡайһы саҡта батып үлгән. Шул һаҙлыҡты был күсеп ултырыусылар мал-тыуар, кеше-фәлән батып үлмәһен өсөн кәртәләп алған. Быны улар күсеп ултырмаҫ элек эшләгәндәр, сөнки мал көтөүһеҙ-ниһеҙ йөрөгәнгә ҡазаға

осраған саҡтары ла булғылаған. Шунан һуң ауылды ла *Үрге Һаҙ* тип атап киткәндәр.

Үрге Һаҙ ауылында Ҡыпсаҡ ырыуының *Ҡарый Ҡыпсаҡ*, йәғни боронғо *Ҡыпсаҡ* аймағы кешеләре йәшәй.

Мәсет тауынан Үрге Һаҙ ауылы

Ер-һыу атамалары

Үрге Һаҙ ауылы янындағы барлыҡ ер-һыу атамалары ауылдың кешеләре, тарихы, ауылдағы шул осорҙағы хәл-ваҡиғалар менән бәйле. Сөнки халыҡ йылға-күлгә йәки тауға, соҡорға бушҡа ғына теге йәки был исемде бирмәгән. Һәр атаманың мәғәнәһендә объекттың үҙенсәлеге, тарих ята. Сөнки исемде ул берәй ваҡиға йәки күренеш менән, йә булмаһа берәй кешенең исеме менән бәйләп биргән. Ҡайһы бер топонимдар йылға-күл менән бәйле, икенселәре тауға ҡушылған, өсөнсөләре ялан, урман исемдәре булып йөрөй. Ауылдың географик үҙенсәлегенә бәйле исемдәр ҙә байтаҡ.

Ауылдың гидронимдарын *Олоһыу* (Үрге һаҙ йылғаһы), *Аҙаҡлы йылғаһы, Үрген йылғаһы, Сатра йылғаһы, Күстәй йылғаһы, Мәсеткырккан йылғаһы, Боланатҡан, Ерек буйы, Ҡуяналған, Яппар, Рәйхан, Рафайыл шишмәләре, Абай күле, Шәһәҙәт һаҙы, Симбай күпере* кеүек исемдәр тәшкил итә.

Үрген буйы

Оронимдар йәғни тау исемдәре: *Олотау, Сағыл, Мөзөркә тауы, Мәсет тауы, Мәгәзәй тауы, Ярсыҡ, Арыҫлан тауы, Маяҡтау, Ҡара тәкә тауы, Һырт ҡыуаҡ (Ҡырлығыуаҡ), Сафа тауы, Мәсет тауы, Төйәләҫ һырты, Бибекәй тауы, Хәйерсе түбәһе, Бирле уяҙ, Уртайыр, Түбәнге айыр* һ.б.

Агоронимдар – ялан, аҡлан исемдәре: *Арғы Арал, Әшәүргән, Оло Этүлгән, Кесе Этүлгән, Алтынтуған, Турлабиргән, Бурлы бейә*.

Дринонимдар – урман һәм ағастар менән бәйле исемдәр: *Апал, Һөләй урманы, Аҡҡулҡылар, Ҡайынлыҡ һыҙаһы, Тауыҡ ҡыуағы, Рушалар* (роща һүҙенән).

Ер-һыу атамаларының ҡайһы берҙәре тураһында ентекләп яҙып китергә булдым.

Олотау. Үрге Һаҙ ауылының ярты саҡрымдағы иң бейек тау. Уның бейеклеге 314 метр. Тауҙың ауыл яғында ағастар юҡ. Егерме йыл элек *Оло тауҙың* “Ҡыҙыл морон” тигән сусағында таштарҙан “Ленин” тип яҙыу бар ине, тип һөйләйҙәр ололар. Бынан ярты быуат әүәле был тау кеше бейеклек селек, тубылғы менән ҡапланған булған, ағастар ҙа күп булған, ә Ҡыҙыл морондоң аҫтынан йылға ағып ятҡан, тип һөйләйҙәр ауыл ҡарттары. Уларҙың һөйләүе буйынса, бындағы селектән ауыл халҡы ситән үрә торған булған. Үрге Һаҙҙа тәү башлап ике бригадалы колхоз ойошторолғас, уға ”*Оло тау*” исеме бирелә.

Олотау

Хәйерсе түбәһе. Олотауҙың көнбайыш битләүҙәренең береһе “*Хәйерсе түбәһе*” тип атала. Был оронимдың легендаһының ике варианты бар. 1-се вариантта революциянан һуң хәйерселәр күп булған, бер хәйерсе Күгәрсендән Һаҙға килә ятҡанда был түбәләстә туңып үлә, тип һөйләйҙәр. 2-се вариант буйынса, бер апай әллә Нуҡай яғынан, әллә Түкәт яғынан Һаҙ ауылына кейәүгә сыҡҡан. Ауылында ике балаһы ҡалған була. Был балалар әсәләре эргәһенә килә ятҡан булалармы, йә ҡайтып барған булалармы, иллә-мәгәр аҡман-тоҡман буранында аҙашып, ошо урында туңып үләләр.

Хәйерсе түбәһе

Ярсыҡ. Бөткән “Ҡолшай» ауылынан уң яҡтағы тау битләүе. Айыуҙар төйәге.

Сағыл. Тау теҙмәләренең көнбайышҡа ҡарап һуҙылған армыттарының береһе. Ауылдан яҡшы күренеп торған бер яланғас бейек кенә Ҡырланы *Сағыл* тип йөрөтәләр. Ҡыш көнө, буран булыр алдынан, уның геүләп тороуы ауылға ишетелеп тора, тиҙәр.

Үрге Һаҙҙың боронғо урамы ваҡ-ваҡ түмәләстәр аша һуҙылған. Ауыл халҡы был түмәләстәрҙе тау тип йөрөтә. Үрге оста йәшәгәндәргә түбән остағыларҙың йорт-ҡуралары күренмәй. Шул түмәләстәрҙең атамаларына күҙ һалайыҡ.

Мәсет тауы. Урам урталығында ауылға килеп терәлгән тәпәш тау. “Уның итәгендә мәсет бар ине”, – тип иҫләй Үрге Һаҙҙың ағинәйе Рәшиҙә инәй Вафина. Был мәсет ауылда 1911 йылда һалына. Ағасты *Турлабиргән аҡланынан* төньяҡтараҡ урынлашҡан тау битләүенән киҫәләр. Был битләү *Мәсетҡырккан* тип атала, унда аҡкан шишмәгә лә *Мәсетҡырккан һыуы* тигән исем ҡушыла.

“Революциянан һуң мәсетте мәктәп итәләр. Мәсеттең манараһын 30-сы йылдар аҙағында ҡолаталар. 1963-1964 йылдарҙа һыу аръяғында ағастан яңы мәктәп һалынғас, мәсетте уға төкәтмә итеп күсереп һалалар”.

Ҡар иң тәүҙә Мәсет тауы башында асылғанға күрә, иртә яҙҙан бында бала-саға көнө буйы зыҡ ҡубып лапта һуға торғайны”, – ти Рәшиҙә инәй.

Мәгәзәй тауы. Мәсет тауының дауамы булған, урамдағы икенсе түмәләс. Борон бында ауыл халҡының запас игене һаҡланған. (*Мәгаз* – һаҡлау урыны, иҫкесә).

Келәт тауы. Ауылдың түбәнге осондағы тәпәшәк тау. Ҡарттар уның һыртында колхоз заманында ырҙын табағы, иген келәттәре, колхоз идараһы, ауыл клубы, тимерлек урынлашҡан ине, тип иҫләйҙәр.

Мөзөркә тауы. Атаманың нимә аңлатканы билдәле түгел. Келәт тауының түбәнге осондағы һуңғы түмәләс. Иллә-мәгәр ололар был тауҙың

аҫҡы яғында әүәле кешеләр иртәнге, йә киске эңерҙә бәрей күсеүен йыш күргәндәр, тип һөйләгәндәр.

Ҡара тәкә тауы. Ҡолшайҙан үрҙә тауҙар теҙмәһенең көнбайышҡа һуҙылған сусаҡлы бер һырты. Был тауҙың исеме тураһында ҡыҙыҡлы риүәйәт һаҡлана. Имеш, ике һыбайлы юғалған аттарын эҙләп, Ямашай тауына (Назаркин ауылына ҡаршы тау) килеп сыҡҡандар ҙа, алыҫ тау битләүендә йөрөгән бер хайуанды абайлағандар. Береһе – унда ат йөрөй, тип бәхәсләшә, ти. Кемеһенең һүҙе дөрөҫ икәнен белергә тип тауға саптырып килеп етһәләр, унда бер ҡара тәкә йөрөй икән.

Һырткыуаҡ. Оло тау типһененең көнсығыш өлөшөндә ҡайын, уҫаҡ, муйыл ағастары үҫкән ҙур булмаған урманлыҡ ине.

Сафа тауы. Турлабиргән яланының арғы башында, *Мәсеткырккан* һыуын сыҡкас урынлашҡан текә тау. Унан саҡ ҡына арыраҡ *Уртайыр* һәм *Түбәнге айыр тауҙары* урынлашҡан. *Турла биргән* яланынан арыраҡ Үрген буйы башлана. Үрген йылғаһынан төньяҡ-көнбайышта “Ҡолонҡоролған” ҡаяһы бар.

Мәжитов Миңлеғәле олатай һөйләүе буйынса, әүәле бүреләр бер өйөр тайҙар-ҡолондарҙы был ҡаянан осоралар һәм кешеләр был ҡаяны *Ҡолон кырылган кая* тип йөрөткәндәр. Хәҙер был атама *Ҡолонкоролган ҡаяһына* әүерелә.

Ер-һыу исемдәренең яңылары барлыҡҡа килеүе туҡтамай, ул процесс бер туҡтауһыҙ дауам итә. Хатта бер ғаилә ағзаларының бер нисә топоним барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе булыуы ла бар. Мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Хисматуллин Хәли ҡарт (Хәлил) колхозда председатель булып эшләгән. Ул бесән сапҡан ҡарағай посадкаһын “*Хәлиғарт ҡарағайлығы”* тип йөрөтәләр. Был посадка Ҡолшайҙан бер саҡрымда, Күстәй йылғаһының уң яҡ ярында урынлашҡан. Был бабай ике әбей менән йәшәгән.

Хәлиғарт ҡарағайлығы

Оло ҡатыны Сания әбей баҫыуҙа эшләп йөрөгәндә бер ҡайын төбөндә бәпәйләй. Был ҡайынды *Сания ҡайыны* тип йөрөтә башлайҙар. Ул ҡайын "Хәйерсе түбәһенән" саҡ ҡына арыраҡ урынлашҡан. Хәли бабайҙың икенсе әбейенән тыуған улының исеме "Ҡаҙағостан» буйындағы өс шишмәнең береһенә бирелгән. Ә беренсе әбейе, улы Хәйбулла самолёттан ҡолап үлгәс, улына арнап "Сания бәйеттәре» сығара. Әммә был бөтөнләй икенсе тарих.

Ҡулланылған әҙәбиәт һәм интернет ресурстар

1. Асфандияров А.З. История сел и деревень. 2-ой том.
2. Кугарчинский район. Вехи и судьбы. Уфа, 2000.
3. "Мораҙым" гәзите, 2009 йыл 9 апрель
4. Олотау төркөмө. Бәйләнештә сайты. https://vk.com/club17586733
5. Сазово: Родные Края в Сердце Навсегда!https://vk.com/club12625815
6. Урге һаз ауылы Верхнее Сазово https://vk.com/club16605005

Башҡарҙы: **Батталов Айбулат Илгиз улы**
Етәксеһе: **Батталова Таңһылыу Зиннәт ҡыҙы**

БӘНДӘБИКӘ КӘШӘНӘҺЕ ҺӘМ УНЫҢ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУҘАР

Бәндәбикә кәшәнәһе – башҡорт мәҙәниәтенең XV-XVI быуат ҡомартҡыһы, Бәндәбикәнең ҡәбере өҫтөнә ҡуйылған ҡоролма. Бәндәбикә IX быуатта хәҙерге Күгәрсен районы Мәксүт ауылында һәм шул тирәләрҙәге ырыу-аралар менән етәкселек иткән. Ырыуын әйҙәп, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торған үтә лә аҡыллы, үҙ халҡының берҙәмлеген яҡлаусы, яҡлаусыһы ғына түгел, кәңәшсеһе лә булып, «Ерәнсә сәсән» легендаһында исеме бөгөнгө көндәргәсә һаҡланып ҡалған шәхес. Ул үҙ заманында әүлиә исеменә лайыҡ булып, тарих биттәрендә быуаттар буйына һаҡланған.

Бәндәбикә тураһында легенда тарихынан:

Риүәйәт буйынса, Бәндәбикә бик зирәк, аҡыллы ҡатын булған. Ҡаҙаҡтар менән үҙ-ара һуғышты бөтөрөүгә ҙур көс һалған. 1966 йылда археолог Нияз Мәжитов етәкселегендәге археологтар Мәксүт ауылына килеп, ауыл ҡарттарының рөхсәте менән ике йәй кәшәнәне ҡаҙалар. Иң һуңында, 1967 йылда, әүлиә-инәйҙең һөлдәһенә етәләр һәм кәшәнәне тергеҙәбеҙ, һөлдәне яңынан ерләтәбеҙ, тип, уның һөйәктәрен алып китәләр. Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, был эш туҡталып ҡала.

Бәндәбикә әбей Мәксүт ауылы ерендә, Эйеккә һул яҡтан ҡойған Бәндәбикә йылғаһы буйында йәшәгән. Ул заманда йылғаның һыуы мул, балығы күп булған, йылға буйы ҡуйы ағаслыҡ менән ҡапланған.

Ҡалҡыулыҡта Бәндәбикә ҡорғаны бар. Ул тирмә өй һымаҡ итеп кирбестән эшләнгән. Бәндәбикәнең ҡыш йәшәй торған өйө – ыҙмаһы булған.

Бәндәбикә үҙенән бик күп йәшкә кесе Ерәнсә сәсәнгә кейәүгә сыҡҡан. Уны үҙ өйөнә алып ҡайтҡан. Үҙе лә бик абруйлы, һынсыл, батыр, тәүәккәл ҡатын булған. Ил аҙаматтары һәр саҡ уның кәңәшен тотҡандар, уны хөрмәт итер булғандар. Берҙән-бер ваҡыт Бәндәбикә әбей ауырыҡһына башлай. Ә Ерәнсә сәсәндең тап ир ҡороңа тулған сағы. Һәр яуҙан еңеп ҡайтыуы арҡаһында, күңеле лә үҫә бара быныҡ. Бәндәбикә ауырыҡһынып киткәс, ир айырыуса йүгәнһеҙләнә. Егеттәрен йыя ла: "Ҡаҙаҡтар беҙҙең илгә барымта менән күп килделәр. Йәгеҙ әле, егеттәр, бер ҡыҙыҡ булһын, беҙ ҙа уларҙың йәйләүҙәренә барымта яһап ҡайтайыҡ", – тип әйтә.

Егеттәрҙең ҡайһылары икеләнеберәк ҡалған, ә бәғзеләре:

– "Ҡурҡаҡ кеше беҙ түгел", – тип, Ерәнсә сәсәндең һүҙен ҡеүәтләгәндәр. Һүҙҙе төйнәгәс, Ерәнсә сәсән, ҡатыны янына ҡайтып, үҙ фекерен әйткән икән, Бәндәбикә уға ҡаршы төшкән.

– Һин үҙ илеңдә батыр исемен яуланың. Батырлыҡ янына аҡыл да кәрәк. «Ил һаҡлаған – ирәйеп йәшәгән, ил баҫҡан – Иҙелгә таянған», – тиҙәр. Ә һин хәҙер, ахмаҡланып, йәштәрҙе насар эшкә ҡотортҡанһың. Ил баҫыу беҙҙең ғөрөфкә һыймай. Исем һатмағыҙ, «Теймәҫте хоҙай һөймәҫ», тигәндәр. Насар уйҙан кире ҡайтығыҙ! – тип өгөтләгән, ти, ул хәл өҫтөндә ятҡан көйө. Халыҡ та уның һүҙен ҡеүәтләгән, ти. Бәндәбикәнең ауырыуы тағы көсәйгән. Ул, туғандарын йыйып:

– Хәлем насар, шәбәйә алмам. Әгәр үлеп-нитеп китһәм, өйөмә индереп һалығыҙ ҙа ишек-тәҙрәләрен күмегеҙ. Өйөм минең ҡәберем булһын, – тип васыят әйткән, ти. Бәндәбикә оҙаҡ та тормай үлгән. Ҡарттар уны, васыяты буйынса, үҙ өйөндә ерләгәндәр. Ә Ерәнсә сәсән егеттәре менән ҡамауҙа ҡалған, күптәре үлгән. Ҡаҙаҡтың ил һаҡсылары уларҙы хөкөм майҙанына килтергәндәр. Унда аҡһаҡалдар йыйылған булған. Әсирҙәр баштарын түбән эйеп торалар икән. Улар янына бер ҡаҙаҡ батыры килеп баҫҡан. Шул ерҙә Ерәнсә сәсән, Бәндәбикәнең әйткәндәрен хәтерләп, бик ныҡ үкенгән, ти.

Аҡһаҡалдар:

– Батырҙар көрәшергә тейеш. Әгәр улар еңһә, был илбаҫарҙарҙы азат итергә. Әгәр ҡаҙаҡ батыры еңһә, яу менән килгән батырҙың йөрәгенә бысаҡ ҡаҙап үлтерергә, ҡалғандарын ҡайтарырға. Был мажараны улар ҡайтып ил ҡарттарына һөйләрҙәр, – тип, хөкөм сығарғандар. Ҡаҙаҡ батыры Ерәнсә сәсәнде йығып, күкрәгенә ултырған да йөрәгенә ҡаҙарға әҙерләнгән генә икән, Ерәнсә сәсән ҡысҡырып көлөп ебәргән.

– Туҡта! Үлтермәй тор! Ниңә көлә, һорашайыҡ! – тип ҡысҡырғандар, ти, аҡһаҡалдар. Ерәнсә сәсән аяғүрә баҫҡан да:

– Минең ҡатыным Бәндәбикә миңә... – тип әйтеүе була, аҡһаҡалдар:

– Бәндәбикә!.. Беләбеҙ Бәндәбикәне! Хуш! Һөйлә! – тиҙәр ҙә бер-беренә ҡарап ҡуялар. – Әллә һин уның ире Ерәнсә сәсәнме?

– Эйе, мин – Ерәнсә сәсән. Бәндәбикә беҙҙе ил баҫыуҙан ҡырҡа тыйҙы. «Ил һаҡлау – ҙурлыҡ, ил баҫыу – хурлыҡ», тине. Мин уның һүҙен тотманым.

Егеттәрем менән барымтаға киттем. Унын әйтеүе дөрөç булды, хурлыҡҡа ҡалдыҡ. Шуға үҙемдән көләм, – тигән Ерәнсә сәсән.

– Бәндәбикәне әүлиә тип ишетә инек, ысынлап та, әүлиә икән. Ҡатынның хөрмәтенә барығыҙҙы ла азат итәбеҙ, – тигәндәр ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары.

Былар йонсоп илдәренә ҡайтыуҙары була, улдары үлеп ҡалған кешеләр Ерәнсә сәсәнгә ташланалар:

– Ҡайҙа беҙҙең улдарыбыҙ? – тиҙәр. – Һүҙ тыңламай ни ҡырҙың? Ил тыңламай хур булдың!

Ерәнсә сәсән ҡайғыға ҡала, хурлығынан түҙә алмай атына менеп, көнсығышҡа ҡарай сабып китә лә, Кәңшәт тауына барып менә. Шунан ҡырла буйлап йән-фарман елеп килә һәм тау битләүендәге ҡаянан һыбай көйө һикерә. Шунда аты ла, үҙе лә һәләк була. Ерәнсә сәсән убаһы ағаслы Үрген йылғаһының уң яғынан, Наҙый йылғаһының Үргенгә ҡойған еренә яҡын, йылғаны уң яҡлап, Ҡоро Урсай уяҙына барған юлдың өç яғында, тәпәш кенә һырт өçтөндә ерләнгән. Унын тирә-яғы һөрөлгән. Ҡәбер өçтөндә оҙон таш ултыра.

Археологик ҡаҙылмалар тарихы буйлап

Үҙҙәренең ерҙәренә бик йылы мөнәсәбәт менән ҡараған урындағы халыҡ *Бәндәбикә ҡәберендә* башланған ҡаҙыныу эштәренә бик ҙур борсолоу менән ҡарай. Әммә, археологтар халыҡҡа былай тип аңлата:

Беҙҙең маҡсат – был тарихи һәйкәлде киләһе быуындарға һаҡлап ҡалдырыу.

Нияз Мәжитов әйтеүенсә, Бәндәбикәнең тышҡы ҡиәфәтен тергеҙеп, унын нindәйерәк ҡатын-ҡыҙ булыуын халыҡҡа күрһәтеү ине. 1968 йылда Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләре МДУ эргәһендә эшләп килгән антропология институтында, ошо өлкәлә эшләгән алдынғы белгес М.С.Акимоваға ебәрелә. Ул Көньяҡ Уралда антропологик тикшеренеүҙәр алып барған, Советтар Союзы дәүерендә, кеше һөйәктәренән унын тышҡы ҡиәфәтен тергеҙеү методикаһын ҡулланған берҙән-бер белгес була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 1969 йылда Акимова вафат була һәм эш туҡталып ҡала. Күҙҙаллауыбыҙса, Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләре бөгөн дә институт фондтарында һаҡланырға тейеш. Был факт Мәҡсүт ауылы халҡын бик борсой. Урындағы ҡарттар әйтеүенсә, Бәндәбикәнең ҡәберен ҡаҙып алып киткәндән һуң юғары көстәр был яҡтарға мәрхәмәтһеҙлек күрһәтә. Асыҡ ҡәберҙе ҡалдырыу – ҙур гөнаһ, мотлаҡ Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләрен тыуған тупрағына ҡайтарырға кәрәк, шул ваҡытта унын йәне тынысланыр, ә халыҡҡа именлек әйләнеп ҡайтыр, – тиҙәр аҡһаҡалдар.

Бәндәбикә кәшәнәһе

Ауылдаштар һөйләүенән

1. Азаматов Ишмөхәмәт Хәсән улы: Туембәт ауылында тыуған, Мораҡ ауылында көн күрә, әле хаҡлы ялда. Уның һөйләүенән: 1965 йылдың сентябрь айы. Минең Мәҡсүт урта мәктәбендә директор урынбаҫары булып эшләгән сағым. Мәктәпкә Өфөнән ҡунаҡтар килеп төштө. Улар араһында сығышы буйынса Үрге Һаҙ ауылынан булған, Өфө баш архитекторының урынбаҫары Рәшит Сәлихов та бар ине. Миңә ҡунаҡтарҙы ауыл халҡына фатирға урынлаштырырға ҡушылды. Күп тә үтмәй ҡаҙыу эштәре башланды. Ваҡыт етмәгәнгә уларҙың эшен күҙәтеп булманы. Эш тамамланғас, мине һәм бер-нисә ауылдашты саҡырттылар. Бәндәбикәнең ҡәбере кәшәнәнең икенсе бүлмәһенең иҙәне аҫтында ине. Һөйәк-һөлдәләрҙе археологтар, махсус тоҡҡа һалып, Ленинградҡа ебәрҙеләр.

2. Күренекле яҙыусы Зәйнәб Биишеваның бер туғаны Ғибәҙулла Абдулла улы Биишевтың «Слава труду» (24.09.2005) гәзитендәге мәҡәләһенән:”

Бәндәбикә кәшәнәһенең перспективаһы.

Күгәрсен районы Мәҡсүт ауылындағы Бәндәбикә кәшәнәһе районда ғына түгел, ә бөтә Башҡортостан өсөн билдәле урын.

Әле иһә башҡорт эпосына ингән Бәндәбикәнең исеме районда ғына билдәле. Мин ауыл халҡынан Бәндәбикә тураһында белгәндәрен һорашып сыҡтым. 40 кешенең 21-е кәшәнә тураһында яҡшы белә, 14-е был мәғлүмәт тураһында бер аҙ ишетеп белә, 5-е иһә кәшәнә тураһында бөтөнләй белмәй

булып сыға. Күреүебеҙсә, яҡташтарыма кәшәнә тарихы ныҡлы билдәле, тип әйтеп булмай”.

Үрҙә әйтеп үтелгән мәғлүмәтте мин интернет селтәренән алдым. *Бәндәбикә* кәшәнәһе менән күптәр ҡыҙыҡһына, ләкин ҡайҙа урынлашҡанын ғына белмәйҙәр.

Ошонан сығып, бурыстар ҙа билдәләнә. Беҙҙең бурыс:

тарихи-мәҙәни һәйкәлде Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтә йәшәгәндәргә лә белдертеү. Был маҡсат буйынса түбәндәге мәсьәләләрҙе күтәреү мөһим:

1. Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләрен иленә ҡайтарып алыу;
2. Кәшәнәлә төҙөлөш эштәрен тамамлау;
3. Тарихи-мәҙәни һәйкәлдең перспектив планын төҙөү, юл һалдырыу, туристик маршрут асыу.

Мин картала Бәндәбикә кәшәнәһенән алып Ерәнсә сәсән ҡәберенә тиклем маршрут төҙөнөм. Уға ярашлы, Күгәрсен районы Мәксүт ауылынан Еркле аша Ейәнсура районы Үрген ауылына тура ғына барып сығып була. Ошо ике тарихи һәйкәлде тоташтырып, туристик маршрут – тыуған яҡты өйрәнеү маршрутын һалыуҙы бөгөнгө көндә бик актуаль мәсьәләләрҙең береһе тигән фекерҙәмен.

Бәндәбикә кәшәнәһе эске яҡтан



Приложение №1 Карта историко –краеведческого маршрута

1-2. Село Исянгулово – краеведческий музей

5-6. Село Максютово –Мавзолей Бэндэбикэ

7. Деревня Зирикля (Кугарчинский район)

9. Деревня Башкирская Ургинка (Зианчуринский район)
10. Гора Назый – гора с которой сорвался лошадь Еренсе сесена, говорили что на скале сохранились следы копыт Еренсе сесена.
Река Ургинка – На берегу этой реки находится могила Еренсе сесена. Начинается в Кугарчинском районе возле деревни Кызылташ, протекает по Зианчуринскому району возле деревни Башкирская Ургинка и возле деревни Симбирск Кугарчинского района впадает на реку Большой Ик.

Башҡарҙы: **Вәлитов Сәйет Марат улы**, 8-се класс
Етәксеһе: **Вәлитова Сания Ишмөхәмәт** ҡыҙы

НУҠАЙ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

“Күс сыҡҡан” уяҙы

Был уяҙ (*уяҙ* – ике тау араһындаға тар ғына аралыҡ) Нуҡай ауылының төньяғында. Легенда буйынса, бик күп кешенән торған төркөм урынлашыр ер эҙләп йөрөй торғас, ошо уяҙға килеп сыҡҡан. Уның буйынан буйына үтеп, сылтырап ҡына ағып ятҡан кескәй йылғаны кисеп, әлеге ауыл ултырған ергә килеп төпләнгәндәр. Үҙҙәре килеп сыҡҡан уяҙҙы әлеге көндә *“Күс сыҡҡан” уяҙы* тип йөрөтәләр. Ә йылғаны атлы арба менән еңел генә кисеп сығып булғанға “*Арбайылға*” тип атағандар. Хәҙер ул йылға, Нуҡай ауылының көнсығышынан ағып, Аҡташ йылғаһына ҡоя.

“Күс сыҡҡан” уяҙы мал көтөр өсөн дә, бесән әҙерләр өсөн дә бик уңайлы. Үләне мул, ике тау ике яҡлап әсе елдәрҙән һаҡлай. Йәй көндәре ерәк емерелеп уңа, көҙ көнө бәшмәк күп була. Ә тауҙары йыуа менән әтнәкәскә бай.

“Тирмән һөйрәткән” тауы

Халыҡ ныҡлып игенселек менән шөғөлләнә башлағас, тирмән кәрәк булған. Ауылға ингән ерҙә, *Арбайылғаны* быуып, һыу тирмәне эшләргә ҡарар итәләр. Ҡаршылағы тауҙан эре-эре таштар соҡоп алып, аттар менән һөйрәтеп ташығандар.

Үткән быуаттың 70-се йылдарында әсәйемә минең ҡарт ҡәрсәйем *Байгилдина Шәкирә Кәлимулла ҡыҙы* был турала һөйләгән. Әсәйем әйтеүенсә, унда әле лә таш һөйрәткән юл беленеп ята. Шулай уҡ *“Тирмән һөйрәткән уяҙы”, “Тирмән һөйрәткән түше”* тигән урындар ҙа бар.

“Туҡмаҡ тауы”

Бер ярлы ҡарт ҡыҙы менән генә йәшәгән. Көндәрҙең бер көндө бабай бик усал ҡатынға өйләнә. Ҡатын:

– Мин һинең ҡыҙың менән бер өйҙә йәшәргә теләмәйем. Теләһәң ни эшләт, – тигән. Бабай ҡыҙын, арбаға ултыртып, ауылдан 3-4 саҡрымдар тирәһе алыҫлыҡтағы урманға алып киткән. Урманға барып еткәс:

– Ҡыҙым, һин ошо ағас төбөндә ултырып тор, ә мин утын ҡырҡайым. Һин балта тауышын ишетеп ултырырһың, – тигән.

Бабай ағастан юнып туҡмаҡ эшләгән дә ағасҡа элгән. Туҡмаҡ ел иҫкән һайын ағасҡа тейеп туҡылдап торған, ә бабай үҙе ҡайтып киткән. Ҡыҙ атаһын көтөп арығас, тауыш сыҡҡан яҡҡа барһа, туҡылдап торған туҡмаҡты ғына күргән.

“Туҡмаҡ” тауы ҙур ул. Әллә нисә уяҙы, кеше йырып сыға алмаҫлыҡ шырлыҡтары, ваҡ ҡына шишмәләре күп.

“Бурыл бейә” йылғаһы

Ҡасандыр тиф, чума ауырыуҙарынан ҡасып, бер нисә ҡаҙаҡ ғаиләһе Нуҡай ауылына килеп сыға. Халыҡ уларға ауылдан көнбайыштараҡ урын күрһәтә. Ҡаҙаҡтар шунда урынлаша. Бер ваҡыт бер Нуҡай кешеһенең бурыл төҫтәге ҡолонло бейәһе юғала. Уны эҙләп йөрөй торғас, ауылдан 3-4 саҡрым алыҫлыҡта ағып ятҡан йылға буйына барып сығалар. Ә унда теге бурыл бейәне ҡаҙаҡтар һуйып ятҡандар, ҡолоно әсәһе һуйған ерҙе уратып сабып кешнәп йөрөгән. Кешеләр күмәкләп килеп ҡаҙаҡтарҙы ҡыуып ебәрәләр. Ә йылғаны *“Бурыл бейә һуйған урын”* тип йөрөтә башлайҙар. Ваҡыттар үтеү менән йылға “*Бурыл бейә”* тип ҡыҫҡартылып атала башлай. Ә бөгөн бөтөнләй “*Бурлыбейә*” тиҙәр.

Нуҡайҙар бер береһенән алыҫ түгел ағып ятҡан ике йылғаны *“Бирге Бурлыбейә”* һәм “*Арғы Бурлыбейә”* тип атайҙар. *“Бирге Бурлыбейә*” ер аҫтынан урғылып сыға ла, ер аҫты һыуҙары менән туйынып, көсәйеп Аҡташ йылғаһына табан аға һәм Нуҡайҙың көнбайышында уға ҡоя. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ: был йылғаның оҙонлоғо 300 метр тирәһе генә. Ҡыш көндәре ул бик һирәк туңа.

Аҡташ менән “Бирге Бурлыбейә” осрашҡан ерҙә *“Ҡаҙаҡтар кисеүе”* тигән кисеү ҙә бар. Ә Нуҡай зыяратында ҡаҙаҡтарҙың ҡәбер таштары әле лә беленеп ята.

“Рамаҙан шыуған тау”

Был тау Нуҡайҙан көнсығышта, 6-7 саҡрымдар тирәһендә, Энәк йылғаһының һул яҡ ярында ҡалҡып тора. Яҡын-тирәләге тауҙарҙан бейек һәм текә булыуы менән айырыла. Элек *Рамаҙан* тигән һунарсы бүре баҫтырып ошо тауға килеп етә. Йыртҡыс тау түбәһенә менә һәм икенсе яҡ итәгенән төшә башлай. Аяғына ҡалтағай кейгән һунарсы ла унан ҡалышмай. Тауҙан төшә башлағас, ҡапыл ҡар ишелеп китә лә һунарсы ағасҡа бәрелеп үлә. Аяғындағы һыңар ҡалтағайы ысҡынып китеп тау түбәнендә ятып ҡала. Һунарсыны эҙләп килеүселәр тәүҙә һыңар ҡалтағайҙы, һуңынан үҙен табалар.

Башҡарҙы: **Вәлишина Гөлназ Ришат ҡыҙы**, 8-се класс
Етәксеһе: **Вәлишина Гөлсәсәк Тәлғәт ҡыҙы**

МИРХӘТ ӘХМӘҘУЛЛА УЛЫ ХӘСӘНОВТЫҢ “БАЛА САҠ ТУРАҺЫНДА ХӘТИРӘЛӘР“ КИТАБЫНДА ТЕЛӘҮЕМБӘТ АУЫЛЫ ТАРИХЫ

Педагогика фәндәре кандидаты, БР-ҙың, РСФСР-ҙың Мәғәриф алдынғыһы (отличнигы), Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы,

педагогик хеҙмәт һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветераны *Мирхәт Әхмәҙулла улы Хәсәнов* Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында 1932 йылда тыуған.

М.Ә.Хәсәнов башҡорт мәктәптәрендә инглиз телен уҡытыу методикаһына фәнни яҡтан нигеҙ һалыусы, 100-ҙән ашыу фәнни–методик мәҡәлә, программалар, балаларҙы тыуған теленә таянып инглиз телен өйрәнеү ысулдарын табыусы, 60-ҡа яҡын уҡыу әсбаптары (кескәй балалар өсөн дә), 1-9–сы кластар өсөн дәреслектәр авторы, “Инглизсә–башҡортса–русса”, ”Башҡортса–инглизсә“ һүҙлектәр төҙөүсе. Бөйөк Ватан һуғышы балаларына арналған, Теләүембәт ауылының тарихын сағылдырған “Бала саҡ тураһында хәтирәләр“ китабы авторы.

Минең ҡулыма 2016 йылдың бер һанында “Йәшлек” гәзитендә сыҡҡан мәҡәлә килеп эләкте. Ул мәҡәләнең авторы – Мирхәт Хәсәнов. Мәҡәлә ҙур ҡыҙыҡһыныуы уятты, сөнки унда беҙҙең ауылдың кешеләре, ер-һыу атамалары тураһында һүҙ бара ине. Ауыл китапханаһында ошо мәҡәлә тураһында һораған инем, китапханасы Фәриҙә Ирек ҡыҙы миңә: “Уның китабы сыҡты бит, Теләүембәт ауыл китапханаһына ошо китаптың авторы Мирхәт Әхмәҙулла улы Хәсәнов бүләк итте”, – тине. Мин китапты ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым һәм миндә ундағы кешеләрҙең артабанғы тормошо, тауҙар, йылға атамаларына бәйле тарихтар тураһында белеү теләге тыуҙы.

”Бала саҡ тураһында хәтирәләр “ китабында Теләүембәт ауылы халҡынының сағылышы

Теләүембәт ауылының барлыҡҡа килеүе тураһында бик күп фекерҙәр бар, ә бына М.Ә.Хәсәновтың “Бала саҡ тураһында хәтирәләр” китабында ошолай тип яҙыла: ”Теләүембәт ауылына 1747 йылда, Сәңкем–Ҡыпсаҡ волосының старшинаһы – *Теләүембәт Явгустин* исемле кеше, үҙенең ғаиләһе менән килеп ултырған һәм нигеҙ һалған. Шул йылдарҙан башлап ауыл *Теләүембәт* исемен йөрөтә. Ауылды төньяҡтан тау, ә көньяҡтан йылға уратып алған. Ауыл халҡы йылғаға *Наҡаҫ* тип исем ҡуша. *Наҡаҫҡа* бер нисә шишмә ҡоя һәм *Ҡанлы-Буләк* тигән йылға килеп ҡушыла. Наҡаҫ йылғаһы Ҡаҙарма ауылынан башланып, Оло Эйеккә ҡоя. Йылғала барыһы алты тирмән булған. *Теләүембәт* ауылында ғына ике тирмән булған. Береһе – *Лавруш тирмәне* (үрьяҡ оста), икенсеһе – түбәнге яҡта – Сәфәр байҙың тирмәне. Ауыл китапханаһында ололар менән китап уҡыусылар конференцияһы булды. Уны китапханасы Иҙрисова Фәриҙә Ирек ҡыҙы алып барҙы. Шундағы һөйләшеүҙән мин түбәндәгеләрҙе белдем: хәҙерге ваҡытта *Лавруш тирмәне* булған урында – Наҡаҫ урамы, ауыл кешеләре өй һалған, донъя ҡорған. Ул Наҡаҫ йылғаһы буйында урынлашҡан булған. Был тирмәнгә төрлө ауылдарҙан он тарттырырға килгәндәр (Бикес, Аҙнағол, Дауыт-Ҡайып, Ворошил – ул ауыл хәҙер юҡ), *Ҡаҙарма* (Көйөргәҙе районы), *Сәңкем* (Тәүәкән), *Өткөсөк* (Яңауыл), *Рязановка* (ул ауыл шулай уҡ юҡҡа сыҡҡан). Сәфәрғәли Иҙелбаев ауылдың старостаһы булған. Революцияға тиклем ауылда ике ҙур мәсет булған, ситтән килгән *Сәхиулла Вәлишин* исемле

муллаһы булған. Ир-атты мулла, ҡатын-ҡыҙҙарҙы абыстай уҡытҡан. Башланғыс мәктәп тә булған, уҡырға тирә-яҡ ауылдарҙан килеп уҡығандар. Теләүембәт ауылы ике урамдан торған“.

Китапты уҡып сыҡҡас, Теләүембәт ауылы халҡы тураһында һорашып-белешеп яҙырға булдым. Иң тәүҙә, әлбиттә, *Мирхәт Әхмәҙулла* улының бер туған ағалары – *Ғөбәйҙулла* менән *Лоҡман* хаҡында ҡыҙыҡһындым. “Батыры моего края” китабында (авторҙары – Тимербаева З.Ш, Ахметова А.Ш.) улар хаҡында бына нимәләр яҙылған: “*Хәсәнов Ғөбәйҙулла Әхмәҙулла* улы 1917 йылдың сентябрендә Теләүембәт ауылында тыуған. Теләүембәт ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, бухгалтерҙар әҙерләү курстарында уҡып сыға. 1938 йылда Ҡыҙыл Армия сафтарына алына, Алыҫ Көнсығышта сик ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итә. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, күп тапҡырҙар һуғышҡа ебәреүҙәрен һорап, хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итә, ләкин уның теләге кире ҡағыла, сөнки ул сик ғәскәре һалдаты иҫәпләнә¸ шуға күрә уны көнсығышҡа япон ғәскәрҙәренән һаҡлар өсөн ебәрәләр. 1945 йылда япон интервенттарына ҡаршы һуғышҡа инә, 1946 йылда демобилизациялана. 1946-1975 йылдарҙа Ырымбур өлкәһендә һәм Башҡортостанда геологоразведкала эшләй. 1999 йылда Күмертау ҡалаһында вафат була. (“Батыры моего края”.., 28-се бит).

Икенсе ағаһы – *Лоҡман*. 1927 йылда Теләүембәт ауылында тыуған. Теләүембәт ете йыллыҡ мәктәбен тамамлап, колхозда эшләй. 1944 йылда армия сафтарына алына, Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә. Ағаһы Ғөбәйҙулла кеүек, 1945 йылда япон ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыша. Һуғыштан һуң Күмертау ҡалаһында слесарь булып эшләй. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Бөйөк Ватан һуғышы ордены, “За победу над Японией” миҙалы һәм башҡа хәрби һәм юбилей миҙалдары менән бүләкләнгән. 1992 йылдың ғинуарында вафат булған (“Батыры моего края”, 30-сы бит).

Мирхәт Хәсәновтың иң яҡын дуҫы – *Урал Әхмәтов*. Ғүмере буйы тыуған ауылыбыҙҙа – “Ҡыҙыл Байраҡ” колхозында эшләгән. Әлеге ваҡытта иҫән түгел. Уралдың улдарының береһе – Рим. Беҙҙең ауылда йәшәй һәм мәктәбебеҙҙә эшләй. Уның ике балаһы бар: Рөстәм менән Айһылыу.

Уралдың ағаһы – Зиннәт. Ул 1926 йылда тыуа, ә 1943 йылда һуғышҡа алына. Уның хаҡында ауылдаштарыбыҙ З.Ш.Тимербаева менән А.Ш.Әхмәтовалар ”Батыры моего края” китабында яҙған. “1943 йылдың 20 ноябрендә фронтҡа алындым. Ике көндән һуң Ырымбур өлкәһендәге Тоцк ҡалаһында һуғышҡа өйрәтә башланылар. Артеллирист-разведчик булып киттем. 1944 йылда беҙҙе фронтҡа – Украинаға ебәрҙеләр. Кинель-Львов-Польшалағы Явров ҡалалары үткән яу юлдарым”, – тип иҫләй ветеран. Хәрби һәм юбилей миҙалдары менән бүләкләнгән. ”Әлеге ваҡытта иҫән түгел. (“Батыры моего края”, 24-се бит). Әле уның ҡатыны Зәкиә инәй ауылда йәшәй, уға 90 йәш.

Бергә уйнап үҫкән дуҫы – *Нуралин Миньйәш*. Дуҫы тураһында автор былай тип яҙа: ”Миньйәш армияла дүрт йыл хеҙмәт итеп ҡайтҡас, өйләнеп,

ғаилә ҡороп, ике ҡыҙ, бер малай үҫтереп, колхозда тракторсы һәм башҡа эштәрҙе эшләп, хаҡлы ялға сығып, әбейе Нурия менән татыу ғына, матур итеп йәшәне“. Бер йыл элек вафат булды. Бер бөртөк улы – Рим бабай, беҙҙең ауылда йәшәй, биш бала атаһы.

Тағы бер бала саҡ дуҫы – *Дауытов Марат* бабай. Ул 1933 йылда тыуа. Әрме сафына бармай. Ғүмере буйы үҙ ауылында йәшәй. Ҡолсора ҡыҙы Миңһылыуға өйләнеп, күп бала үҫтереп, уларға ҡулдарынан килгәнсе белем биреп, донья ҡуйҙылар. Беҙҙең ауылда ҡыҙҙарының береһе Зөлфиә ғүмер итә. Ул өс бала әсәһе.

Әхмәт Килдияров 1931 йылда тыуып үҫә. Ете йыллыҡ ауыл мәктәбен тамамлағас, ауылда тороп ҡалып, өйләнеп, өс бала үҫтерәләр. Бабай ғүмере буйы колхоз һарыҡтарын көттө, фермала ҡарауылсы булып эшләне. 2000 йылда машинанан тапалып ғүмере өҙөлә.

Байбулатов Шәрифйән 1930 йылда доньяға килә. Ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай, һуңынан рус ауылы *Ҡашҡарҙағы* (хәҙер Подгорное ауылы) ун йыллыҡ мәктәпкә һигеҙенсе класҡа уҡырға бара. Бер йыл уҡығандан һуң, ауылға ҡайтып, колхоз эшенә сума. Әбейе менән 9 бала үҫтерәләр. Балаларының араһынан ике ҡыҙын атап үтәм: Тимербаева Зимфира менән Әхмәтова Асияны. Зимфира Шәрифйән ҡыҙының 40-тан ашыу ғилми эштәре, шулай уҡ уҡыу-методик пособиялары бар, “Башҡортостан географияһы” дәреслегенең авторы. Асия Шәрифйән ҡыҙы 10-дан ашыу ғилми эштәр авторы. Теләүембәт мәктәбендә эшләп киткән уҡытыусы. Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы бөтөүенә 60 йыл уңайынан сығарылған “Тыуған ерем батырҙары“ китабының авторҙары.

Ауылды *Үр яҡ*, *Түбән яҡ* тип бүлеп йөрөтәләр. Әле һаман да шулай атайҙар. М.Ә.Хәсновтың китабында был хаҡта бына нимә яҙылған.

“ Йосопша бабай:

– Балалар, тиҙ генә *мишәрҙәр яғынан* малдарҙы был яҡҡа ҡыуып килтерегеҙ, – тип, үҙе эскәмйәгә ултырҙы. (Бабайҙың йорто ауылдың уртаһында, *мишәрҙәр* түбәнге, ә *башҡорттар* үр яғында йәшәйҙәр ине.” (Хәсәнов, 44-се бит)

Граждандар һуғышы беҙҙең яҡтарҙа нисек үтеүе хаҡында төрлөсә һөйләйҙәр. Ә бына М.Хәсәновтың китабында ул бына нисек бирелә: “Беҙҙең ауыл юл сатында булғанғалыр инде, ауылға бер-бер артлы йә ҡыҙылдар аҡтарҙы ауылдан ҡыуып сығарырҙар, йә аҡтар, йә инде чехтар, тағы ла Зәки-вәлидовсылар бер-береһе менән һуғышып, ҡыуышып китерҙәр ине. Ә килгән береһе, өйҙә ниндәй булһа ла ҡыйбатыраҡ әйбер бар, шуны алып китерҙәр, хужаларынан һорамай, һарыҡтарынмы, кәзәләренме һуйып ашарҙар ине, ә аттарҙы һәм дә ат хужаларын алып китерҙәр ине, ә ир булып үҫеп килгән малайҙарҙы аталарынан да һорамай, мылтыҡ тоттороп, һуғышҡа алып китерҙәр ине”, – тип иҫләй әсәйем.” (Хәсәнов, 61-се бит.)

Теләүембәт ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары

Ауылыбыҙ бик матур ерҙә урынлашҡан. Унын хозур тәбиғәтен данлап бөтөп булмаç. Ер-һыу атамаларына бәйле бик күп легендалар йәшәй.

Теләүембәт ауылы тирәһендә 12 метр бейеклектә яр бар – *Ҡыҙыл яр* тип атаған боронғолар. Сөнки ярҙағы балсығы ҡыҙыл төҫтә. Ярҙың аҫтында *Наҡаç йылғаһы* аға. Кешеләр һөйләүе буйынса, *Ҡыҙыл Ярҙа* элек күп шишмәләр ағыр булған. Тупрағы уңдырышлы булғанға, ауыл халҡы картуф сәскән. Әлеге ваҡытта кеше шул ерҙә бесән саба.

Ауыл тирәһендә Наҡаç йылғаһынан башҡа *Ҡанлы Бүләк* тигән йылға бар. Ни өсөн һуң уны "*Ҡанлы Бүләк* "тип атағандар? Сөнки бер нисә быуат элек ике бер-береһенә ғашиҡ йәшәгән, тик улар бергә була алмағандар. Улар көн һайын бер йылға ярында осрашып-күрешер булғандар. Әммә осрашып йөрөгәндәрен ҡыҙҙың әсәһе менән ағаһы белеп ҡала һәм хәйлә ҡоралар. Шулай бер көндө ҡыҙ егеткә тип сигелгән ҡулъяулыҡ бүләк итергә була, тик әсәһе ебәрмәй. Ағаһы ҡыҙҙың кейемдәрен кейеп, егет янына бара. Һылыуының бүләген тапшырғас та ағаһы егетте ҡылысы менән сәнсеп үлтерә. Егет яраһын ҡыҙ бүләге менән ҡаплай. Ҡулъяулыҡ йылға буйлап ағып китә. Шуға күрә лә инде был йылғаны *Ҡанлы Бүләк* тип йөрөтә башлайҙар. Йылғаның һыуы таҙа, ул Теләүембәт ауылы эргәһендә Наҡаçҡа ҡоя.

Беҙҙең бесәнлеккә Наҡаç йылғаһы аша сығып барып була, уны өләсәйемдәр *Моң кисеүе* тип йөрөтә. Ә бына М.Хәсәновтың китабында ул *Моғум кисеүе* тип атала. Ни өсөн улай тип атағандар, быны өйрәнәһе бар әле.

Тау башында бөтәһенә лә билдәле *Һыурый шишмәһе* ағып ята. Ни эшләп уны *Һыурый* тип атағандарын белмәйем. Бәлки, һыуы һалҡын булғанғалыр. Әлеге ваҡытта шишмә сығып ятҡан урыны кәртә менән уратып алынған. Хатта ултырыр өсөн өҫтәл-ултырғыстар ҙа эшләп ҡуйғандар.

Ауылды бер яҡлап йылға-шишмәләр уратып алһа, икенсе яҡтан тауҙар. Шул тауҙарҙың иң тәпәше – *Яуыш тауы*. Ҡалған тауҙарҙан бәләкәйерәк булһа ла, йәй көндәрендә ҡыҙарып-ҡыҙарып ер еләге бешеп сыға. Ә ҙурлыҡтары турғай башындай .

Яуыш тауы эргәһендә – тау битләүендә ҙур таштар бар. Уларҙы *Сәлим таштары* тип йөрөтәләр. Уларға бәйле бик ҡыҙыҡ легендалар йөрөй. Легенда буйынса, ике батыр йәшәгән. Береһе – *Сәлим* исемле булған, ә икенсеһе – *Марья батыр*. Көс ике яҡлап тиң булған, ти. *Сәлим батыр Сәлим таштары тауында* торһа, ә теге батыр *Сыбар тауында* урынлашҡан. Үҙҙәренең батырлыҡтарын күрһәтеп, таш бәрешергә булғандар. Әлбиттә, *Сәлим батыр* еңгән. Еңеүсенең батырлығын иҫкә төшөрөп, тау өҫтөндә таштары ятып ҡалған.

Ҡыҙҙар тауы Теләүембәт ауылы эргәһендәге бейек тауҙар рәтенә инә. Элекке заманда ҡыҙҙар, шул тауға менеп, уйын ойошторор булғандар. Әбейҙәр был тауҙы *Ҡыҙҙар тауы* тип атаған.

Иң бейек, бөтәһенең дә күҙ яуын алып торған бер тау бар. Уны *Маяктау* тип йөрөтәләр. Был тауҙы белмәгән кеше юҡтыр. Бейек тау булғас та түбәһендә ҡыҙыл флаг беркетелеп ҡуйылған.

Шулай итеп, Мирхәт Әхмәҙулла улы Хәсәновтың “Бала саҡ тураһында хәтирәләр“ китабынан Теләүембәт ауылына ҡағылышлы бик күп өҫтәлмә мәғлүмәт белдек. Ә китап өсөн Мирхәт Әхмәҙулла улына ҙур рәхмәт әйтәбеҙ.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкирской ССР. Справочная книга. Книга вторая. Уфа: Башк. кн. изд-во, 1991. 192 с.

2. Тимербаева З.Ш., Ахметова А.Ш. Батыры моего края. Уфа: РИО РУНМЦ МО РБ, 2005.

3. Хәсәнов М.Ә. Бала саҡ тураһында хәтирәләр. Өфө: Педкнига, 2014. 188 бит.

Башҡарҙы: **Ғимранова Карина Рәмил ҡыҙы**, 9-сы класс
Етәксеһе: **Ғимранова Рәсимә Факил ҡыҙы**

ЙОМАҒУЖА АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМДАРЫ

Йәмле Ағиҙел йылғаһының тау-таштар араһынан ағып сыҡҡан ерендә Күгәрсен районына ҡараған Йомағужа ауылы йәйрәп ята. Был ауыл тураһында А.З.Әсфәндиәровтың “БАССР-ҙың ауылдары тарихы” исемле китабында ла яҙылған. Унда шундай мәғлүмәт бар: “*Йомағужа* ауылы 18-се быуат урталарында уҡ билдәле булған. 18-се быуат аҙағында *Йомағужа* ауылында 14 йортта 97 кеше йәшәгән. Яйлап бындағы халыҡ этник яҡтан ҡатнашҡа әйләнә бара. 1816 йылда 7-се ревизия Йомағужа исемле 2 кешене иҫәпкә ҡуя. Береһе – 71 йәштәге Бикбов Йомағужа (улдары – Дәүләткилде, Сирбай, Бикмөхәмәт, Әлмөхәмәт, Рәхимғол). Икенсеһе тураһында мәғлүмәт юҡ.

Ауылыбыҙҙың яҡын тирәһендә үҙенә иғтибарҙы йәлеп иткән “топонимик объекттар” етәрлек. Мәҫәлән, бөтәһенә лә билдәле булған *Ағиҙел йылғаһы, кескәй генә Иртөбәк йылғаһы, Кәмәтау, Ташморон ...*

Йомағужа ауылын икегә бүлеп, *Иртөбәк йылғаһы* ағып ята. Артабан ул Ағиҙел йылғаһына ҡушыла. Беҙҙең яҡтарҙа шулай уҡ бәләкәй генә йылғасыҡтар ҙа бар: мәҫәлән, *Сулаҡ һәм Ҡаратал* (“Черная ива”). Күрәһең, ҡасандыр *Ҡаратал йылғаһы* буйында талдар үҫкәндер. Хәҙер ул урында бер рәт булып тирәктәр үҫә. Әҫе йәйге көндәрҙә был йылғалар бөтөнләй кибә тиһәң дә була. *Ҡаратал йылғаһы* һуңғы йылдарҙа бөтөнләй ҡороно.

Йомағужа ауылынан 300-400 метр алыҫлыҡта *Кәмәтау* менән *Ташморон* тауҙары һуҙылған. Ваҡыт үтә, быуындар алмашына, ә ошо тауҙар, тарихи ваҡиғаларға шаһит булып, ғорур тора бирәләр...

Һәр объекттың үҙенә күрә тарихы була. *Кәмәтауҙың* исеме ике һүҙҙән барлыҡҡа килгән: "*кәмә*" – лодка, "*тау*" – гора. Легенда буйынса, тәү башлап бында тотош бер оҙон тау булған. 19 быуат тирәһендә бында "ер тетрәү" һымағыраҡ нәмә булған һәм тау ике өлөшкә бүленгән. Бер өлөшө – түңкәрелгән кәмәгә оҡшағаны – шул урында ятып ҡалған, ә икенсе өлөшө саҡ ҡына арыраҡ "күскән". Йәғни, тау ике өлөшкә айырылған.

20-се быуат урталарында был ике тау араһында ҙур ғына соҡор барлыҡҡа килә. "*Бүре соҡоро*" тип атай уны урындағы халыҡ. Икенсе исеме – "*12 бүре*". Ни өсөн ундай исем бирелгәнен береһе лә асыҡ ҡына әйтә алмай, бәлки, бында 12 бүре йәшәгәндер, тигән фараз бар. Йыш ҡына ошо 12 бүре яҡындағы *Йомағужа, Ялсы, Тәкәбаш, Кәмәтау* ауылдарына һөжүм итер һәм мал-тыуарҙы тамаҡлар булған... Хәҙерге ваҡытта был соҡор юҡ.

Кәмәтау ауылы урынында ҡайындар үҫә

Кәмәтау шишмәһе

Кәмәтауҙың эргәһендә генә *Кәмәтау* ауылы (хутор Каматаевский) булған. 1959 йылдағы иҫәп буйынса 15 йортта 59 кеше булһа, 1979 йылда – 17 йорт теркәлгән булған. 1987 йылда унда йәшәгән һуңғы 3 ғаилә күрше Йомағужа ауылына күсеп килергә мәжбүр була. *Кәмәтау ауылы* ла хәҙерге

көндә юҡ. Ул урында ҡайындар ғына шаулап үҫеп ултыра. Ә ҡайындар эргәһенән *Кәмәтау шишмәһе* ағып ята.

Вәлишә шишмәһе

Йомағужа ауылы эргәһендә *Вәлишә шишмәһе* ағып ята. Ололар һөйләүенсә, шишмәгә ошо ауылға беренсе булып күсеп килеүсенең исеме бирелгән.

Йомағужа ауылы эргәһендә тағы ла *Ташморон тауы* бар. Исеме “*таш*” (камень), “*морон*” (мыс, клюв) һүҙҙәренән алынған. Ул урыҫ теленә “Каменный клюв” тип тәржемә ителгән. Был тау тураһында яҡташыбыҙ, шағир Александр Павлович Филиппов “Ташморон” исемле шиғыр ҙа яҙған.

Әҙәбиәт

1. Әбдерәшитова З.Р. “Йомағужа. Эштәрҙә һәм яҙмыштарҙа тарих”.

Башҡарҙы: **Ғимранова Карина Рәмил ҡыҙы**, 9-сы класс

Етәксеһе: **Ғимранова Рәсимә Факил ҡыҙы**

КҮГӘРСЕН РАЙОНЫ ТОПОНИМДАРЫНЫҢ СТРУКТУР-СЕМАНТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Топонимдар үҙҙәренең һүҙьяһалыш формалары, структураһы яғынан төҙөк, тәбиғи һәм гармониялы система барлыҡҡа килтергән.

График объектты атау функцияһын бер йәки бер нисә һүҙ башҡара, шуның өсөн дә ғалимдар топонимдарҙы ике төркөмгә бүлеп йөрөтә:

1. Ябай топонимдар,
2. Ҡушма топонимдар.

Ябай топонимдарға, ғәҙәттә, төп килештә килеп һәм тамыры бер генә һүҙҙән торған, шулай уҡ тамыр һүҙгә аффикстар ҡушып яһалған атамалар ҡарай.

Ҡушма топонимдар ике йәки бер нисә һүҙҙән тора, бер төшөнсә аңлата.

Ябай топонимдар

Ябай топонимдар күбеһенсә энонимдарҙан, кеше исеменән, сифат, ҡылым формаларынан килә.

Башҡорт топонимисы А.Ә.Камалов тамыр (нигеҙҙән) торған топонимдарҙы «лексик ысул» тип атай. Рус ғалимы Н.В.Подольская иһә «топонимизация» термины ҡуллана.

Топонимдарҙы беҙ ике төркөмгә – уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙән яһалған, тип бүләбеҙ.

1. *Уртаҡлыҡ исемдәр.*

Уртаҡлыҡ исемдәр топонимия яһауҙа актив ҡатнаша. Мәҫәлән, Күгәрсен районында ошондай уртаҡлыҡ исемдәрҙән барлыҡҡа килгән башҡорт төҙөлөшлө топонимдар бар: *Шишмә, Урман, Ҡойо* һ.б.

2. *Яңғыҙлыҡ исемдәр.*

Географик атамалар араһында кеше исемдәренән барлыҡҡа килгән *ойконимдар* күпселекте тәшкил итә: *Дәүләткол, Санъяп, Бикбулат, Йомағужа, Дауыт-Ҡайып, Сәйетҡол, Юлдаш, Әлмәс, Ғәзиз* һ.б.

а) йылғалар: *Ағиҙел, Оло Эйек, Кесе Эйек, Иртөбәк* һ.б.

б) күлдәр: *Етебүләк, Мәрәүешле* һ.б.

в) тау: *Кәмә (тауы), Ҡалмыҡ (тауы), Ҡаршы (тауы), Ҡасҡын (тауы)* һ.б.

б) һырт: *Оло Ғорла, Бәләкәй Ғорла (һырты), Ғәле (һырты).*

в) ялан, баҫыу, туғай: *Аралбай, Аҙнағол* һ.б.

г) бесәнлек, сабынлыҡ: *Һәйет сабынлығы, Сағыл сабынлығы.*

ғ) кисеү: *Аралбай кисеүе.*

Шулай итеп, Күгәрсен районына ҡараған топонимдар араһында иң күбе кеше исемдәре, фамилиялары менән бәйле атамалар булып сыға.

Ҡушма топонимдар

Әйтергә кәрәк, географик атамалар араһында ябай топонимдарға ҡарағанда ҡушма топонимдар йышыраҡ осрай. Бигерәк тә ике нигеҙле атамалар күп. Йәғни ҡушма топонимдар ике, өс, дүрт нигеҙле булырға мөмкин.

<u>*Йәнәшәлек юлы менән яһалған ҡушма топонимдар.*</u>

1. исем + исем: *Мусатау, Кәмәтау, Тәкәбаш, Аралбай, Дәүләткол, Ташморон(тау).*

2. сифат + исем. Ғалимдар билдәләүенсә, *сифат (һан, исем)* +

географик термин иң киң таралған күренеш.

а) тамыр сифат + исем: *Ҡаршытау, Ослотау, Ҡаратал* (шишмә исеме), *Олотөп* (утар), *Үрге Һаҙ, Үрге Мөрсәләй* (ауыл), *Үрге Утар* (ауыл), *Үрге Бикҡужа, Түбәнге Бикҡужа* (ауыл), *Ҡолтомош* (туғай).

Бындай төҙөлөшлө топонимдар географик объекттың айырым билдәһен айырып күрһәтә. Беҙ ҡарап үткән Күгәрсен районының топонимдарында иң күп осраған атамалар ер-һыу атамаһының дәүмәлен, барлыҡҡа килеү ваҡытын, ер өҫтөндәге кимәлен күрһәтеп тора.

б) *-лы/-ле, -ло/-лө* аффикслы яһалма сифат + исем: *Эйәрле тау, Шөмөрлөйылға* (йылға), *Таллыһыҙа* (ялан, сабынлыҡ), *Ҡайынлыһыҙа* (ялан), *Ослотау, Ерекле* (ауыл).

3. сифат + исем: *Иҫке Хвалын* (ауыл), *Яңы Покровка* (ауыл), *Оло Эйек, Кесе Эйек* (йылға), *Үрге Һаҙ, Үрге Мөрсәләй* (ауыл).

4. сифат + сифат: *Аҡбейек* (ялан, тау), *Ҡушаҡ* (сабынлығы).

Бындай топонимик атамаларҙа географик объекттарҙың исемдәре ныҡлап аңлашылмаһа ла, уларҙың үҙенсәлекле билдәләрен тулыраҡ кәүҙәләндерә һәм улар тураһында ентекләберәк һөйләй.

5. ҡылым + исем: *Быуатамаҡ (*ялан*), Ҡалдар, Хоҙайбирҙе, Ҡалай, Ҡасҡын, Түләбай (ауыл).*

<u>Һөйкәлеү юлы менән яһалған топонимдар.</u>

Һөйкәлеү юлы менән яһалған ике нигеҙле топонимдар үҙҙәре бер нисә төргә бүленә. Мәҫәлән:

а) антропоним + уртаҡлыҡ исем: *Мораҙым тарлауығы, Вәлишә шишмәһе, Шәфей тауы.*

б) уртаҡлыҡ исем + исем: *Ҡыҙҙар тауы, Сенаж яланы, Етебүләк күле* һ.б.

Шуны ла әйтергә кәрәк, ике топонигеҙҙән торған топонимдар Күгәрсен районында күп һәм улар төрлө. Иң йыш осрағаны – кеше исеме, фамилияһы менән бәйле топонимдар.

Шулай итеп, топонимдар тарих һөйләй һәм улар мең йыллыҡтар төпкөлөнә барып тоташа. «Үткәнеңде белмәй тороп, киләсәкте күҙаллап булмай» тигән кеүек, географик атамаларҙы өйрәнгәндә тарихи сығанаҡтарға мөрәжәғәт итмәй булмай. Тик шуны ла онооторға ярамай, халыҡ тормошо, көндәлек йәшәйеш менән туран-тура бәйле, күп осраҡта кешеләрҙең көнкүреше, үҫеш кимәле, шөғөлө һөҙөмтәһе булған топонимдар даими үҙгәрештә һәм үҫештә торалар. Ысынлап та, топонимияның ижадсыһы – халыҡ, ә уның сығанағы – халыҡтың үҙ ерендәге тормошо, хеҙмәте, ижады, тәбиғәтте танып белеү һәм үҙләштереү ҡеүәһе, уй-фекер һәм хыял донъяһы, заманалар аша үткән көндәлек эшмәкәрлеге, тарихи яҙмыш юлдары.

Мин тикшеренеү эшемдә Күгәрсен районы топонимияһын өйрәнеп, уның үҙенсәлектәренә туҡталдым һәм анализланым. Эшемдең нигеҙе булып топонимдар, уларҙың үҙенсәлектәре торҙо. Топонимия – телдең ауыл, урман, тау, йылға-күл, ялан, бесәнлек атамалары менән бәйле булған бер донъя.

Тикшеренеүселәр өсөн төп талап – атамаларҙы өйрәнеүҙең методтары менән ҡоралланып, топонимдарҙың эске тәбиғәтен асып биреү һәм дөрөҫ яҡтыртыу.

Шулай итеп, топонимия – йәнле процесс. Сөнки бер ауыл биләмәһе эргәһендә йәшәгән халыҡ тора бара тәбиғәт күренешенең исемен үҙгәртеп, икенсе исем менән атап йөрөткән осраҡтар бар. Топонимия һәр бер ауылдың географик үҙенсәлектәрен, унда йәшәгән халыҡтың телен, тарихын, рухи культураһын сағылдыра.

Күгәрсен районының ер-һыу атамаларын – ауыл, йылға-күл, тау-таш, соҡор, һаҙлыҡ, ҡая, ялан, бесәнлектәр исемен тикшергәндә тағы ла шуға тап булдым: башҡорт атамалары айырыуса күп һәм мәғәнә яғынан асығыраҡ булыуы менән характерлы.

Ер-һыу атамаларын йыйып өйрәнеү, тыуған ер атамалары менән ҡыҙыҡһыныу һәм уларға ихтирамлы булыу, һаҡлап, ҡурсалап алып ҡалыу һәр кемдең бурысы ул.

Башҡарҙы: **Ғәббәсова Айгүзәл Ғәзиз ҡыҙы**, 9-сы класс
Етәксеһе: **Нурмөхәмәтова Физалия Кинйәғәли ҡыҙы**

БИКБУЛАТ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Һәр кемдең тыуған ере берәү генә була. Йылдар үтеп, ғүмер уҙып, илдәр гиҙеп күпме генә йөрөмәһен, кеше йәнтөйәге хаҡындағы иҫтәлекте күңеленең иң түрендә һаҡлай. Ундағы һәр аҡлан, тау, шишмә – улар барыһы ла ҡәҙерле, йәнгә яҡын.

Минең тыуған ауылым – *Бикбулат*. Ул Күгәрсен районының иң матур ауылдарының береһе. Бай тәбиғәте, саф һауаһы, йәшел урмандары, хеҙмәт һөйгән халҡы менән дан тота беҙҙең ауыл. *Бикбулат* бөтә яҡтан да ҡара урманлы бейек тауҙар менән уратып алынған. Уларҙың исемдәре лә бик үҙенсәлекле: *Ҡашҡатау, Маяктау, Ишәй, Эйәрлетау* һ.б.

Бикбулатҡа йыр

И, Бикбулат, Шакир атлы дуҫым
Тыуып үҫкән төйәк!
Хайран ҡалып һиңә ҡарап торам
Ике күҙем төбәп.

Тауҙар моңон, дәртле тауҙар йырын
Йырлап аҡҡан Эйек.
Сәләм бирәм һиңә, сәләм бирәм,
Баштарымды эйеп.

Эйәр тауҙың көмөш биҙәгендә
Ай нурҙары уйнай.
Шул нурҙарҙың яҡтыһына күңел
Зауыҡланып туймай.

Күктә йондоҙ, ә тирәмдә күпме
Алсаҡ йөҙҙәр балҡый.
И, Бикбулат, онота алмам инде
Һине ғүмер баҡый.

Был шиғырҙың авторы – Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим. Ул 1989 йылда беҙҙең ауылдашыбыҙ, яҙыусы Шәкир Янбаев менән Бикбулатҡа халыҡ менән осрашыуға килгән була. Төрлө ерҙәрҙе күргән билдәле шағирға беҙҙең ауыл бик оҡшай. Үҙенең матур тәбиғәте һәм рухлы ауылдаштарым менән һоҡланыуын ул ошо шиғыр юлдарына һалған да инде.

Эйәрлетау легендаһы

Үҙенең һоҡландырғыс тәбиғәте менән Күгәрсен районында дан тотҡан *Эйәрлетауҙың* исеме тураһында бер нисә легенда йәшәй. Шуларһың береһе.

Бикбулат ауылына нигеҙ һалына башлаған ҡатмарлы осорҙа башҡорттарҙың бер ҙур булмаған төркөмө ҡасып, ауылдан арыраҡ булған бейек тау итәгенә барып урынлаша. Эргәлә генә *Кесе Эйек* йылғаһы ағып ята. Тау башына менеп ҡараһаң, тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренә икән. Уларҙың етәксеһа *Сурағол* исемле ҡыйыу кеше була. Ул көндөҙ һунарҙа йөрөп, ырыуҙаштарына аҙыҡ тапһа, эңер төшкәс, атына атланып, бейек тауҙың иң түбәһенә менеп, тирә-яҡты байҡар булған, ти. Атын утлауға ебәреп, эйәрен ҙур ғына таш өҫтөнә һалып торған. Моңайған саҡтарында ҡурайын алып, уйнап та ебәрер булған, ти.

Шулай ҙа үҙе ҡыйыу, үҙе мәргән башлыҡ иптәштәрен һаҡлап йөрөп бик ныҡ арыған. Төндәрен дә тыныс ҡына үткәрә алмайынса ныҡ йонсоп киткән, ауырыуға һабышҡан. Берҙән–бер көн ул яҡты донъя менән хушлашҡан.

Иптәштәре уны хөрмәтләп тау башында ерләгән. Таш өҫтөндә ятҡан эйәре лә шунда ятып ҡалған. Легендала шулай уҡ уның тоғро аты тураһында ла әйтелә. Батырҙы ерләгән кешеләр атты тау башынан төшөрә алмайҙар. Ул хужаһының ҡәбере янында йөрөп, тамам хәлһеҙләнә, көҙ еткәс, ҡаянан ҡолап төшөп үлә. Шул ваҡыттан алып тауҙы *Эйәрлетау*, ә ат ҡолаған ҡаяны *Атосҡан ҡаяһы* тип йөрөтә башлағандар.

Эйәрлетау йәй мәлендә

Аэропорт яланы

Ауылдан алыҫ түгел *Аэропорт* тигән урын бар. Ләкин был урындан бер ҡайҙа ла осоп китеп булмай. Ул тау аҫтындағы бәләкәй генә бер аҡлан урыны.

Хәл былай булған. 1969 йылдың йәйендә, Стәрлетамаҡтан Орскиға осҡан АН-12 самолеты көйһөҙләнә башлай. Летчик уны ошо бәләкәй генә аҡланға ултырта ала. Самолет төшөүе ауыл өсөн ҙур ваҡиға була. Йәше– ҡарты самолет төшкән ергә йүгерә. Тиҙ генә район үҙәгенә хәбәр итәләр. 12 пассажирҙы Мораҡҡа оҙаталар. Самолет янына һаҡ ҡуйыла. Өфөнән килгән механиктар йүнәткәндән һуң, ул яңынан һауаға күтәрелә. Ошо ваҡиғанан һуң яланды «*Аэропорт*» тип йөрөтә башлайҙар .

Ишәй тауы

Был тауҙа элек Ишәевтар ырыыуы йәйләй торған булған. Ырыу башлығы *Ишәй* ҡарт хөрмәтенә, ул үлгәндән һуң тауҙы *Ишәй тауы* тип атағандар.

Ишәй тауының көньяҡ–көнсығыш битләүенән тәрән йырын төшә. Яҙ көндәре йырындан шаулап ҡар һыуҙары аға. Уны *Шәмбәбей йырыны* тип йөрөтәләр. Йырын ауылдағы ҙур бер тарихи ваҡиғанан һуң шулай аталып йөрөтөлә башлаған.

Борон барымта–ҡарымта булған замандарҙа башҡорт иленә дала кешеләре ябырыла торған булған. Башҡорттоң малын талай, ирҙәрҙе, ҡатындарҙы әсир итеп алып китә торғандар. *Шәмбе* тигән ҡатын да әсиргә эләгә. Әсирҙәрҙе ҡасып китмәһендәр тип, һәр ваҡыт һаҡ аҫтында тоталар. Күп йылдар буйы иленә ҡайтырға хыялланған *Шәмбе* олоғайған көнөндә генә ҡасып китә ала. Ҡартайған, юлда тамам йонсоған *Шәмбе* әлеге йырынға килеп төшә. Өҫтөндәге кейеме бик алама булғас, көндөҙ ауылға инергә ояла. Кис еткәс, туғандары йортона килеп йығыла.

Шәмбәбей легендаһы ауылдың күпте күргән, боронғо ауыл булыуы тураһында һөйләй. Бөгөнгө көндә *Шәмбе* әбей килеп төшкән йырын *Шәмбәбей йырыны* тип атала.

Йылғалар

Бикбулат ауылы тауҙары менән генә түгел, йылғалары менән дә дан тота. Ауылды икегә бүлеп, бормаланып–бормаланып *Кесе Эйек* ағып ята. Кесе Эйеккә *Арҡыры, Улаҡ, Ҡурғашлы, Тәбей* йылғалары килеп ҡушыла.

Быйыл йәй ғаиләбеҙ менән *Курғашлы йылғаһы* буйына ял итергә барҙыҡ. Эҫе йәй булһа ла, уның һыуы шул тиклем һалҡын ине. *Ҡурғашлы* ҡыш көнө лә туңмай, өҫтөнән пар сығып ята. Йылғала «Ҡыҙыл китап» ҡа ингән бағыр балығы (форель) бар. Уның һыуы ла шифалы. Элегерәк атайымдың аяғына сөйәл сығып йонсоҡкан. Ауылдың бер оло инәйе: "Ҡурғашлы йылғаһы буйындағы таштарҙа мүк бар, шуны сөйәлдәреңә һалып ҡара",– тип кәңәш биргән. Атайым шулай эшләгән дә. Күп тә үтмәгән, аяҡтағы сөйәлдәре бөткән.

Ҡурғашлы йылғаһының эргәһендә мәмерйә лә бар. Ул да *Ҡурғашлы мәмерйәһе* тип йөрөтөлә.

Ауылдың тағы ла матур йылғаларының береһе – *Улаҡ йылғаһы*. Ул бейек тау башынан ағып төшә. Йылға янында матур ғына күл бар. Был күлгә аҡкоштар, торналар, ҡыр өйрәктәре ял итергә төшә.

Йылға–шишмәләр, күлдәр – тәбиғәттең бер мөғжизәһе булып тора. Улар беҙгә йәшәү сығанағы булған һыу ғына биреп ҡалмай, ә бөтә тәбиғәттең тереклеген тәьмин итә.

Кесе Эйек йылғаһы

Сит кешенеӊ ҡолағына ят булып ишетелгән атамалар шул төбәктә үҫкәндәр өсөн бик тә яҡын. Ошо атамаларҙа әллә нисәмә быуат элек ошонда йәшәгән кешеләр тураһында иҫтәлектәр, фәһемле ваҡиғалар, көлкөлө хәлдәр хаҡында хәтирәләр һаҡлана. Әммә ваҡыт үтеү менән халыҡ хәтеренән ҡайһы бер ваҡиғалар юйыла бара. Ни тиклем үкенесле булмаһын, баҡыйлыҡҡа күскән һәр быуын үҙе менән баһалап бөткөһөҙ рухи хазиналарҙың күпмелер өлөшөн мәңгелеккә алып китә. Шуға күрә ер–һыу атамаларын, улар хаҡында һөйләнгән тарихтарҙы, легендаларҙы ваҡытында яҙып алыу, өйрәнеп, һаҡлап алып ҡалыу – изге эштәрҙең береһе.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Рәхимә Вәлиуллина. Көмөш һыулы Кесе Эйек буйында. Ҡазан, 2015.

Исполнитель: **Идельбаева Рузиля Халиловна**
Руководитель: **Идельбаева Резеда Дамировна**

ИСТОРИЯ ШКОЛЫ ДЕРЕВНИ ТЛЯУМБЕТОВО

Школа... Какое огромное значение имеет это слово для людей. Впервые в школу человек приходит, будучи ребенком. Здесь для него открывается мир знаний, он формируется как личность. Много школ в нашей огромной стране, но у каждого есть своя, родная школа. Для небольшого села, такого как наше Тляумбетово, значение школы особенно велико. Оно является не только образовательным учреждением, но и культурным центром.

История возникновения деревни Тляумбетово

Деревни Кугарчинского района в период феодализма относились к Оренбургскому уезду. В 1798-1847 гг. они входили в состав 9-го, в 1847-1855 гг. – 10-го, в 1855-1865 гг. – 1, 2, 3-го кантонов. Населенные пункты нынешней территории Кугарчинского района принадлежали башкирам – вотчинам двух волостей: к одной из них – Бурзянской, относились 13-15 деревень, Кара-Кипчакской – 50-55. Почти все аулы вновь возникли после подавления башкирских восстаний 1735-1740 и 1755 годов вместо сожженных карателями деревень. Жители деревень всех волостей активно участвовали в Крестьянской войне 1773-1775 г.

По земельному владению жители этих деревень принадлежали к семиродцам – т.е. к Бурзянской, Усерганской, Тамъянской, Бушман-Кипчакской, Санким-Кипчакской, Суун-Кипчакской и Кара-Кипчакской волостям. Наша деревня входила в состав Кара-Кипчакской волости. До 70-х годов XVIII в. волость называлась Сарыш-Кипчакской. За 265 лет существования деревня прошла славный путь становления и развития.

Деревня Тляумбетово, известная со второй половины XVIII века, носит имя старшины Санким-Кипчакской волости Тляумбета Явгостина. В конце столетия в деревне было 20 дворов со 117 жителями. X ревизия показывает рост количества дворов (70) и жителей 345 (176 мужчин, 169 женщин).

По переписи 1920 года в деревне Тляумбетово Кипчакской волости Зилаирского кантона насчитывалось 106 дворов с числом душ 520 (240 – мужчины, 280 – женщины). К 1925 году число хозяйств составляло 66 единиц. Жили здесь в основном башкиры и татары.

Первая школа

В 1870 году в деревне Тляумбетово, которая являлась центром Суун-Каракипчакской волости Оренбургского уезда, открылась четырёхлетняя земская школа. Учителя школы пользовались большим авторитетом среди населения деревни. Они вели агитационно-пропагандистскую работу и были активными участниками становления Советской власти. Открытие школы стало началом кузницы национальных кадров.

В 1935 году одним из первых в районе школа становится семилетней, директором назначается Сабитов Нигамат Кадырович. Школа расположена в нескольких деревянных зданиях. Ученики вместе с учителями и рабочими школы заготавливали каждый год сено, 500-600 м^3 дров. При школе имелся интернат, где жили ученики из деревень Азнагулово, Даут-Каюпово, Таваканово; из хуторов Прогресс, Рязановка. В последующие годы директорами школы работали: Тойкин Музагит Мирзаянович, с 1942 года Курбангалеев Сафа Асадуллович, с 1952 года Яхин Ахмет Кинзягалеевич, с 1958 года Галеев Зуфар Хабибрахманович, с 1960 года Каранаев Фасхетдин Гималетдинович.

До 1972 года в школе были русские классы, где обучались русские дети из деревень: Черниговка, Прогресс, Красногор. После закрытия русских классов исчезли деревни Красногор и Прогресс. С 1973 года обучение в начальных и средних классах велось на башкирском языке.

Военное время

1941 год. Война...Какое это страшное слово!

Сентябрь-октябрь 1941 года дети в школе почти не учились.

Начавшаяся Великая Отечественная война оборвала мирную жизнь деревни, помешала дальнейшему росту. Не могли знать выпускники 1941 года, что уже следующий день так круто изменит их дальнейшую судьбу. Уже во второй день войны на фронт ушли многие наши односельчане.

Из воспоминаний Идельбаевой Наили Абдулловны 1924 года рождения, ей было 17 лет, когда началась война. «Вместе с другими на фронт уходили и учителя. Солдатские письма шли почти в каждую семью с первых дней войны. В этих письмах выражалась великая любовь к Родине.

Из воспоминаний Ягафаровой Гайши Султангалиевны: «Война принесла голод и разруху. Вместе со взрослыми работали в колхозе и дети. Уборка урожая, посев, заготовка дров, уход за больными, пожилыми людьми-все это легло на плечи детей и стариков. Несмотря на этот тяжелый труд, учащиеся успевали читать книги и ходить на занятия. В школе занятия проводились, но не все дети могли ходить на уроки. Во время войны директором школы работал Курбангалеев Сафа Асадуллович. В колхозе было организовано добровольное общество для молодежи «Осоавиахим». В него входили учителя, лучшая молодежь колхоза. В школе учащихся старших классов принимали в комсомол. Для этого ученики заполняли анкеты, отвечали на вопросы комиссии.

Из воспоминаний Кильчуриной Суюмбики Хайдаровны 1928 года рождения. «На войну ушли отец, мои братья. Младший брат только что окончивший школу попросился добровольцем. Перед отъездом на фронт посадил во дворе дерево-черёмуху. Черёмуха растет во дворе, напоминая о моём брате. Школа «семилетка» с начала войны превратилась в начальную. Учителями были молоденькие девушки - выпускницы школы (имена не помнит). Жители села разыскивали и передавали школе старые книги, помогали ремонтировать их, склеивали тетради из бумажной макулатуры. Многие ушедшие на фронт не вернулись с поля боя. Ценой жизни, ценой неимоверных усилий каждый житель села приближал светлый День Победы».

Послевоенное время

Закончилась война, но и послевоенные годы были очень тяжелыми для жителей деревни. Детям приходилось много работать, помогать взрослым. После войны была построена новая школа. Она состояла из нескольких

деревянных домов, отапливалась дровами. Учащиеся наряду с работниками школы и учителями заготавливали дрова, готовили сено для колхоза.

Учащиеся старших классов с классным руководителем Халиловой Р.М. при заготовке дров. 1951 г.

При школе был интернат, для учащихся соседних деревень. Для столовой школы силами учащихся выращивали картофель, капусту, морковь, лук. Учителей не хватало, в классах учащихся было много, потому что учились дети из многих деревень (т. к. не хватало школ в районе.) В школу пришли работать молодые педагоги: Яхин Ахмет Кинзягалиевич - работал директором школы с 1952 до 1958 года; Исхакова М.И., Ахметов Р.А., Давлетшина Н.А., Абдуллин А.Г., Халилова Р.М.

Первые учителя в послевоенное время Халилова Р.М. и Абдуллин А.Г. внесли большой вклад в обучение и воспитание учащихся Тляумбетовской школы.

Халилова Роза Мансуровна была классным руководителем первого Президента Республики Башкортостан Муртазы Губайдулловича Рахимова.

Первый Президент Республики Башкортостан
Муртаза Губайдуллович Рахимов

Рахимов Муртаза Губайдуллович обучался в нашей школе в 7 классе (в это время школа была семилетней). За время учебы показал себя как самостоятельным, старательным учеником. Имел большую организаторскую способность. После окончания нашей школы Рахимов Муртаза Губайдуллович поступил в Уфимский нефтяной техникум. Эти данные мне рассказал муж Розы Мансуровны, учитель математики Абдуллин Абдрахман Губаевич.

Из воспоминаний ночной няни Ахметовой Закии Ильясовны:

«Ребятишек в интернат из соседних деревень возили на тракторе, к которому цепляли будку. В интернате, хотя и топили, было прохладно. Дети были озорные, но вежливые и послушные, ответственно относились ко всем поручениям учителей. Постепенно в школе складывались традиции. Очень дружно, весело, задорно отмечали школьные праздники. Начало нового учебного года, праздник урожая, новый год.

Из воспоминаний учителя математики Абдуллина Абдрахмана Губаевича: «Годы работы в школе вспоминаю с легкостью и теплотой. Только был один сложный момент, политизация школы была страшная. Учителя должны были повышать свой идейно-политический уровень. Много времени приходилось тратить на изучение материалов съезда КПСС, конспектировать материалы готовить выступления. При советской власти особое значение придавалось организации обучения детей в тесной

взаимосвязи с воспитанием. Для этого в стране были созданы октябрятская, пионерская и комсомольская организация. Целью которых было воспитание патриотов, горячо любящих свою страну».

В 1964 году в школе была создана пионерская организация, которая носила имя Зины Портновой. Школа всегда была хорошо подготовлена к началу учебного года. Это доказывает статья из районной газеты 1965 года, которую я предлагаю вам посмотреть.

В 1971 году одним из первых в районе была построена типовая двухэтажная школа на 300 и интернат на 100 мест. Большой вклад в строительство школы ввёл председатель колхоза Нафиков Миннияр Галеевич и директор школы Яхин Ахмет Кинзягалиевич.

В 1996 году в школу проведен газ. Провели капитальный ремонт школы в 2000 году и в 2007 году.

Школа 21 века

В данное время в школе и её филиалах обучаются 152 учащихся. В школе работает 21 учитель. Из них с высшей категорией – 3, имеют первую категорию – 16 учителей. Учащиеся школы хорошо выступают на районных, республиканских олимпиадах, занимают призовые места в спортивных мероприятиях. В 2010 году на территории школы усилиями коллектива построена хоккейная площадка, в 2016/2017 учебном году сборная команда учащихся школы заняла I место по хоккею и успешно выступила в зональных соревнованиях. В школе работает кабинет информатики, который оборудован 10 компьютерами, имеется доступ к интернету. Есть библиотека, актовый зал. Работают кружки: вокал, танцы, умелые руки, резьба по дереву, спортивные игры, курэш – национальная борьба и другие. Учащиеся школы работают над проектной и исследовательской работой. Выпускники школы работают в разных сферах общества. Есть среди них профессора и кандидаты педагогических наук, политики, учителя и врачи, заслуженные работники сельского хозяйства.

Я очень люблю и горжусь своей школой. Здесь работают мои родители. Папа работает директором школы с 1996 года, он ведет уроки истории; мама- учитель начальных классов. Они начали работать в этой школе после окончания института – папа с 1989 года, мама с 1991 года. Моя сестра окончила эту школу с серебряной медалью, сейчас она учится в городе Москве. Я стараюсь стать достойной выпускницей этой школы.

Я хочу, чтобы у всех моих школьных друзей была наша маленькая Родина, и мы могли бы возвращаться сюда, в мое село, в нашу школу – наш дом.

Заключение.

Подготовка подрастающих поколений к жизни немыслима без образовательного учреждения. Поэтому по мере усложнения социально-экономических отношений в обществе происходит рост численности и

возрастание ступенчатости образовательных учреждений. Вплоть до конца XIX века основной и самой распространенной была начальная школа. Потом над ней начали настраиваться более высокие ступени, в частности, средние и старшие классы общеобразовательной школы. С середины XX века основной и самой распространенной стала средняя школа.

Одновременно с расширением сети образовательных учреждений происходит процесс совершенствования их структуры.

Когда мы говорим о работе школы, имеем в виду в первую очередь деятельность педагогического коллектива. Об определяющей роли учителя говорят многочисленные примеры истории Тляумбетовской школы. В разное время в ней работали и работают учителя, которые добились высокого качества обучения и воспитания, внесли значительный вклад в развитие образования. Таким образом, история и работа Тляумбетовской школы оказала положительную роль в деле развития образования Кугарчинского района Республики Башкортостан. И мы по праву гордимся тем, что являемся учениками школы с длинной и интересной историей, тем, что в определенной мере являемся продолжателями ее традиций.

Использованная литература

1. Материалы архива г.Уфы.

2. А.З.Асфандияров. «История сёл и деревень Башкирской СССР». Уфа: Башкирское книжное издательство, 1991.

3. З.Ш.Тимербаева. Я люблю эту Землю. Уфа, 2005.

4. Воспоминания односельчан.

Приложение:

Из личного альбома Абдуллина А.Г. У здания первой послевоенной школы. I-II ряд – ученики, III–IV ряды – учителя

Здание современной Тляумбетовской школы

Танцевальный ансамбль школы

В кабинете русского языка

Башҡарҙы: **Иҙелбаева Рузилә Хәлил ҡыҙы**
Етәксеһе: **Иҙелбаева Резеда Дамир ҡыҙы**

БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ АЗАТЛЫҒЫ ӨСӨН КӨРӘШЕУСЕЛӘР – СӘФӘР ҺӘМ УНЫҢ УЛДАРЫ ҒАБДУЛЛА МЕНӘН ХӨРМӘТУЛЛА ИҘЕЛБАЕВТАР

Башҡорт халҡының тарихында тетрәндергес ваҡиғалар, ҡанлы фажиғәләр күп була. Халыҡ үҙ ирке өсөн нисәмә быуат тиран-батшаларға, иҙгән колонизаторға ҡаршы көрәш алып бара. Күптәр үлемде ҡорал менән ҡаршылай. Әммә ситтәргә азатлығын алырға, ерен-һыуын таларға ирек бирмәй…

Һуңғы йылдарҙа үҙебеҙҙең шәжәрә, туғанлыҡ ептәре менән ҡыҙыҡһыныуым арта төштө. Эҙләнеүҙәрем, һорашыуҙарам арҡаһында ҡыҙыҡлы, шул уҡ ваҡытта тетрәндергес тә булған ваҡиғаларға юлыҡтым. Ошо хаҡта бәйән итмәксемен.

Архив материалдары буйынса *Теләүембәт* ауылына 1747 йылда нигеҙ һалына. XVIII быуаттың икенсе ярты йыллығында билдәле булып, Сәңкем-Ҡыпсаҡ волосы старшинаһы *Теләүембәт Йәүғостин* исемен йөрөтә. Йөҙ йыллыҡ аҙағында ауылда 117 кеше менән 20 йорт иҫәпләнә. X ревизия ауылда үҫештең алға китеүен күрһәтә: халҡы 345 кеше (176 ир, 169 ҡатын-ҡыҙ) булып, йорттар һаны 70-кә етә.

1920 йылғы перепись һөҙөмтәләре буйынса Йылайыр кантоны Ҡыпсаҡ волосы Теләүембәт ауылында 520 кеше (240-ир-ат, 280 – ҡатын-ҡыҙ) булып, йорттар һаны 106 иҫәпләнә.

1925 йылда хужалыҡтар һаны 66 берәмек тәшкил итә. Милләте буйынса башҡорт, татарҙар иҫәпләнә. Татар халҡы 1840 йылдарҙа Татарстан биләмәләренән күсеп килгән. Ерҙе башҡорттарҙан арендаға алғандар. Татар халҡының бер өлөшө 1905 – 1910 йылдарҙа Сорғояҙ, Сапыҡ ауылдарына күсә.

«Ҡыҙыл-Байраҡ» колхозы 1927 йылда ойошторола. Ойоштороусылары: Фазлаев Мәсләхетдин, Әбделмәнов Харис, Ғәйнетдинов Әбдрәхим, Фәхриев Ғәләүәтдин, Исмәғилев Дәүләтша, Хәмитова Хафиза, Ғөбәйҙуллин Хәйбулла. Тәүге председателде колхоз йыйылышында һайлайҙар. Ул Теләүембәт ауылында йәшәгән Фазлаев Мәсләхетдин Сәреүәр улы була.

1927 йылда тәүге партячейка ойошторола. Беренсе секретары булып Ғөбәйҙуллин Ғөбәйҙулла һайлана. Унан һуң секретарь булып Петров Петр Иванович була.

Тәүге комсомол ойошмаһы 1922 йылда ойошторола, 17 кешенән тора. Ойоштороусылары Исмәғилев Дәүләтша, Солтанов Фәйзрахман, Фәхреев Абдулла. Комсомол ойошмаһының секретары булып Фәхреев Абдулла һайлана. Теләүембәт комсомол ойошмаһының тәүге члендары: Кильчурин

Ғөбәй, Иҙелбаева Кинйәбикә, Кильчурин Хәмзә, Фатҡуллин Ильяс, Әхмәтов Ғиззәт, Рысаева Миңнури.

Теләүембәт ауылы тарихында ҙур урынды Иҙелбаев Сәфәрғәле алып тора. Кем ул Сәфәр Иҙелбаев? Ул 1850 – 1918 йылдарҙа Теләүембәт ауылында йәшәгән. Йәшләй етем ҡалып, ауырлыҡта үҫкән егетте, волость старшинаһы үҙенә эшсе итеп ала. Зиһенле егет бөтә эшкә иғтибарлы, уңған була. Ошонда эштә йөрөгәндә уҡырға-яҙырға өйрәнә. Рус, ғәрәп телдәрен өйрәнә, иркен һөйләшә, грамоталы яҙа. Волость старшинаһы үҙенең урынына Сәфәр Иҙелбаевты ҡалдыра. Тырыш егет волоста билдәле старшина булып ҙур абруй ҡаҙана. Шул йылдарҙа уҡ сит илдәр менән бәйләнеш тота. Газета уҡый, хаттар яҙа. Уны башҡорт уҡымышлыһы тип йөрөтәләр. Бик хәлле, бай йәшәй. Ауылда 9 өйө, 3 ҡатыны, һәр ҡатынан да балалары, йылҡы, һарыҡ, һыйыр көтөүҙәре, үҙенең эшселәре була. Иген сәсеп, үҙенең тирмәнендә эшкәрткән. Таштан һалдырып, келәт төҙөткән. Һатыу иткән.

Иҙелбаев Сәфәрҙең улдары *Ғабдулла* менән *Хөрмәтулла* Иҙелбаевтар башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре булып билдәле. Төплө белеме менән башҡаларҙан айырылып торған, башҡорт халҡының патриоттары *Ғабдулла* менән *Хөрмәтулла* Иҙелбаевтар башҡорт милли хәрәкәтендә юйылмаҫ эҙ ҡалдыралар.

Милли хәрәкәттә *Ғабдулла Иҙелбаев* менән уның дуҫы – Баймаҡта урындағы большевиктар тарафынан атып үлтерелгән Ғимран Мағазов – киң танылыу таба. Улар Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшкәндәргә батырлыҡ һәм ныҡлыҡ символы, ғөмүмән, башҡорт милли хәрәкәте байрағы була. Шуның өсөн дә Башҡорт хөкүмәте 1918 йылда уҡ уларҙың исемен мәңгеләштерер өсөн саралар күрә лә инде.

Хөрмәтулла Иҙелбаев та танылған шәхес була, уның тураһында Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең хәтирәлендә ҙур ихтирам менән иҫкә ала. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Ырымбур өйәҙе Бошман-Һыуын-Ҡыпсаҡ волосы Теләүембәт ауылында тыуған Иҙелбаевтар тураһында биографик материалдар бик аҙ һаҡланған.

Уларҙың аталары *Сәфәрғәли* хәлле һәм ауылдаштары араһында абруйлы кеше була. Улдары яҡшы белем алһын өсөн барыһын да эшләргә тырыша. Һис шикләнмәйенсә шуны раҫларға мөмкин: башланғыс белемде улар Теләүембәттә 1863 йылда уҡ нигеҙ һалынған дүрт йыллыҡ рус-башҡорт мәктәбендә ала. *Ғабдулла* артабан уҡыуын Ҡаҙан мәҙрәсәһендә дауам итә. Ул яңыса уҡытыуға өҫтөнлөк биргән «Ҡасимиә» йәки «Мөхәмәҙиә» мәҙрәсәләренең береһендә уҡыған булһа кәрәк, сөнки ул саҡтарҙа тап ошо уҡыу йорттары башҡорттар араһында популяр була. Әмәтзәки Вәлидиҙең «Ҡасимиә»лә белем алыуын иҫкә төшөрөп китеү урынлы булыр. Яңыса уҡытыуға өҫтөнлөк биргән мәҙрәсәләр йәш егеттәргә урта белем биргән. Әммә *Ғабдулла* Иҙелбаевты, һәләтле һәм уҡыуға ынтылған йәш егетте, был белем генә ҡәнәғәтләндермәй – 1-се һанлы Ырымбур ирҙәр гимназияһының 3-сө класына уҡырға килә ул. Уның менән гимназияла бергә уҡыған һабаҡташы

бына нимә тип иҫләй: «Ғабдулла – оҙон буйлы, мөһабәт кәүҙәле, ҡыҙыҡһыныусан, шат күңелле егет. Уны бөтәһе лә ярата ине».

1914 йылда Ғабдулла Ҡаҙан университетының медицина факультетына уҡырға инә. Беренсе курсты тамамлағас, ошо уҡ университеттың юридик факультетына күсә һәм быны юрист кеше врачҡа ҡарағанда халҡына күберәк файҙа килтерә ала, тип аңлата. Ырымбур гимназияһында Ғабдулла менән бергә уҡыған А. Перетц былай тип яҙа: «Юриспруденция» – уның яратҡан фәне ине. Гимназияла уҡыған сағында уҡ ул оратор булып сығыш яһарға ратты. Һүҙгә оҫталыҡ һәләте унда юридик факультетында лекциялар тыңлағанда уянды. Ул үҙен «туған халҡын һәр төрлө эшҡыуарҙарҙың һаран ҡулынан тартып алыусы» фәнгә арнаны.

Уның уҡыуын Беренсе донъя һуғышы өҙә. Ғабдулла Иҙелбаев батша армияһына алына, 1916 йылда ул икенсе курсты тамамлай.

Фронтта *Ғабдулла* Иҙелбаевҡа поручик дәрәжәһе бирелә. 1917 йылғы ваҡиғалар уға тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтырға насип итә. Документтарҙан күренеүенсә, 25 августан 29-на тиклем Өфөлә уҙғарылған II Бөтөн башҡорт ҡоролтайы делегаттары Бөтә Рәсәй Учредительное собраниеһына ағзалыҡҡа Шәриф Манатов, Ғәбделәхәт Фәхретдинов (данлыҡлы ғалим Риза Фәхрединовтың улы), Юныс Бикбов, Усман Ҡыуатовтар менән рәттән уның кандидатураһын күрһәтәләр. Документтарҙа Ғабдулла Иҙелбаев тураһында мәғлүмәттәр бик аҙ: офицер, Ырымбур губернаһынан».

Күп михнәттәр күреп, 1918 йылдың аҙағында *Ғабдулла* Иҙелбаев Ырымбурға килә. Ул ваҡытта Башҡорт хөкүмәте шунда урынлашҡан була. Башҡорт милли хәрәкәте етәкселеге ҡушыуы буйынса башҡорт офицерҙарынан бер төркөм, шул иҫәптән, поручик Ғабдулла Иҙелбаев, прапорщик Ғ.Мағазов, корнет А.Ҡарамышев Баймаҡҡа башҡорт отрядтары ойошторор өсөн Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә эске тәртипте һаҡларға ебәрелә.

17 февраль төнөндә Ғ.Иҙелбаевты, Ғ.Мағазовты, 7 поляк офицерын һәм башҡорт һалдаттарынан торған 10 кешелек төркөмдө Баймаҡ советының ҡоралды отряды ҡулға ала. Ҡулға алынған Ғ. Иҙелбаев менән Ғ.Мағазов: «Һеҙ беҙгә төнгө 1-ҙә һөжүм итеп, беҙ үҙебеҙ бер нәмә лә аңламайынса ҡалдыҡ. Насар хәлдә ҡалдырҙығыҙ», – тип, Баймаҡ Советы ағзаларына ҡаршы дәғүә белдерәләр. Совет ағзаларынан берәү: «Төнгө 1-ҙә Ырымбурҙан телеграмма килеп төшөү менән үк, һеҙҙе ҡулға алырға булдыҡ. Сөнки һуң булып ҡуйһа, бөтә яуаплылыҡ беҙҙең иңгә төшөр ине», – тип яуап бирә.

Килеп тыуған хәлгә Ғ. Иҙелбаев асыҡлыҡ индермәксе була: «…татарҙар һәм башҡорттар араһында сәйәси көрәш бара. Ырымбурҙа беҙҙең хөкүмәт ағзаларын ҡулға алыу – ошо көрәш эҙемтәһе… Приказды үҙегеҙҙә тикшергәндән һуң, губерна комиссарына аңлатма бирә ала инегеҙ. Әммә һеҙ быны эшләмәнегеҙ һәм эшләргә лә теләмәнегеҙ».

Ҡулға алынғандар араһында башҡорт милли хәрәкәтенең башҡа ағзалары ла була. Х.Ғәбитов, М.Әҙеһәмов һәм прапорщик Йәһүҙинды, шулай

уҡ ике поляк офицерын Совет ағзалары ирекқә сығарырға була. Һеҙҙең ҡалған иптәштәрегеҙҙе күҙ алдығыҙҙа атасаҡбыҙ», – тиҙәр уларға.

«Уларҙы Баймаҡтың көнбайыш – дала өлөшөнә алып киттеләр. Йыйылған халыҡты Баймаҡтан сығармаç өсөн, ул һалдаттар менән уратып алынды. Юл буйлап саҡрым тирәһе үткәс, туҡталдыҡ, атыуға хөкөм ителгән иптәштәребеҙҙе алдыбыҙға теҙеп ҡуйҙылар. 35 һалдатты, уң яҡҡа беҙҙе теҙҙеләр. Һул яҡҡа ҡыҙылдар командиры баçты. Алам-һалам кейемдәрҙә, тишек галоштарҙа, ялан аяҡ улар ҡарҙа баçып тора. Йөрәктәргә үтеп ингән, ҡурҡыныс күренеш…

Ҡыҙыл командир доға уҡырға рөхсәт бирҙе. Беҙҙекеләр намаҙ уҡып алды. Поляктар суҡынды. Доға ҡылғандан һуң Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазов аяғүрә баçтылар, ә поляктар тубыҡланған көйө ҡалдылар.

Ғабдулла Иҙелбаев былай тине: «Беҙҙе үлтерһәгеҙ ҙә, ике миллион башҡорт ҡала. Изге маҡсатыбыҙҙы томалай алмаçһығыҙ, халыҡ үлемһеҙ..»

Ҡыҙыл командир приказ бирҙе. Атыусылар иçерек булыу сәбәпле, тәртипһеҙ атыу тауыштары ишетелде, залп килеп сыҡманы. Поляк офицерҙары тиҙ генә йән бирмәне, оҙаҡ ҡыбырҙаны. Ғабдулла менән Ғимран ниндәйҙер көс табып аяғүрә торҙо. Поляк офицерҙары тынды. Ә беҙҙекеләр һаман да тора. Ахыр сиктә Ғимран, уның артынан Ғабдулла артҡа ауҙылар. Асыҡ күкрәк менән үҙ үлемен батырҙарса ҡаршы алдылар.

Фажиғәле үлем картинаһы, күңелдәрҙә ауыр яралар ҡалдырып, тамамланды. Тәүге мөмкинлек сығыу менән, уға тағы ла бер «бүлек» өçтәләсәк: атыуҙы Барановтың сапҡын отряды башҡарған. Кузнецов һәм Крючков ҡулъяҙмалары буйынса Баранов – Столыпин реформалары ваҡытында күсеп килгән кулаҡ булған», – тип хәтәрләй ул ҡанлы ваҡиға шаһиты Х.Ғәбитов.

Зәки Вәлиди хәтирәләренән

Ҡуңградҡа, алдан вәғәҙәләшкәнсә, октябрь айының һуңғы көндәрендә килеп еттек, әммә Башҡортостандан башҡорт уҡымышлыһы Хөрмәтулла Иҙелбаевтан башҡа берәү ҙә юҡ ине. Бәғзе арҡадаштарыбыҙҙың Хиваға килеүҙәрен белдек. Беҙ килер көндәр яҡынлашҡас, Хөрмәтулла, көн һайын ҡала ҡапҡаһынан сығып, һәр каруанды ҡаршылап, беҙҙе көткән икән. Осрашҡанда шатлығынан күҙҙәрендә йәш күренде. Мин уға: «Иң әүәл беттән ҡотҡар», – тинем. Ул иһә: «Әүәл был вилайәткә Жунаид хан исеменән идара иткән Бала бәк исемле үзбәк бейенә барып, уны сәләмләргә тейешһегеҙ. Мин уға, яҡташтарым киләсәк, тип хәбәр иттем», – тине.

Осрашыуҙан һуң Хөрмәтулла менән уның Ырымбурҙан килгән Закир исемле татар арҡадашы беҙҙең өсөн әҙерләнгән бер өйгә килтерҙе. Шунда уҡ баҙарҙан эске кейем, европаса күлдәктәр, Хива сапандары алып, мунсаға киттек. Унда сәстәребеҙҙе, тәнебеҙҙе бөтә йөндө ҡырҙыҡ, сөнки беттәр ҡултыҡ аçтына ла тулғайны. Өçтөбөҙҙән сискән бөтә кейемде мунса мейесендә яҡтыҡ. Сөнки бындағы халыҡ кейемде ут эсенә кереп булһа ла

алып сығыуы бар. Беҙгә ҡарата: «Беткә асыуланып, тун яғалармы ни?» – тип әйтеүселәр булды. Мунса инеп, кейем алмаштырғас, яңынан тыуғандай булдыҡ. Ятып, 20 сәғәттәй йоҡланыҡ.

Арҡадашыбыҙ Хөрмәтулла менән Закир татар, сауҙа менән шөғөлләнеп, аҡса эшләнеләр. Хөрмәтулла бынан китерҙән бер көн алда кисен беҙҙе бер йортҡа алып килде. Ҡатыны ла бергә барҙы. Унда беҙҙе урта йәштәрҙәге ҡатын ҡунаҡ итте. Төрлө-төрлө затлы ашамлыҡ әҙерләнгән. Ҡуйы боламыҡ, «Бордо» шарабы тәменә оҡшаш йөҙөм шарабы ла бар. Ике йәш ҡыҙ, касса һоноп, тышҡа ишетелеп ҡуймаһын тип, әкрен тауыш менән йырлай. Донъя милəттәре хаҡында күп китап уҡыған Хөрмәтулла миңә: «Ғәмәлдә, был Япония гейшаларының Харәзмдағы бер өлгөһө», – тине. Хәләл ефетен дә бергә алып килеүе был ҡунаҡханаға килеүебеҙгә «бер ғаилә байрамы» төҫөн биреү икән. Ҡатыны кеше гонаһын ғәфү итә алырлыҡ киң ҡараштa, имеш. Был ҡатын элек тә киң күңеллелеге, йомартлығы, ә Хөрмәтулла үҙе толерантлығы менән билдәле булдылар.

Оҙатыусы яллап, Харис менән бергә Чимбай юлына сыҡтыҡ. Хөрмәтулла беҙҙе байтаҡ ергә тиклем оҙатып килде. Мин уға, теләге булһа, ике айҙан Бохараға барырға тәҡдим иттем. Ул: «Иң яҡшыһы, бында милли хәрәкәтебеҙҙең күҙ-ҡолағы булайым, гонаһым да күп, бында Хужа Баҡырғани янында үләйем», – тине. Заманында боронғо рус менәүәрҙәре тибындағы нигилист булған Хөрмәтулла ваҡыт үтеү менән ысын мосолманға әүерелде. Бәлки, уның әхләҡ төшөнсәләре лә үҙгәргәндер. Айырылғанда бала-саға кеүек иланы. Мин уны башҡа күрмәнем. Өлкән йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Башҡортостан хөрриәте өсөн хәрәкәт башланған мәлдә беҙгә ныҡ ярҙам иткән атаһы тәржемәсе Сәфәрғәле ҡарт иҫемә төштө. Хөрмәтулла атаһының ҡойоп ҡуйған кеше ине. Ат өҫтөндә киткән ыңғайҙа оҙаҡ ваҡыт, Сәфәрғәле менән Хөрмәтулланы, шулай уҡ хәрәкәтебеҙ башлағанда башҡорт милли ғәскәрен ҡороу осоронда ҡыҙылдар тарафынан Баймаҡта хыянатсыл рәүештә үлтерелгән туғаны офицер Ғабдулла Иҙелбаевты уйлап барҙым.

Мөхәмәтова Миңниса инәйҙән яҙып алынды. Ул 1927 йылда Теләүембәттә тыуып үҫкән. Әсәһенең һөйләүе буйынса Иҙелбаев Сәфәр ҙә, уның улдары Ғабдулла менән Хөрмәтулла тирә-яҡҡа билдәле, хөрмәтле кеше булғандар. Ул ваҡытта халыҡ уҡый-яҙа белмәгәнгә күрә, яҙыу йомошона кеше уларға барған.

Сәфәр ҡарт оҙон буйлы, йор, шаян һүҙле бабай булған. Уны ауылдаштары бик ихтирам иткәндәр. Кемдер ялыу яҙып, Сәфәр ҡартты алып киткәс, Сәфәр Иҙелбаев Мәскәүгә хат яҙып, уны кире аҡлап, ҡайтаралар.

Сәсеүлектәре бик күп булған. Ауыл халҡы уға эшләп, хеҙмәт хаҡы алған. Улдары мәктәпте уҡып бөткәс, ауылдан китәләр, улар тураһында һуғышта йөрөйҙәр, уҡымышлы кеше булғандарын ғына беләләр.

Ғабдулла үлгәс, ауыл зыяратына «тирәк төбөнә ерләйҙәр».

Кильчурина Сөйөмбикә инәй һөйләгәндәре. 1928 йылда Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында тыуып үҫеп, ғүмере буйы ошо ауылда йәшәй.

Ауыл тарихы, ҡомартҡыларын, ер-һыу атамаларын бик күп белә. Бөйөк Ватан һуғышында атаһы, ике ағаһы ла һәләк була. Ошо көндәргә тиклем уларҙың һуғыштағы хаттарын, әйберҙәрен һаҡлай.

Әсәһенең, электән бала сағынан ололар һөйләп, иҫтә ҡалғандарынан. Сәфәр Иҙелбаевтың улдары башҡорт ерҙәре өсөн көрәшкәндәр. Бик ҡыйыу көслө тауышлы, уҡымышлы, белемгә ынтылыусан булғандар. «Атаһына оҡшағандар», – ти ине ололар. Атаһы ла бит белемле, кеше менән аралашыусан булған. Өйҙәре лә, ҡатындары ла, байлығы ла күп булған был Иҙелбаев Сәфәрҙең. Үҙен ҡулға алғас, ниндәйҙер кешеләр килеп, уның өйөндәге ҙур һандыҡты сығара алмай интеккәндәрен халыҡ йыйылып ҡарап торған. Ишеккә һыймағас, өйөнөң ике тәҙрә араһындағы бүрәнәләрен алып, 10 ир кеше саҡ күтәреп алып сығып, пряжкаға тейәп алып киттеләр.

Бер ҡатыны үлгәс, Гөлзифа исемле ҡатынға өйләнгән була Сәфәр ҡарт. Гөлзифа, ирен алып китеп, яңғыҙ ҡалғас, өйөн алмаштырып, ауыл уртаһынараҡ күсә.Үлгән ҡатынынан ҡыҙ балалары була. Ҡыҙҙарын Азия яғына ниндәйҙер хәлле кешеләргә кейәүгә биреп ебәрә.

Ҡыҙҙарының, Сәфәр ҡарттың ҡатындарының кейемдәре күп була. Уларҙың ҡунаҡҡа барғандағы кейемдәре ныҡ ҡупшы, тәңкәләренең сыңы әллә ҡайҙан ишетелеп торған.

Фахриев Латиф бабайҙан яҙып алынды. Иҙелбаев Сәфәр волость старшинаһы дәрәжәһенә күтәрелә. Уны халыҡ, һуңыраҡ күрәҙәсе булған, тип тә һөйләнеләр. Сөнки ул күп китап уҡыған. Америка һәм башҡа сит илдәр менән бәйленеш тотҡан. Улар менән хат алышҡан. Шул китаптарҙан уҡыптыр инде, оҙаҡламай «тимер аттар йөрөйәсәк», тип һөйләгән.

З.Вәлиди үҙенең егеттәре менән килгәс, уларға йәшәргә урын биреп, халыҡ араһында аңлатыу эше алып барған. Бәлки, шуғалыр ҙа, уны һуңынан ҡулға алалар. Беҙҙең яҡтағы бик күп кенә егеттәр ҙә, ошо З.Вәлиди ғәскәренә ҡушылып сығып киттеләр. Уларға Сәфәр ҡарт аттарын биреп ебәргән икән, тип тә һөйләгәндәр.

Рәсәй менән кем генә идара итмәһен, батша власымы ул, әллә большевиктармы – уларҙың барыһы өсөн дә Башҡортостан сит милләт ҡулындағы майлы ҡалъя булып ҡалған. Шуға күрә уны ҡулға төшөрөү өсөн, ә һуңғараҡ ҡулдан ысҡындырмау ниәтенән, хөкүмәт тарафынан башҡорт халҡына ҡарата ниндәй генә енәйәттәр ҡылынмаған һәм сәйәси аҙымдар яһалмаған? Ә Бөгөн дә XX быуат башы башҡорт халҡы өсөн тарихтың иң ҡанлы осорҙарының береһе булып ҡала. Милләтебеҙҙең яңы аяҡҡа баҫып килгән, үҫеш юлында булған алдынғы интеллигенцияһы һәләк ителә, халыҡ аяуһыҙ ҡырыла. Әммә рухы ныҡты ҡылыс менән генә һындырып булмай бит. Бабичты язалап һәләк итһәләр ҙә, Вәлидиҙе ете диңгеҙ аръяғына олаҡтырһалар ҙа, башҡаларҙы ата-киҫһәләр ҙә халыҡ рухы һынмай. Бөгөн дә халҡының ирке өсөн көрәшкәндәрҙең исемдәрен халыҡ онотмаған, сөнки

тарихы юҡ илдең киләсәге булыуы мөмкин түгел. Ә үткәндәр беҙҙең өсөн оло һабаҡ, аманат ул.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Архив материалдары.

2. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. «Хәтирәләр». Өфө: «Китап», 1996.

3. Зәйнуллин Р. «Яуҙаштарының күҙ алдында уларҙы атып үлтерәләр» // «Аҙна» газетаһы, 2008. 6 март. №9.

4. «Күгәрсен хәбәрҙәре» газетаһы, «Үҙ халҡының азатлығы өсөн көрәшеүселәр. Ағалы–энеле Ғабдулла һәм Хөрмәтулла Иҙелбаевтар», 2007 йыл. 49-51 һандар.

Башҡарҙы: **Ишкинин Данис**
Етәксеһе: **Ишкинина Филүзә Тимерхан ҡыҙы**

НАҘАРҒОЛ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

“Тыуған ерем, ғәзиз ерем!...
Тәүге аяҡ баҫҡан ерем.
Намыҫыңа тап төшөрмәй
Йәшә, тип әйткән ерем.
Бала саҡтың хәтирәһен
Һаҡлаусы һин, тыуған ерем.
Бар белгәнең тик изгелек.
Рәхмәт һиңә, тыуған ерем!

Тыуған яҡ ул – үҙең тыуған төйәктең тирә-яғы. Ул күңелде мәңге үҙенә тартып торған яҡ. Шуға ла беҙҙе уратып алған ер-һыу атамаларының тарихын беҙ өйрәнергә, белергә бурыслыбыҙ.

Борон беҙҙең ата-бабалар: “Һәр кеше үҙ ауылының, халҡының тарихын белергә тейеш”, – тигән һәм үҙ балаларынан ошо ҡағиҙәне үтәүҙе талап иткән. Һуңғы йылдарҙа үҙ ереңдең тарихын белергә теләүселәр күп, ләкин уларҙың һаҡланмағаны бөгөнгө көндө эҙләнеүселәр өсөн ауырлыҡ тыуҙыра.

Ер-һыу атамалары халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, мәҙәниәтен сағылдырған тылсымлы бер көҙгө ул.

Наҙарғол ауылының тарихы эҙенән

Наҙарғол ауылына XVIII быуатта нигеҙ һалынған. Карателдәр менән башҡорттарҙың восстанияһын туҡтатҡандан һуң, яндырылған ауылдар урынына беренселәрҙән булып, *Наҙарғол Ғәлин, Ишберҙе, Ишбай* һәм *Зәмғин* тигән кешеләр килеп ултырған. Уларҙың араһында иң хөрмәт ҡаҙанғаны *Наҙарғол* була, шуға был кешенең исеме менән ауылды атайҙар. Хәрби

топографтың һүрәтләүенә ҡарағанда, 1838 йылда ауыл икенсе төрлө *Сайыр* тип йөрөтөлә. Ул *Мәтәүтамаҡ күле* буйында урынлаша, яңы урынға 1926 йылда күсеп ултыралар. 1980 йылдарҙа Перспективаһыҙ ауылдар рәтенә керетелеп, *Наҙарғол* ауылы бөтөрөлөүгә дусар була. *(Был мәғлүмәт Ишкинина Фәриҙә инәйҙән яҙып алынды)*

Ҡаҙнатау

Сайыр менән Хлебодаровка ауылдары араһында *Ҡаҙнатау* тигән тау бар. Элек ул *Ҡаҙылма тау* тип аталған булған. Еңелерәк әйтелһен өсөн *Ҡаҙнатау* тип йөрөткәндәр. 1917 йылдарға тиклем төрлө файҙалы ҡаҙылмалар ҡаҙып алынған булған.

Ҡыҙыл юл

Ҡаҙнатауҙың эргәһендә *Ҡыҙыл юл* бар. Элек, әлеге Мәләүез районы Аптраҡ ауылы яғынан Ағиҙел йылғаһы аша сығып, Ырымбур яғына киткән юл булған.

Кәсик буйы

Сайыр ауылының эргәһендә генә урынлашҡан *Кәсик буйы* бар. Элек *Кәсик ҡойоһо* булған. Бәләкәй генә шишмәне таҙартып, һыуын эсәләр. Яҙғыһын һыу *Кәсик* буйлап Ағиҙелгә ағып төшә.

Оло күл

Хлебодаровка менән Сайыр ауылы араһында *Оло күл* бар. Уның һыуы бер ҙә ҡоромай. Оло, ҙур булып йәйрәп ятҡаны өсөн *Оло күл* тип атағандар.

Һаҡлау буйы

Ағиҙел буйында кешеләр үҙҙәре ағастар ултыртҡан. Һаҡлап ҡына үҫтергәндәр. Мал да төшөрмәгәндәр, ағастарҙы ҡырҡыу ҙа тыйылған булған. Һаҡлап үҫтергәндәре өсөн *Һаҡлау буйы* тип йөрөткәндәр.

Сания әбей кисеүе

Һаҡлау менән Оло күл араһында Ағиҙел йығаһы аша *Сания әбей кисеүе* бар. Бер инәй ҡыҙын Мәләүез районы Хәсән ауылына кейәүгә биргән дә ҡыҙына барып йөрөр өсөн йылға аша һай урынды һайлап юл һалып алған булған. Уны башҡа кеше белмәгән булған. Шунан бирле *Сания әбей кисеүе* булып ҡалған.

Сыпан буйы

Элек Ағиҙел йылғаһы яҙғыһын ташҡан ваҡытта *Керәсин соҡоро* яғындағы йырынға буйлатып һыу ингән дә күл булып йыйылып ҡалған булған. *Степан* тигән бер ир яҙғы ташҡын ваҡытында һыуға төшөп ағып киткән. Шунан бирле *Сыпан буйы* тип йөрөткәндәр.

Кәрәсин соҡоро

Бер ир ат арбаһында мискә менән кәрәсин алып китеп барған булған. Мискәһе ауып, кәрәсине түгелгән. Шуға *Кәрәсин соҡоро* тип атайҙар икән.

Шулай итеп, ата-бабалар әйтеүенсә, үҙеңдең тыуған яғыңдың тарихын өйрәнеү, белеү һәр кемдең бурысы. Шуға күрә ул быуындан-быуынға тапшырылып торорға тейеш.

Ер-һыу атамаларының тарихын өйрәнгәндә, шәжәрәгә бәйләп өйрәнеү отошло. Сөнки улар ата-бабаларыбыҙҙың баһалап бөткөһөҙ ҡомартҡыһы.

Ҡулланылған әҙәбиәт

Әсфәндиәров А.З. Олатайҙарҙың бар тарихы... Өфө: Китап, 2005.

Шәжәрә байрамдарын ойоштороусыларға кәңәштәр. Өфө, 2010.

Хеҙмәтебеҙ архив документтарына нигеҙләнеп яҙылды.

Йомаҡаева Илүзә Йомағол ҡыҙы

ИЛ ИНӘҺЕ – БӘНДӘБИКӘ

Әүәлге заманда башҡорт иленә сиктәш йәшәгән ҡаҙаҡтар, сапҡын менән килеп, башҡорттоң малын, ҡатын-ҡыҙын талап алып ҡаса торған булған. Шуға күрә башҡорттар уяу торған, төрлө ергә һағауыл ҡуйған. Ҡыйыу егеттәрҙән ҡоралллы төркөмдәр ойоштороп, ил һағын тәьмин иткән азаматтар араһында *Бәндәбикә* тигән бер сая, аҡыллы ҡатын да булған. Был ваҡиғалар яҡынса XII быуатҡа ҡарай.

Бәндәбикәнең торған өйө Күгәрсен районындағы *Ҡойо Мәксүтенең* түбән яғындағы бәләкәй йылға буйында кирбестән һалынған булған, ти. Уның аҡһыл, күкшел, һарғылт төҫтәге матур, бик ныҡ, сыңлап торған еңел һәм семәрле кирбестәре әле лә бар: бер төрлөһөнөң иңе-буйы 20-шәр см, икенсе төрлөһөнөң буйы – 20, иңе 10 см, ҡалынлыҡтары – 5 см. Боронғо башҡорт оҫталары шундай яҡшы кирбес һуҡҡан. Был өй тирмә һымаҡ түңәрәк, башы көмбәҙле, ишек-тәҙрәләре булған.

Бәндәбикә үҙ заманының бик абруйлы, танылҡлы, тәжрибәле, һынсыл, дөрөҫ фекерле ил инәһе булған, ил эше менән ныҡ шөғөлләнгән, асыҡ, иркен йөрөгән. Ил азаматтары унан кәңәш алып, кәңәшен тотҡан, хөрмәт иткән.

Бәндәбикә динсел булған, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмаған. Йәй көнө үҙенең өйө эргәһендәге йылға бөгөлөндә намаҙ уҡый торған булған. Шуғамылыр, әллә бик аҡыллы булғанғамылыр, уны “әүлиә әбей” тип атағандар.

Ҡыш көнө *Бәндәбикә* кирбес өйөндә ҡышлаған, ә йәй көнө йылға буйына тирмә ҡороп, шунда йәйләгән. Шуның өсөн был йылғаны “*Бәндәбикә*

йылғаһы" тигәндәр. Ул саҡта был йылға ҙур, тәрән, ағаслы, балығы ҡайнап торған булған, йылға тамағындағы тәрән күлдәр бер ҙә ҡоромаған.

Бәндәбикә үҙенең ире Ерәнсә сәсәндән байтаҡҡа оло булған. Ерәнсә сәсән дә бик мөһабәт, ҡара мыйыҡлы, мыҡты кәүҙәле, сәсән һүҙле, батыр кеше булған. Шулай ҙа *Бәндәбикәнең* кәңәшенән сыҡмаған. Ҡаҙаҡ сапҡындарынан илде һаҡлаған ҡоралды төркөм башында *Ерәнсә сәсән* торған. Уның төркөмө ҡаҙаҡ баҫҡынсыларын һәр ваҡыт кире һуғып, еңеп торор булған. Шуға *Ерәнсә сәсәнде* ҡаҙаҡтар яҡшы белгән. Хатта Әстерхан яҡтарындағы ҡаҙаҡтар ҙа уны иҫтә тотҡан. *Ерәнсә сәсән* быға бик маһайып шаша башлаған.

Бер заман *Бәндәбикә* ҡартайып, ауырып түшәккә ятҡан. Шул саҡта Ерәнсә сәсән *Бәндәбикәгә* әйткән: "Һин ауырыйһың, ҡараусы кәрәк. Йәш кәләш алһам, һине ҡарар ине", – тигән. *Бәндәбикә* әйткән: "Ҡаршылығым юҡ, тик һин минең өсөн түгел, үҙең өсөн ал. Мине бөтә күрше-күлән ҡарай", – тигән. Ерәнсә сәсән әйткән: "Улайһа, мин кәләште дим менән түгел, дан менән алам. Егеттәремдең бөтәһенә кәләш алып бирәм", – тигән. "Нисек бөтәгеҙ бер юлы кәләш алмаҡ булаһығыҙ?" – тигән *Бәндәбикә*. Ерәнсә сәсән әйткән: "Егеттәр менән Яйыҡ аръяғына сапҡын яһап, ҡаҙаҡ ҡыҙҙарын алып ҡайтабыҙ", – тигән. Бәндәбикә әйткән: "Һин ил һаҡлап "батыр" тигән дан алдың. Кеше илен барып баҫһаң, һинән көслө батыр табылыр. Яман эш менән йөрөмә", – тигән. Ерәнсә сәсән был юлы *Бәндәбикәнең* һүҙен тыңламаған, егеттәрен алып, сапҡынға киткән.

Ерәнсә сәсән киткәс, *Бәндәбикәнең* хәле ныҡ насарайған. Ул әжәл сәғәте еткәнен һиҙеп, кәүҙәһен өйҙән сығармаҫҡа, шунда ерләргә васыят әйткән. Ауыл халҡы уның васыятын үтәп, өй уртаһында ҡәбер ҡаҙып ерләгән дә, өйҙөң тышынан ҡурған өйөп ҡуйған.

Бәндәбикәне әүлиәгә һанап, тирә-яҡтағы халыҡ бүтән мәйеттәрҙе лә уның ҡәбере янына ерләй башлаған. Васыят буйынса хатта Ағиҙел буйҙарынан килтереп ерләүселәр булған. Шулай итеп, унда зыярат барлыҡҡа килгән. Бара-бара был йола онотолған, ул урын Мәксүт ауылы зыяраты ғына булып ҡалған.

Ерәнсә сәсән ҡаҙаҡ еренә барып ингәс, ҡамауҙа ҡала, бик ҡаты һуғыш ҡуба, байтаҡ кеше һәләк була. Иҫән ҡалған башҡорт егеттәрен ҡаҙаҡтар әсир итеп, майҙанға килтерә. Шунда аҡһаҡалдар: "Башҡорт батыры ҡаҙаҡ батыры менән көрәшһен. Башҡорт батыры еңһә, улар бөтәһе лә азат ителә. Ҡаҙаҡ батыры еңһә, *Ерәнсә сәсәндең* күкрәгенә ултырып, бысаҡ ҡаҙай, ә ҡалғандары ни булғанын һөйләр өсөн ҡайтып китә", – тип хөкөм сығара. Хөкөмдө әйткәс, *Ерәнсә сәсәндең* алдына ҡаҙаҡ батыры килеп баҫа. Ул дейеү бәрейе кеүек ҙур кәүҙәле, бүрәнә һымаҡ йыуан беләкле, ҡап-ҡара ҡурҡыныс битле була. Ике батыр көрәшә башлай. Уларҙың көрәшкән ере йәм-йәшел болондан тап-таҡыр тупраҡҡа әйләнә, төшлөктәге ҡояш кислеккә ауыша. Ахыры, ҡаҙаҡ батыры *Ерәнсә сәсәнде* әйләндереп һуға ла, күкрәгенә ултырып, ҡынынан хәнйәрен һурып ала. Шул саҡ *Ерәнсә сәсән* Бәндәбикәнең һүҙен иҫенә төшөрөп,

ҡысҡырып көлөп ебәрә. “Нишләп көләһең?” – ти ҡаҙаҡ батыры. *Ерәнсә сәсән* әйтә: "Минең *Бәндәбикә* тигән әбейем бар. Шул әйткәйне, һин үҙ илеңдә – батыр, кеше илен баҫһаң, һинән көслө батыр табылыр, тигәйне. Һүҙе дөрөҫкә сыҡты”, – ти. “Ай, әбейең әүлиә икән, аҡыл эйәһе икән, шуның хаҡына һеҙҙе ебәрәбеҙ!” – ти ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары.

Ерәнсә сәсән егеттәре менән хурлыҡҡа төшөп, *Ҡойо Мәксүтенә* ҡайтып ингән. Ҡайтып инһә, *Бәндәбикә* үлгән, сапҡында ятып ҡалған егеттәрҙең ата-әсәһе: “Ҡайҙа ҡалдырып ҡайттың беҙҙең уландарҙы?” – тип илай-илай уны һырып алған. *Ерәнсә сәсән* быға түҙмәгән: *Бәндәбикәнең* үлеү ҡайғыһынан, ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәшенән, үҙенең еңелеү хурлығынан ни эшләргә белмәй, һырт яғына сабып сығып киткән. Йән-фарман сабып барып, ул аты менән *Көнщәт тауының* аръяғындағы бейек ҡаянан һикергән, ҡая башындағы ташта атының тояҡ эҙҙәре генә уйылып ҡалған. Халыҡ *Ерәнсә сәсәнде* ил алдындағы элекке хеҙмәттәре өсөн хөрмәтләп, аты, эйәр-өпсәне, уҡ-һаҙағы менән бергә һалып ерләгән, ҡәберенең өҫтөнә ҡорған өйгән. *Ерәнсә сәсәндең* ҡәбере Ағаслы Үрген йылғаһының уң яғында, Үргенгә ҡойған *Наҙы* тамағынан үрҙәрәк, *Ҡоро Урыҫайға* барған юлдың аҫ яғында, тау моронда урынлашҡан. Элек ул ҡәбер таш менән уратылған булған. Эргәһенә йәйләүҙә үлгән кешеләр ерләнгән. Хәҙер Үрген халҡы ул ерҙе һөрөп бөткән.

Йомаҡаева Илүзә Йомағол ҡыҙы

МӘҠСҮТ МЕНӘН ЕРЕКЛЕ АУЫЛЫ ТИРӘҺЕНДӘГЕ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Ҡыҙҙар тәслибәһе

Мәҡсүт ауылының көнсығышында ҡалҡыу ер булған. Хәҙер унда Октябрь совхозының Үҙәк бүлексәһе урынлашҡан. Яҙ көнө ул ҡалҡыулыҡта ҡар иртә ирегән. Шуға шул ҡалҡыулыҡҡа көндөҙөн бәләкәс малайҙар һәм ҡыҙҙар йөрөгән. Улар төрлө уйындар уйнағандар, уйынсыҡтарын йөрөткәндәр. Балаларҙың сар–сор тауыштары ауылға ишетелеп торған. Уларға ҡушылып ҡоштар ҙа һайраған. Ололар шат тауыштарға ҡыуанғандар. Ә кистәрен ошо ҡалҡыулыҡта йәштәр йөрөгән. Улар ҙа уйнағандар, йырлағандар. Йәштәрҙең йырҙары Мәксүт ауылына ишетелгән. Ололар уларҙың йырҙарын ишетеп, йәшлектәрен иҫтәренә төшөрөп, күңелдәрен күтәргәндәр. Ошо уҡ урында “Кәкүк сәйе”, “Ҡарға бутҡаһы” һәм башҡа байрамдарҙы ла үткәргәндәр. Был ер бөтәһенә лә оҡшаған. Ошо ҡалҡыулыҡты ололар *“Ҡыҙҙар тәслибәһе*” тип йөрөтә башлаған.

Ҡайынлы туғай

Эйек йылғаһы буйына, ауыҙҙарына нимәлер эләктереп, ике ҡош осоп төштө. Улар емдәрен һыуға төшөрөп ебәргәндәр ҙә икәүләшеп ҡайҙа барырға, нимә эшләргә белмәй аптырап, бер-береһенә ҡарап йырлаша башлағандар.

Береһе :

– Ҡыйын бында, ҡайһылай ҡыйын бында, – тип соролдаған.

Икенсеһе :

– Әйҙә тиҙерәк, тиҙерәк аҙыҡ эҙләйек, – тип тауыш сығарып һайраған.

Кемдер килеп тыңлап торған был ҡоштарҙың һайрауын. Был туғай һабантуй үткәргән ерҙән өҫтәрәк урынлашҡан. “*Ҡыйын*” тигән һүҙҙе “*ҡайын*” тип аңлап, был ерҙәрҙе “*Ҡайын туғай*” тип йөрөтә башлағандар.

Бер нисә йылдан үҙҙәренә бирелгән исемде раҫлағандай, йылға буйҙарының ике яғынан да матур бейек ҡайындар үҫеп сыҡҡан.

Ҡойо ауылы

Элегерәк заманда Мәҡсүт ауылының исеме *Ҡойо* булған. *Ҡойо ауылы* бик бәләкәй, бер генә урам булған. Ни өсөн *Ҡойо ауылы* тип атағандар икән? Шул оҙон булмаған урамда бысраҡ, батҡаҡ һәм ҡойо булған. Ауылдың көнсығышында бик күп күлдәр бар. Яҙлы–көҙлө, көслө ямғырҙа был күлдәр ташып, ауыл урамын бысратҡан. Шуның өсөн Мәҡсүт ауылын *Ҡойо ауылы* тип атағандар.

Ҡойо башы шишмәһе

Мәҡсүт ауылында бик бәләкәй генә шишмә бар. Уның исеме *Ҡойо башы шишмәһе.* Ни өсөн улай тип аталған?

Борон Мәҡсүт ауылының исеме Ҡойо ауылы булған. Ҡойо ауылының тирә–яғында бик күп шишмәләр, туғайҙар, йылғалар, күлдәр, яландар булған. Ауылдың башындағы бер шишмәнең һыуын халыҡ яратып эскән. Был шишмәнең һыуы шифалы һәм тәмле икән. Кешеләр уның янында ултырып, ял итеп, хәл йыйып киткәндәр. Ауыл халҡы уға ҡыуанған һәм уны һаҡлаған. Шишмә Ҡойо ауылының башында булғанға, халыҡ шишмәне *Ҡойо башы шишмәһе* тип атаған. Мәҡсүт ауылының төньяғында, картуф баҡсалары арьяғында, сылтырап ҡына ағып яткан шишмә – *Ҡойо башы шишмәһе* инде.

Сегән яры

Элек Мәҡсүт ауылы артындағы күл буйына сегәндәр килеп төпләнгән булған. Сегән халҡы бик күңелле халыҡ, уларҙың йырлаған тауыштары ауылға яңғырап торған. Ауыл кешеләре сегәндәргә өйрәнеп киткән. Һәр кис һайын уларҙың йырлағандарын, бейеүҙәрен барып ҡарай торған булғандар. Тик улар төндәрен ауыл малдарын, нәмәләрен урлап, халыҡҡа зыян килтергән. Сегәндәр бер урында ғына йәшәй торған халыҡ түгел. Бер–ике ай шунда йәшәгәндән һуң улар, тейәлешеп, күсеп киткәндәр. Шунан һуң был ярҙы *“Сегән яры”* тип йөрөтә башлағандар.

Рәхим уяҙы

Элек-электән һәр башҡорттоң үҙенең айырым ере булған. Мәксүт менән Ерекле араһындағы баҫыу *Рәхим* тигән бер кешегә эләккән. Баҫыу ситендә шишмәле, туғайлы уяҙ булған. Ауыр эштән һуң шул уяҙҙа ял иткән, сәй ҡайнатып эскән. Ауылдаштары *Рәхимде* яҡшы кеше тип хәтерләй. Ул кешеләргә үҫтергән игененән бер аҙ өлөш биргән һәм уның был эше кешеләргә бик оҡшаған. Рәхимдең ерен һәм үҙен дә маҡтағандар. Ул ҡартайғансы шунда иген иккән, үҙенең эшен ташламаған. Рәхим үлеп киткәс, ауыл халҡы уны онотмаған, һәр ваҡыт маҡтап иҫкә алған. Шул уяҙға *Рәхимдең* исемен ҡушҡандар.

Сәфиулла яланы

Элек-электән минең атай–олатайҙарым нәҫеле дан тотҡан. Ҡасандыр ошо Мәксүт ауылы *Ҡойо* исемен йөрөткәндә Сәфиулла олатайым старшина булған. Уның үҙенең ерҙәре, яландары күп булған. Малды күп тотҡан. Уның Ҡәфтәргән исемле улы тыуған. Улы үҫкәс, атаһына ярҙам иткән. Атаһы үлеп киткәс, Ҡәфтәргән олатайым атаһының донъяһын үҙе көткән. Ауылда колхоз барлыҡҡа килгәс, олатайым колхозды күтәрер өсөн аттарын, һыйырҙарын биреп ярҙам иткән. Илдә рускулачивание башланғас, олатайымды, кулак һанап, ҡулға алғандар. Ғаиләһендә балалары күп булған. Үҙен Өфөгә алып китеп атҡандар. Мал–тыуарын, баҫыу, яландарын тартып алғандар. Балаларын йәтим ҡалдырғандар. Ләкин халыҡ Сәфиулла старшинаны хөрмәт итеп, уның исеме менән бер яланын йөрөтә. Ауылдың аҡһаҡалдары яланды хәҙерге көндә лә *Сәфиулла яланы* тип һөйләйҙәр һәм онотмайҙар. (Сәфиуллина Р.)

Ҡотоҡ тауы

Ерекле ауылының төньяғында ҙур булмаған тау бар. Был тауҙың итәгендә бик тәмле һыулы шишмә булған. Был шишмәнең һыуы шундай саф, тәмле булған. Ауылдың үҙендә лә ҡотоҡтар булған, тик һыуы татырлыраҡ. Бөтә ауыл сәйгә һыуҙы шул шишмәнән ташыған. Йәй уртаһы еткәс, шишмә ҡорор булған. Шунан шишмә башына ҡотоҡ ҡаҙығандар. Был ҡотоҡтан йыл әйләнәһе һыу ташығандар. Шуның эргәһендәге тауҙы *Ҡотоҡ тауы* тип йөрөтә башлағандар.

Ҡаҙаҡ үлгән уяҙ

Ерекле ауылының көньяғында *Ерекле йылғаһы* ағып ята. Ә көнсығышында бейек–бейек тауҙар бар. Ул тауҙар араһында уяҙҙар бик күп. Шул уяҙҙарҙың береһе – *Ҡаҙаҡ үлгән уяҙ*.

Борон-борон заманда, беҙҙең ҡартайҙар һәм өләсәйҙәр бала ваҡытта, ҡаҙаҡтар дөйә егеп, ҙур арбаға ғаиләһен тейәп, ауыл һайын көтөү көтөп йәшәгәндәр. Улар Ерекле ауылы янына килеп землянка яһап, өй эшләп

йәшәгәндәр. Ҡышҡы һыуыҡта дөйәләре менән утын ташығандар. Шундай көндәрҙең береһендә бер ҡаҙаҡ бабай утынға барғанда уяҙ эсендә туңып үлгән. Ошонан һуң ауыл халҡы ошо уяҙға *“Ҡаҙаҡ үлгән уяҙ”* тип исем ҡушҡан.

Әсегүл

Ерекле ауылының бесәнлеге *Әсе күл шишмәһе* янында. Ундағы бесән йылда уңышлы, ҡуйы була, сөнки уның аша *Әсе күл шишмәһе* аға. Ул шишмәнең һыуы әскелтем – 2-3 % тәшкил итә. Был шишмәнең күл һымаҡ йыйылып ятҡан ере бар, шуның өсөн уны *Әсе күл шишмәһе* тиҙәр. Ҡалған һыуын шишмә Ерекле йылғаһына алып барып ҡоя. Бесәнселәр был шишмә һыуын маҡтай-маҡтай сәй ҡайнатып эсәләр, ҙурыраҡ һауыттарға һалып өйгә лә алып ҡайталар. Быуындары һыҙлаған кешеләр, аяҡ-ҡулдарын тығып ултыралар, шифаһы тейеүе тураһында һөйләйҙәр.

Башҡарҙы: **Йосопбаева Камила Әнүәр ҡыҙы**
Етәксеһе: **Заһирова Зөлфирә Ғәли ҡыҙы**

КҮГӘРСЕН АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМДАРЫ

Һәр кешенең Тыуған иле, тыуған ере – тыуған төйәге була. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, беҙ һәр ваҡыт географик атамалар менән осрашабыҙ. Кеше тормошон географик атамаһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Улар күп ваҡыт адрес функцияһын үтәй. Шулай уҡ географик атамалар халыҡтың тарихын, көнкүрешен сағылдыра. Һәр географик атама ниндәйҙер ваҡиға менән бәйле, шул объекттың үҙенсәлеген һөйләй.

Мораҡ ауылында тыуып үҫһәм дә, мин әнейемдең тыуған ауылы Күгәрсенде бик яҡын күрәм. Унда барырға, туғандарым менән осрашырға яратам. Йәй көндәре тәбиғәттә ял итеү бик күңелле. Минең иғтибарымды йәлеп иткән нәмә – бабайымдың ауыл тирәһендәге ер-һыу исемдәрен ҡыҙыҡ итеп атауы булды. Ҡыҙыҡһынып, мин был турала фәнни-эҙләнеү эше башҡарырға булдым.

Күгәрсен ауылы тураһында

Бай тарихлы районыбыҙға исем биргән *Күгәрсен ауылы* ҙур булмаған Етеболаҡ йылғаһы буйында урынлашҡан.

Күгәрсен ауылы – Күгәрсен районындағы иң ҙур татар ауылы. Ниғмәтулла Ваһаповтың “Күгәрсен тарихы” китабында ауылға бынан 250 йылдар самаһы элек нигеҙ һалыныуы тураһында әйтелә: “Ырымбур губернаторының үҙәккә үтенесе буйынса, 1763 йылда Казандан 120 километр алыҫлыҡта булған хәҙерге Балыҡ биҫтәһе районы Күгәрсен ауылынан 4 ғаилә хәҙерге Күгәрсен районы Күгәрсен ауылы урынына – Етеболаҡ йылғаһы буйына “йомошло татарҙар” (“служилые татары государя”) булараҡ

күсерелеп ултыртылалар. Төп шөғөлдәре – ямщиклыҡ итеү була”. Тимәк, улар ауылға исемде үҙҙәре менән алып килгән. Элегерәк ауылды, йылға исемен ҡушып, *Етеболаҡ Күгәрсене* тип йөрөткәндәр, һуңынан *Күгәрсен* тип кенә йөрөтә башлағандар.

А.З. Әсфәндияровтың “Башҡортостан ауылдары тарихы” китабында *Күгәрсен ауылы* “деревня безземельных башкир припущенников” тип күрһәтелә.

Күгәрсен ауылының топонимдары

Ауылдың тирә-яғында төрлө ер-һыу объекттары күп, уларҙың атамалары ла үҙенсәлекле. Был исемдәрҙе халыҡ йә берәй кеше исеме менән бәйләгән, йә ҡыҙыҡлы, ҡыҙғаныс ваҡиғалар, күренештәр арҡаһында уларға исем ҡушҡан. Ауыл тирәһендәге топонимдарҙы мин төрлө яҡлап тикшерергә булдым, сөнки йылғалар менән бәйле атамалар ҙа, тау исемдәре, ялан, аҡлан исемдәре лә күп кенә.

Гидронимдар

Етеболаҡ йылғаһы. *Етеболаҡ* һүҙе ике өлөштән тора. Ете – һан, *болаҡ – йылға* һүҙен аңлата. *Етеболаҡ* ете йылға тигәнде белдерә. Ысынлап та, был йылға ете йылға ҡушылғандан барлыҡҡа килгән. Бына улар: *Ҡаратал, Япан йылға, Игеш йылғаһы, Баян уйы йылғаһы, Йылан төшкән йылғаһы, Әжембәт аҫты йылғаһы, Ҡыҫҡа йылға.*

Ҡара тал йылғаһы. Йылғаның буйында ҡара төҫтәге талдар үҫә (чернотал), исеме лә шунан килә.

Япан йылға. Иҫке төрки телдә *япан* һүҙе *асыҡ урынды* белдергән. *Япан йылға* бик күп йылдар асыҡ урындан аҡҡан, бынан 25-30 йылдар элек кенә йылға буйлап ҡарағай үҫентеләре ултыртҡандар.

Йылан төшкән йылғаһы. Йылға тирәһендә йыландар күп булған һәм улар йыш ҡына йылғаға төшкән.

Сылтырап аҡҡан моңло тауышына ҡарап, ата-бабаларыбыҙ был йылғаға **Соңғор йылға** исеме биргән. (татар т. *чылтыр – челтер – чеңгер – чоңгыр*).

Шарлама. Етеболаҡ йылғаһындағы шарлауыҡ булған, хәҙерге көндә исеме генә ҡалған. (Күгәрсенден көнбайыш яғында).

Саратүлгән йылғаһы. (татарса әйтелә; башҡортса: *һары ат үлгән*). Колхоздың *Һары* ҡушаматлы ҙур йөк аты булған һәм бесән эшләгән ваҡытта ул йылға эргәһендәге һаҙлыҡҡа батып үлгән. Ошо ваҡиғанан һуң йылға *Саратүлгән* йылғаһы булып ҡалған.

Ауылды икегә бүлеп, бер соҡор ята. Халыҡ телендә ул **Мәсет соҡоро** тип йөрөтөлә. 1785 йылда төҙөлөп, совет осорона тиклем (1939) йәшәп килгән изге йорт исеме менән аталған урын. Бөгөнгө көндә Күгәрсен мәсете *Мәсет соҡоронан* түбәндәрәк, ауыл уртаһында балҡый.

Үлектәр уяҙы. Екатерина II осоронда крепостной крәҫтиәндәрҙе Кананикольск заводына этаплап ҡыуғандар, ә юлда үлгәндәрҙе, халыҡ күҙенән йәшерер өсөн, урман эсендә ерләгәндәр.

Казенный күпере. Етеболаҡ йылғаһы аша һалынған ҙур булмаған таш күпер. Екатерина II ваҡытында һалынған. Күгәрсен ауылынан 4-5 км көнбайышта.

Оронимдар

Уйын тауы. Ауыл ҡаршыһындағы, Етеболаҡ йылғаһы янындағы тау. Иртә яҙ көнө, тау битләүе ҡарҙан асыла башлау менән бала-саға тауға уйнарға сыҡҡан. Кискеһен был тауҙа ауыл йәштәре уйын ҡорған. Был егерменсе быуатҡа ҡараған топоним.

Бензин тауы. Ауылдың *Башмаҡ урамы* яғындағы тау. Колхоз ваҡытында Ырымбур өлкәһе Төйөлгән ҡасабаһынан, ҙур цистерналарға тултырып, яғыулыҡ ташығандар. Баҫыу эштәре барышында техниканы заправкалағандар. Бөгөнгө көндә лә унда буш цистерналар ултыра әле.

МТМ. Бензин тауынан өҫтәрәк, МТМ урынлашҡан тау. (Совет осоро топонимдары).

Оло тау. Күгәрсендән Һаҙ ауылына барғанда һул ҡулда ҡалған бейек тау. (Элек Күгәрсендән Һаҙ ауылына тура юлдан тау аша йөрөгәндәр).

Хәйерсе тауы. Оло тауға ҡаршы ҙур булмаған тау битләүе. Беренсе фараз буйынса, был ерҙә әйбер үҫмәгәнгә тау шулай аталған. Икенсе фараз да йәшәй: аслыҡ йылдарында ауылдан-ауылға бик күп хәйер һораусылар йөрөгән һәм бер ҡышты, Күгәрсендән Һаҙ ауылына барышлай, ошо битләүҙә бер-нисә кеше туңып үлгән. Тауға исем биреүгә ошо ҡыҙғаныс ваҡиға сәбәпсе булғандыр.

Түтәй шыуған тау. Тау исеме XX быуат башынан килә. Бер туған ике ҡыҙ был тауға еләккә килгән һәм, еләк йыйып, ҡайтырға сыҡҡандар. Тау бейек булғанға, ҡыҙҙарҙың береһе атлап төшөргә ҡурҡып, ҡылғанлы тауҙан ултырып шыуып төшкән. Атама ошо хәлгә бәйле. (тат. *түтәй* – апай, инәй).

Агоронимдар

Урталыҡ. Ауылдың түбән осондағы таллыҡ эсендәге аҡлан. Аҡлан ҡыуаҡлыҡ эсендә урталыҡ ерҙә урынлашҡан. Һуғыш, һуғыштан һуңғы йылдарҙа бик күптәрҙе йыуа, ҡуҙғалаҡ, һыйыр теле, ҡаҡы, балтырған менән һыйлап, аслыҡтан алып ҡалған *Урталыҡ*.

Урталыҡтан йыраҡ түгел **Ҡайынкүл (Саңлау)** тигән туғай бар. Элек бында күл булған, ҡайындар үҫкән.

Туҡмаҡ. Күгәрсен – Мәксүт юлындағы күперҙең аҫҡы яғы. Дөмбәй ауылына тиклем һуҙылған ҡамыш үҫкән һаҙлыҡлы урын. Ҡамыштың сәскәһе туҡмаҡҡа оҡшап тора.

Ҡар үҙәк соҡоро. Күгәрсен – Сирбай юлының һул яғы.

Ҡар үҙәк эсе. Күгәрсен – Дөмбәй юлының өҫкө яғы. “Ҡарлы үҙәк”тән алынған. Ҡар һыуы аҡҡан уяҙ.

Балта ҡулы. Күгәрсендән Ҡаран ауылына барған юлда. Балта һабына оҡшап торған урын. Халыҡ телендә: “Балта ҡулының өҫ яғы”, “Балта

ҡулының аҫ яғы". Тимәк был урында оло юлдың өҫкө һәм аҫҡы яҡтары тураһында һүҙ бара.

Антропотопонимдар

Әбйәлилов йорто. Һуғыштан һуң ауылдың *Әбйәлилов* тигән кешеһен урман ҡарауылсыһы (лесник) итеп ҡуялар. Йорт һалып, донъя ҡороп, бер нисә йыл ул ғаиләһе, балалары менән урманда йәшәй, эшләй. Балалары Үрген башланғыс мәктәбенә уҡырға йөрөй. Ошо урынды хәҙер *Әбйәлилов йорто* тип йөрөтәләр. Элекке Үрген ауылы тирәһен *Үрген* тип атайҙар.

Сафия йәйләүе. Атаманың килеп сығышы быуат башына ҡарай. Йылан төшкән йылғаһынан өҫтәрәк урынлашҡан. Сафия исемле ҡатындың ял иткән йәйләүе булған, имеш. Бик матур урын.

Әхмәҙи урманы. Урман ауыҙына етәрәк, уң яҡта. Элек *Әхмәҙи* исемле кеше ҡыш көнө утынға барғанда туңып үлгән.

Дримонимдар

Ҡырлы ҡыуаҡ. Балта ҡулынан 2-3 саҡрым өҫтәрәк урынлашҡан. Асыҡ ялан уртаһында ҡыуаҡлыҡтар үҫә.

Дромонимдар

Завод юлы. XVIII быуат аҙағы, XIX быуат башында Ырымбур менән Кананикольск заводын тоташтырған юл. Ҡайынкүлдән бер километр тирәһендә был юл икегә айырылған. Береһе *Ишбирҙе* ауылы аша, икенсеһе *Күгәрсен* аша уҙған. Был юлдан арестанттарҙы Себергә бығаулап ҡыуғандар. Крепостной крәҫтиәндәрҙе Кананикольск заводына ошо юлдар аша оҙатҡандар.

Был хеҙмәтемдә мин Күгәрсен районы *Күгәрсен ауылы* топонимдары тураһында яҙҙым. Ер-һыу атамаларын өйрәнеп, беҙ быуындар бәйләнешен нығытырға, ата-бабаларҙан ҡалған мираҫты, тарихыбыҙҙы һаҡларға, киләсәк быуындарға еткерергә тейешбеҙ.

Эшемде башҡарып сығыуҙа миңә уҡытыусым Заһирова Зөлфирә Ғәли ҡыҙы, ауылдағы туғандарым, күршеләр ярҙам итте. Ер-һыу атамаларынан күренеүенсә, ауыл халҡы ил тарихынан ситтә ҡалмаған.

Ҡулланылған әҙәбиәт

Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 3. Уфа: Китап,1997.

Ваһапов Н.Х. Күгәрчен тарихы. Инновацион технологияләр үзәге, Казан. 2014.

Википедия, http://ru.wikipedia.org/wiki

http://www.onlinedisc.ru/slovar/fasmer/s.html

Башҡарҙы: **Йәрмөхәмәтова Лиә Рәмил ҡыҙы,** 8-се класс
Етәксеһе: **Сынғыҙов Илдар Зәһир улы**

БАЙ (ТУЙӨМБӘТ) АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

“ Һай, тыуған ер, ғәзиз ер!..
Ата-бабам баҡкан ер.
Тәүге һулыш алғас та
Бәхет таңым атҡан ер!”.

Тыуған яҡ ул – һин тыуған төйәк һәм уның тирә-яғы. Ул күңелде мәңге үҙенә тартып торған яҡ. Кешенең ата-әсәһе кеүек Тыуған иле лә берәү генә була, һәр кемгә үҙ тыуған яғы ғәзиз. Үҙ еремдә – үҙ йортом, мине яратҡан ата-әсәм бар. Иң йылыһы – мине йылыткан өй усағы, иң матуры – минең тыуған өйөм, иң йәмлеһе – тыуған яғым тәбиғәте. Шуға ла беҙҙе уратып алған ер-һыу атамаларының тарихын беҙ өйрәнергә, белергә бурыслыбыҙ. Мин З.Биишева исемендәге төп дөйөм белем биреү мәктәбендә белем алам, шуға ла оло әҙибәнең тыуған ауылының ер-һыу атамалары тураһында яҙырға булдым. Үҙем был ауылдан булмаһам да, туғандарыма йыш ҡына килеп йөрөйөм.

Туйөмбәт ауылы Эйек йылғаһының уң яҡ яры башында урынлашҡан. Ауыл эргәһенән Мораҡ менән Иҫәнғолдо тоташтырған асфальт юл үтә. Ауыл тарихын өйрәнеүгә күп көс түккән Ғибаҙулла Биишев үҙ хәтирәләрендә түбәндәгеләрҙе яҙа: «*Туйөмбәт* бер-нисә ағай-энеһен эйәртеп, Эйек буйына (хәҙерге Күгәрсен районы) килеп ултыра. *Байулы ауылын* ҡора. Шул тирәлә үк *байулы бөрйәндәренең* ике-өсәр генә өйлө *Ҡарагорһаҡ, Мерәҫ ауылдары* булған була. *Туйөмбәт* уларҙы ла үҙ эргәһенә күсерә һәм ҙурайып киткән ауылға «*Туйөмбәт*» исеме ҡуша». (Бейешев, 132-се бит).

Борон беҙҙең ата-бабалар: «Һәр кеше халҡының, үҙ ауылының тарихын белергә тейеш», – тигән һәм балаларынан ошо ҡағиҙәне үтәүҙе талап иткән. Һуңғы йылдарҙа үҙ ереңдең тарихын барларға теләгәндәр күп, ләкин уларҙы ошоға тиклем яҙып алып, һаҡлап ҡалмау бөгөнгө көндә эҙләнеүселәр өсөн ауырлыҡ тыуҙыра.

Ер-һыу атамалары халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, мәҙәниәтен сағылдырған тылсымлы бер көҙгө ул. Артабан һүҙебеҙ *Бай (Туйөмбәт) ауылының* тирә-яғындаҙы атамалары тураһында булыр.

Зәлифә ҡайыны

Яғалау башында үҫкән бер ҡайын ул.

Бай (Туйөмбәт) ауылының бер ҡыҙы кейәүгә сығып, йәрәшкән егете оҙатып алған көндө ҡыҙ шул ҡайын янына иптәштәре, әхирәттәре менән осрашып, уйын ойошторғандар. Ҡыҙҙар ҡайынды тәңкәләр, мәрйендәр тағып биҙәгән. Егет ҡыҙҙы алып киткән, ә ҡайын биҙәлгән килеш тороп ҡалған. Был

ҡайынды бер нисә йыл элек ситтән килеп кемдер ҡырҡып алған. Урынына яңынан бер ҡайын үҫеп сыҡҡан. Уны ла *Зәлифә ҡайыны* тип атайҙар.

Сәлих тирәге

Эйек йылғаһының кисеүенән сыҡҡас та, тирәктәр бар. Шуның береһен **Сәлих тирәге** тип йөрөтәләр. *Сәлих* исемле уҙаман солоҡ күтәреп ҡорт ҡундыра торған булған. Һуңынан был тирәк Эйекте тура йырған ваҡытта ҡолаған. Икенсеһе Мәҡсүт юлының уң яғында ҡалды. (Хөсәйенов, 115-117-се бит.

Саталы тирәк

Ауыл эргәһендә бер тирәк бар. Уны *«Саталы тирәк»* тип атайҙар. Уның йәше йөҙ илленән артыҡ булған, тип баралар. Заманында йәштәр шул ағас тирәһендә уйындар ойошторған. Өлкәндәр һөйләүе буйынса, Хисмәт исемле бер бабай, тирәк сатына ултырып, арымай-талмай гармунда уйнап, Зәйнәб Биишеваны ла бейеткән. Һабантуйҙар ҙа ошо тирәк эргәһендә үткәрелгән. Әлеге көндә был тирәк юҡ инде. Уның эргәһендә бер йәш тирәк үҫә. (Хөсәйенов, 115-117- се бит).

Ҡаҙаҡ ураһы

Сәлих тирәгенең һул яғында ҙур ғына туғай бар. Бер ҡоролоҡ йылында, Бай ауылы (Туйөмбәт) ҡарттары менән һөйләшеп, бында ҡаҙаҡтар килеп ултыра. 4-5 ғаилә, *землянка* ҡаҙып, 5-6 йыл йәшәп китәләр.

Наҙар таллығы

Ауылдың көньяғында, Эйектең уратмаһында урынлашҡан ҙур ғына таллыҡ. Назаркин ауылы янында булғанға шундай исем биргәндәр.

Күсем ҡыуағы

Был урын ауылдың көньяҡ-көнбайышында. Борон Бай ауылы (Туйөмбәт), Ай-һай Мөрсәләй халҡы Яйыҡ буйына йәйләүгә йөрөгән. Күсенеүселәр, шул урынға еткәс, туҡтап, ауыл менән хушлаша торған булғандар.

Муса соҡоро

Муса исемле бер ҡарттың сабынлығы соҡор урында урынлашҡан булған. Соҡорҙо, тирә-яғын *Муса ҡарт* сапҡанға күрә шулай тип исем биргәндәр. Был урын әле лә бар.

Көршәк тауы

Бай ауылының (Туйөмбәт) көнбайышында бер тау һырты бар, шул тауҙа көршәккә оҡшаған ҙур гына таш бар. Һырттың исеме лә шунан килә. (Хөсәйенов, 115-117- се бит).

Мостафа ҡыуағы

Көршәк тауының көнсығыш өлөшөндә бер ҡыуаҡлыҡ бар. Элек бер ғаилә ураҡҡа төшкәндә тыуған *Мостафа* исемле улдарын сәңгелдәк элеп йоҡлатыр булғандар. Исеме лә шунан.

Мөтөр төбәге

Элекке замандарҙа унда Троицк ауылынан бер балыҡсы килеп, гел ҡармаҡ һала торған булған. Бай ауылы (Туйөмбәт) кешеләре, балыҡсы урыҫтың исеменән сығып, ошо урынды шулай тип йөрөткәндәр.

Сегән яры

Мөтөр төбәгенең көнсығыш ярында сегәндәр табор ҡороп йәшәгәндәр, шуға күрә лә был урынды ла ошолай тип исемләгәндәр.

Кәзүлгән йырғанағы

Ауылдың төньяҡ осондағы йырғанаҡта *Хафиз* тигән бабайҙың кәзәһе батып үлгән. Исеме лә шунан.

Ә бит был тауҙар һәм йылғаларҙың, атай-олатайҙарҙың был изге төйәгенең аҫыл таштар һымаҡ исемдәре йөҙәр, меңәр йылдар буйы халыҡ телендә, күңелендә йәшәй килгән. Географик атамаларҙың төп функцияһы адрес, ориентир булыуҙан тора. Шунан сығып та кешеләр тауға, йылғаға, күлгә, ҡалаға, яланға исем ҡуша. Был ер-һыу атамаларының исемдәре йөҙәр, меңәр йылдар буйы йәшәй, быуындан-быуынға ҡомартҡы булып тапшырыла килә.

Шулай итеп, борон башҡорттарҙа шәжәрәнде, яҡын тирәләге ер-һыу атамаларының исемдәрен, тарихын белеү һәр кемдең бурысы булған. Ер-һыу атамаларын өйрәнеү бер көнлөк кенә, бер кешенең генә эше түгел. Топонимик атамалар, уларҙың аңлатмаһы төрлө ваҡытта, төрлө кешеләрҙән яҙып алынған. Ә киләсәк быуын белһен өсөн уларҙы яҙып, мәғәнәһен аңлатыу һис шикһеҙ иң һәйбәт юлдыр. Эҙләнеү эштәре дауам итә. Ә алға маҡсаттар, бурыстар ҡуйып йәшәү тормошобоҙҙо тағы ла йәмләй, ҡыҙыҡлыраҡ, мәғәнәлерәк итә.

Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге

1. Азаматов Ф. Ата-бабам баҡҡан ер. Өфө, 1999.

2. Хөсәйенов Х. Һәр төбәк тарих һөйләй // «Мораҙым» гәзите, 2013. 115-117 - се һандар.

3. Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Уфа: Китап, 1998

4. Биишев Ә.Ғ. Хәтирәләр // «Ағиҙел», 1994, 6-сы һан. 132-се бит.

5. Усманова М.Ғ., Ғибадуллина А.Ғ. Атамалар тарих һөйләй. Өфө: БДУ, 2003. 100 бит

Башҡарҙы: **Мағизова Илнара Илдар ҡыҙы**, 6-сы класс.
Етәксеһе: **Абсалиҡова Әсмә Әпкәҙир ҡыҙы**

ҮРГЕ БИКҠУЖА ҺӘМ ТҮБӘНГЕ БИКҠУЖА АУЫЛДАРЫНЫҢ ЙӘНЛЕ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Үрге һәм Түбәнге Бикҡужа ауылдарының тарихы

Бикҡужа ауылы Ҡара-ҡыпсаҡ олоҫо вотчиннигы Бикҡужа Юлдашев исемен йөрөтә. Ул 1740 йылда тыуған. Уның улдары Динмөхәмәт, Әлмөхәмәт, Усман, Мәһәҙей, Абдулнасир Бикҡужала йәшәгәндәр.

1795 йылда ауылда 20 йорт булып, һәр береһендә 7-8-әр кеше йәшәгән. Етенсе ревизия мәғлүмәте буйынса йорттар һаны унлап ҡына ҡалған һәм бөтәһе 60 кеше йәшәгән. 1859 йылға ауыл ныҡ ҡына үҫеш ала. Йорттар һаны 98 булһа, ауыл халҡының һаны 582 булған. Шул замандан башлап ул үҙ эсенә биш ауылды алған, ауыл советының үҙәгенә әйләнгән. 1920 йылғы Халыҡ иҫәбен алыу күрһәткесе буйынса ике ауыл билдәле: *Үрге Бикҡужа* һәм *Түбәнге Бикҡужа*. Тәүгеһендә 141 йортта 745 кеше йәшәгән, ә икенсеһендә 60 йортта 303 татар, башҡорт булған. Ауылдың икегә бүленеүе ун туғыҙынсы быуат аҙағына – егерменсе быуат башына тура килә. Әлеге көндә ауылда 263 кеше йәшәй.

Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре

Өндәрҙең үҙгәреүе	*Әҙәби телдә*	*Үрге һәм Түбәнге Бикҡужа ауылдары һөйләшендә*
ң-г	түңәрәк	түгәрәк
м-н	ямғыр	янғыр
н-м	көнбағыш	көмбағыш
о-ө	сос	сөс
е-ә	серәкәй	серекәй
	бүҫер	бүçер
	тупһа	тупçа
һ-ç	танһыҡ	танçыҡ
	бауырһаҡ	бауырçаҡ

	ҡорһаҡ	ҡорçаҡ
ғ-г	сиған	сегән
д-н	миндек	миннек
ç-т	ҡыçҡыс	ҡытҡыс
	баçҡыс	батҡыс
е-йә	етем	йәтим
Өндәрҙең урындары алмашыныуы	ыҡшыу	ышҡыу

Лексик үҙенсәлектәр

Үçемлек, йәнлек атамалары

Рус телендә	әҙәби телдә	һөйләштә
лебеда	алабута	мысай
боярышник	энәлек	йәмшегән
лопух, репейник	тегәнәк	әпертмән
шиповник	гөлйемеш	әлморон
лягушка	тәлмәрйен	баҡа
воробей	турғай	сәпсек

Аш-һыуҙы белдергән һүҙәр

лепешка	ҡабартма	көлсә, йәймә
пирог	бәлеш	ләүеш
рогалики	–	асыҡауыҙ

Туғанлыкты белдергән һүҙәр

братишка	ҡусты	мыртый, мырҙа
брат	ағай	абзый, абый
свекор	ҡайны	ҡайнатай
свекровь	ҡәйнә	бейем

Тормош- көнкүрештә ҡулланылған һүҙәр

двор	ихата	ишек алды, урам эсе
крыльцо	тупһа	болдор, һәндерә
туалет	бәҙрәф	әбрәкәй
скамейка	эскәмйә	ширлек
колодец	ҡоҙоҡ	ҡойо
нары	һике	урындыҡ
потолок	түшәм	түбә

кочерга	болғауыс	тәртешкә
пуговица	төймә	һиҙәп

Кешегә хас сифаттарҙы белдергән һүҙҙәр

маленький	бәләкәй	остоҡ
короткий	ҡыҫҡа	сонтоҡ
упрямый	үҙһүҙле	тырыз
некрасивый	йәмһеҙ	ямаҡай, һөмһөҙ
хвастун	маҡтансыҡ	ҡапаҡ
слабый	йомшаҡ	ебегән

Морфологик үҙенсәлектәре

Күплек ялғауы	-тар/тәр, -дар/-дәр, -лар/-ләр, -ҙар/-ҙәр:	-лар/-ләр, -нар/-нәр:
	Малайҙар, ағастар, килендәр, балалар	малайлар, ағаслар, киленнәр, балалар

Диалект һүҙҙәрҙе өйрәнеү, йыйыу кәрәк эш, сөнки унда халыҡтың тормошо, теле сағыла. Уны бер юлы ғына йыйып бөтөрөү мөмкин түгел. Телде өйрәнгән һайын яңынан-яңы һүҙҙәр табылып ҡына тора. Улар әҙәби телгә ҡамасауламай, киреһенсә, уны тулыландыра ғына.

Көньяҡ диалекты үҙенең лексик составы менән башҡорт әҙәби теленә яҡын, әммә үҙенсәлекле. Ул, үҙаллы айырым берәмек булып, башҡорт теленең диалекттары системаһында билдәле урын алған. Был йүнәлештәге тикшеренеү эштәре киләсәктә лә дауам итһен ине.

Һөйләште тикшергәндә Күгәрсен районы Түбәнге Бикҡужа ауылында ғүмер иткән Ғилманова Фатиха Сәләхетдин ҡыҙының йәнле телмәре яҙып алынды. Фатиха апай биш бала әсәһе, уға 72 йәш.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башҡорт википедияһы.ba.wikiredia/org/wik/Башҡорт

2. Шәкүров Р.З. Башҡорт диалектологияһы. Өфө: Китап, 2012.

3. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000.

4. Асфандияров А.З. История сел и деревень БАССР. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1991.

5. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Төҙөүселәре: И.М.Дилмөхәмәтов, Н.Х.Мәксүтова һ.б. Өфө: Китап, 2002.

Башҡарҙы: **Миңлебаева Ләйсән Хәйҙәр ҡыҙы,** 5-се класс
Етәксеһе: **Һөйөндөкова Миләүшә Ҡотлобай ҡыҙы**

ЮЛДЫБАЙ АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМДАР ҺҮҘЛЕГЕ

Һуңғы йылдарҙа тыуып-үҫкән яҡтың ер-һыу атамаларын һәм уның тарихын өйрәнергә теләгәндәр күбәйҙе. Шуға күрә лә мин эшемдә тыуып үҫкән ауылым – Юлдыбайҙың топонимдар һүҙлеген төҙөргә булдым.

Ер-һыу атамалары – халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, мәҙәниәтен сағылдырған тылсымлы бер көҙгө ул.

“Тарихы булмаған илдең, ерҙең киләсәге лә юҡ”, – тигән бер аҡыл эйәһе. Шуға ла беҙ, башҡорттар, ауылыбыҙҙың, уратып алған ер-һыу атамаларының тарихын өйрәнергә, белергә бурыслыбыҙ. Бына ошо була ла инде тыуған ереңдең рухи хазиналарын һаҡлау.

Ошо тыуған еремдә ниндәй генә тарихи саралар үтмәй: шәжәрә байрамы, “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!”, төрлө осрашыуҙар, милли байрамдар. Мәҫәлән, 1990 йылда ауылыбыҙҙың *Ҡайынтау шишмәһе* буйында “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!” байрамы үтте. Был байрамда яҡташыбыҙ – Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева ҡатнашты.

Юлдыбай ауылының тарихы

Юлдыбай ауылының тарихын өйрәнер өсөн Юлдыбай ауылы аҡһаҡалы Вәхитов Рәхим олатай менән әңгәмәләштем. Ул 1938 йылда Башҡортостандың Күгәрсен районы Юлдыбай ауылында урта хәлле крәҫтиән

ғаиләһендә тыуып үҫкән. *Юлдыбай ауылы* тарихы тураһында Рәхим олатай миңә түбәндәгеләрҙе һөйләне:

Юлдыбай ауылының атамаһы кеше исеменән алынған. Беҙҙең Юлдыбай ауылының тәүге күсерелгән ере хәҙерге урынынан 4-5 саҡрымдай Эйек буйлап өҫтәрәк *Осалаҡ* һәм *Көләмбәт* тигән ерҙә булһа, ауылдың хәҙерге ултырған ерендә *Ҡолбаҡ* тигән ауылда унлап өйлө кеше йәшәгән.

1795 йылғы ревизия мәғлүмәте буйынса, I Юлдыбай, II Юлдыбай ауылдары була. II Юлдыбай – хәҙерге *Һатлыҡ* ауылы. Ошо ауылдарҙан 3-4 саҡрымдан Эйек буйлап өҫтәрәк ултырған юлдыбайҙарҙы III Юлдыбай тип йөрөтәләр. Хәҙерге исеме – Мораҙым. I Юлдыбайҙар килеп ултырған ерҙәрендә 15-20 йылдар йәшәгәндән һуң, ҡолбаҡтар менән килешеп, ер-һыу мул булған ергә – *Тасы* йылғаһы буйына ултырыша башлайҙар, хәҙерге Юлдыбай ауылы. Ауыл йылдан йыл үҫә, матурлана.

Юлдыбай ауылының ер-һыу атамалары

Юлдыбай ауылының биләмәләре ер-һыу атамаларына бик бай. Уларҙы йыйып өйрәнеп, түбәндәге төркөмдәргә бүлдем:

кеше исемдәренән яһалған атамалар;
төҫө буйынса бирелгән атамалар;
объекттың формаһы, ҙурлығы буйынса бирелгән атамалар;
үҫемлек, хайуан исемдәре булған атамалар;
таш, тау һүҙҙәре булған атамалар һ.б.

Йыйылған материалдар Юлдыбай ауылының топонимдар һүҙлеген барлыҡҡа килтерҙе.

Тауҙар

Тәкәл (дөрөҫө **Төкәл)** – ауылды сыҡҡас та уға текәләһең, шуға уны ике яҡлап урап үтәһең.

Кенәстәй (дөрөҫө **Көләстәй)** – ҡояш уны иртәнән кискә тиклем яҡтыртып торғанға. Һуғышҡа тиклем колхоз тауҙы һөрөп ҡарбуз сәскән, ҡарбуз бик уңған.

Арғы һәм Бирге бурсыҡ тауҙары. Уларҙы *Ҡыҫҡа бурсыҡ* һәм *Оҙон бурсыҡ* тип тә йөрөтәләр. Бурсыҡ күп булған, хәҙер ҙә һирәкләп тоталар.

Тирмән мороно. *Оҙон бурсыҡ* аръяғындағы тау, 1870 йылдарҙа ауылдың эсәр һыуы *Тасыны* үҙ итеп, уң яҡ ярын землемерҙар *типтәр ерҙәре* тип иғлан иткәндәр һәм ауылға күсеп килгән сыуаштар ауылдан өс саҡрым өҫтә йырынлы тау морононан аҫтараҡ тирмән ҡорғандар.

Аҡтау. Битләүендә ҡымыҙлыҡ һәм башҡа аҡ сәсле үләндәр күпләп үҫкән, һуңынан ҡылған, ағарып, тау битен ҡаплап алған. Ауылдан һигеҙ саҡрым самаһы.

Ҡарағай тау – ауылға яҡын, оҙонлоғо ике саҡрымдай, 1990 йылдарҙа күпләп ҡарағай үҫә ине, бөгөн иһә һигеҙе генә ҡалған.

Ҡыҙҙар тауы

Ҡаҙартай – ауылдан дүрт саҡрым алыҫлыҡта. Тау йылға исемен йөрөтә.

Ҙур һәм Бәләкәй ҡайынтау – ауыл осондағы тау. Боронғо атамаһы *Ҡолбаҡ* (дөрөҫө *Ҡолбәк*). 1740-1745 йылдарҙа Һаҡмар буйынан бер төркөм халыҡты хәҙерге Юлдыбай ауылына көс менән күсергәндәр. *Ҡолбәк* – ошо ваҡиғаға тиклем йәшәгән шәхес.

Ҡыҙҙар тауы – йәштәрҙең уйынға йыйылған тауы. Ауылдың ҡаршыһында урынлашҡан.

Ҡужағол – ҡыҙҙар тауы менән йәнәш, ҡушарлап ултырған. Хаҡ исеме *Ҡушағыл*.

Ҡарат тауы – оҙонлоғо 20 саҡрым яҫы таулыҡ (плато).Уҫаҡлы уйҙы үтеп китә.

Суҡа таш – морононда бәләкәй мунсалай ташы булған урманлы тау, ауылдан биш саҡрым алыҫлыҡта.

Йыуалы тау – һуғыш йылдарында халыҡ аслыҡ арҡаһында йыуаһын йолҡоп бөткән, хәҙер йыуа юҡҡа тиң.

Урай таш – юл ташлы моронон урап үткәнгә шулай аталған. Тауҙың түбәһендә урайы бар.

Ослo тау (икенсе төрлө *Оло тау*) – ауыл янында йәйрәп ятҡан тау.

Өйәңке тау (дөрөҫө *Эйеңке тау*) – ауылдан өс саҡрымдай алыҫ урынлашҡан тау. Совхоз заманында тотошлай һөрөлгән.

Йылғалар

Оло Эйек йылғаһы – башынан башлап, яҡынса Исем ауылына еткәнсе күп шаршылар яһап эйеп аҡҡанға *Эйек* тип аталған (*сана эйеү, саңғы эйеү* тигән һымаҡ). Яңы Хвалын утарын үткәс, ауылға барған юлда бормаланып аҡҡан йылға. Йылға аша күпер һалынған. Һуңғы йылдарҙа *Эйек* йылғаһы

күҙгә күренеп ҡороно, бәләкәй генә булып ҡалды. Йәй көнө йылға буйынан халыҡ өҙөлмәй. Кемдер һыу инә, кемдер ял итә, кемдер кер йыуа...

Оло Эйек йылғаһы

Тасы – ауылдыың төп эсәр һыуы, боронғо дөрөҫ әйтелеше *Ташы*. *Күрән үҙәк* тигән ерҙән башланып, урман, тауҙар аша үтеп, Эйеккә ҡоя. Төбө ташлы, күп шаршылы, саф һалҡын һыулы йылғаның оҙонлоғо егерме саҡрымдан артыҡ. Яҙ ҡапыл көслө ташып, атылып ағып ятҡанға ҡарттар йылғаны *Ташы* тиҙәр ине (*таша* тигән һүҙҙән)

Ҙур (арғы) Сәкәске – уҫаҡлы уйҙа башланып, эйеккә ҡоя. Егерме саҡрымдан башында *Уҫаҡлы уй йылғаһы*, урталығында *Әсе йылғаһы*, Эйеккә яҡынайғас, *Ҙур Сәкәске* тип йөрөтөлә.

Бәләкәй Сәкәске менән *Ҙур Сәкәске* араһы өс саҡрым самаһы. Ете саҡрым оҙонлоғондағы йылғаның бер нисә исеме бар: башы – *Заһыман шишмәһе*, бер аҙ аҡҡас – *Арҡыры йылға*, ергә сумып килеп сыҡҡас, *Ҡарат йылғаһы*, *Ҙур Сәкәске* менән ҡушылырҙай булып яҡынлашҡас, *Бәләкәй Сәкәске*, ауыл осона килеп еткәс, Малыгин бай (1913-1940) быуаһына ҡойған өлөшөн *Күл* тип йөрөтәләр.

Ҡайын тау йылғаһы – ауыл осонда ғына ағып ята. Боронғо атамаһы *Ҡолбаҡ йылғаһы*.

Ҡарағай тау йылғаһы – ауылға яҡын. Боронғо атамаһы *Ҡоҙаш йылғаһы.*

Ҡаҙартай йылғаһы – кисеүенән ярты саҡрымдай өҫтә, төбө һыу менән ҡаҙылып, ике-өс тармаҡ булып аға. Оҙонлоғо алты саҡрымдай.

Әрҙәнә йылғаһы – борон берәү шул йылға буйында иген сәсеп урғас, көлтәләрен мал теймәһен өсөн әрҙәнә (әүереҫлек) яһап өйгән.

Ырысбикә йылғаһы – ураҡ урғанда бер ҡатын бала таба һәм сабыйҙы шунда ҡойондора. Балаға *Ырысбикә* исеме бирелә, уның исеме йылғаға күсә.

Муйнаҡтай йылғаһы (дөрөҫө *Майныҡтай*) – элек халыҡ *Ҡуштау* йәйләүенән ауылға ҡайтҡан юлда туҡталып, мал-тыуарын ашатҡан. Әсемәһен өсөн һөт, ҡаймаҡ, майҙы йылғала һыуытҡан – *майныҡтаған* (боронғо һүҙ)

Соҡорбүләк йылғаһы – *Ҡаҙартай йылғаһының* ҡушымтаһы.

Бүләкыҙма йылғаһы – ике һүҙҙән тора: *бүләк* (дөрөҫө *болаҡ,* инеш, бәләкәй йылға һәм *ыҙма* һүҙенән.

Күк текә (дөрөҫө **Күк тәкә)** – йылға, оҙонлоғо өс саҡрым тирәһе. Ауылдан биш саҡрымда.

Ҡара һыу йылғаһы – *Олотау мороно* менән *Әрҙәнә йылғаһы* араһында үтә лә яй аҡҡан һыу.

Шишмәләр

Аҡтау шишмәһе – *Аҡтау* эргәһенән аға.

Урай таш шишмәһе – *Урай таш тауы* эргәһенән аға.

Ҡаратау кисеүе шишмәһе – *Ҡаратауҙың* уң яғынан аға.

Күлдәр

Ялтыр күл. Күл өҫтө күҙгә һымаҡ ялтырап ята. Шуға күрә уны *Ялтыр күл* тип атағандар.

Ҡолама аҫтындағы күл. Һаҙлығы менән майҙаны ҡырҡ сутый тирәһе.

Башҡа төр атамалар

Батал ҡаҙған. Ослотауҙың *Тасыға* төкәлеп торған мороно. Уны Әхәт Сәйетбатталовтың өсөнсө быуынындағы Сәйетбаттал ҡарт бынан быуат ярым элек йөк тейәгән ат үтерлек итеп ҡаҙған.

Сиклебай быуаһы (тирмәне) Тасы йылғаһында 1880 йылдарҙа төҙөлгән тирмән быуаһы, урыны әле лә беленеп ята.

Тирмән быуаһы. 1938 йылда Ҡыҙыл Урал колхозы быуған быуа. Тирмәнен Ҡанаҡастан килгән бер тәпәш кенә аҡ һаҡаллы урыҫ ҡарты төҙөгән. Шул уҡ кеше тирмәнде 1953 йылда ремонтлаған. 1955 йылдың йәйендә эшләүҙән туҡтай.

Йыуан ҡайын. Бик боронғо был ҡайын янында заманында һыулау урыны булған. Уның туҙында ғәрәпсә, латинса, башҡортса яҙылған яҙыуҙар булған. Рәхимйән олатай 1954 йылда ул ҡайындың башына менеүе һәм ошондай яҙыуҙы уҡыуы тураһында һөйләне. Унда:

Бөгөн микән, иртән микән
Беҙ һуғышҡа китәбеҙ.
Ҡайталмаһаҡ Юлдыбайға
Елдәр булып иҫәрбеҙ.

6 июль. 1941 тигән яҙыуҙы уҡыуы тураһында һөйләне.

Хәҙер ҡайындың урынында түмһәге генә тороп ҡалған.

Мәүлиха ҡолаған. Аҡтау йәйләүенән һөт-ҡатыҡ тейәп ҡайтып килгәндә *Тасының* текә ярынан аты арбаһы менән йылғаға осҡан.

Ҙур Ҡайынтау

Ауылдың топонимдар һүҙлеген төҙөгәндә анкета үткәрҙем. Анкета 4 һорауҙан торҙо. Уны тултырыуҙа 32 кеше ҡатнашты. Яуаптарҙы таблицаға һалдым.

Һорау	**Яуаптар**		
	эйе	**юҡ**	**% (эйе)**
1. Ауылдың тарихын беләһеңме?	3	29	9%
2. Ауыл эргәһендәге ер-һыу атамаларын, уларҙың ни өсөн шулай аталғанын беләһеңме?	8	24	25%
3. Ауыл эргәһендәге ер-һыу атамалары тураһында легендалар беләһеңме?	18	14	56%
4. Ауыл тирәһендәге ер-һыу атамаларының тарихын өйрәнергә теләгең бармы?	19	13	59%

Анкетаның яуаптары мине ҡыуандырҙы: иптәштәремдең яртыһынан күбеһе ауыл тарихы, уның тирәһендәге ер-һыу атамаларын өйрәнергә теләй икән.

Ә мин тыуған яҡты өйрәнеүҙе артабан дауам итермен, тыуған яғымдың топонимдар һүҙлеген байытырмын тигән уйҙа ҡалам.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Күгәрсен районы: Башҡорт Википедияһы. https//ba.wikipedia.org

2. «Мораҙым»гәзите. 2009. 71-72-се һандар; 2016, 85-се һан.

3. Башҡортостан Республикаһының топонимдар һүҙлеге. Төҙөүселәре: А.А.Камалов, Р.З.Шәкүров, З.Ғ.Ураҡсин. Өфө; Китап, 2002.

4. Интернет селтәре материалдары: wikipedia.org Топонимика.

5. Кусимова Т. “Исемдәр донъяһында”. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991.

Башҡарҙы: **Намаҙғолова Әҙилә Рөстәм ҡыҙы,** 4-се класс
Етәксеһе: **Сәлихова Лилиә Һаҙый ҡыҙы**

ДАУЫТ-ҠАЙЫП АУЫЛЫНЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

Класс сәғәтендә уҡытыусыбыҙ Республикабыҙҙың ете мөғжизәһе тураһында һөйләгәйне. Был турала өйгә ҡайтҡас, өләсәйемә һөйләгәйнем, өләсәйем:

– Беҙҙең ауылда ла бар инде ул матур урындар, – тине. Уларҙы тик күрә белергә кәрәк, – тип өҫтәп ҡуйҙы.

Мине был бик ҡыҙыҡһындырҙы. Ауылыбыҙҙың мөғжизәле урындарын өйрәнеү маҡсаты тыуҙы. Шуға күрә лә мин эҙләнеү эшемде ошо темаға бағышланым: “Дауыт–Ҡайып ауылының ете мөғжизәһе”. Шулай итеп, мин һеҙҙе ауылыбыҙ буйлап сәйәхәткә саҡырам.

Беҙҙең Дауыт-Ҡайып ауылы Күгәрсен районының көньяҡ-көнбайышында урынлашҡан. Уны бейек тауҙар һәм ҡуйы урмандар уратып алған. Беҙҙең яҡ емеш-еләккә, төрлө хайуандарға бай төбәк. Беҙҙә саф һауа, таҙа һыуҙар.

Ауылыбыҙҙың беренсе мөғжизәһе – Ҡабырғай шишмәһе. Ул *Ҡабырғай тауы* аҫтынан килеп сыға. Шуға күрә лә уның исеме шул тау исеменән алынған. Ауылға килгән ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ошо шишмә буйында ҡаршы алалар. Ауылға төшкән килендәрҙе лә ошо шишмә буйына алып киләләр, һыу юлын улар ошонан башлай. Был шишмә һыуы – ауылдың йәшәү сығанағы, эсәр һыуы. Ул бер ҡасан да туҡтамай, аға ла аға. Үҙенең тәмле һыуы менән халыҡты ҡыуандыра. Эшемде яҙған ваҡытта шуны ла

асыҡланым әле. Унан бер минутта 25 литр һыу аға икән. Яҡташыбыҙ Рәмил Йәнбәк яҙған матур шиғыр ҙа бар икән шишмәбеҙ хаҡында:

Ҡабырғай ҙа тауҙы ҡабырғалап
Килеп ингән саҡта ауылға,
Көтөп тора теш сатнатыр шишмә,
Гүйә, үҙе аға ауыҙға.

Ауылыбыҙҙың икенсе мөғжизәһе – **Ҡабырғай тауы**, тип уйлайым. Ул ауылға ҡабырғаһы менән ултыра. Исеме ана шунан килеп сыҡҡан. Был турала минә атайым һөйләгәйне. Йәй көндәре ошо тауҙа беҙ рәхәтләнеп еләк йыябыҙ. Үткән йәйҙә әсәйем менән бер сәғәттә бер күнәк еләк йыйғайныҡ. Был тау тураһында яҡташыбыҙ Венер Йәнбәктең матур шиғыры ла бар:

Ҡабырғайкай тауҙың баштарында
Еләк бешә ине ишелеп.
Йотлоҡ йылдарында көтә инек,
Еләк бешкәндәрен тилмереп.

Ауылыбыҙҙың өсөнсө мөғжизәһе – беҙ уҡыған белем йорто – мәктәп. Беҙҙең мәктәп ике ҡатлы. Ул 2003 йылда төҙөлгән. Ауылымдың беренсе уҡытыусылыры: *Сәйҙә инәй, Шәүрә апай*. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быйыл беҙҙең мәктәп ябылды. Мәктәп бик матур. Ошо уҡ бинала ауылдың китапханаһы ла урынлашҡан.

Ауылыбыҙҙың дүртенсе мөғжизәһе итеп Бөйөк Ватан һуғышында ятып ҡалған ауылым батырҙарына бағышлап асылған стелланы һайланым. Ул 2013 йылда асыла. Беҙ яҙ һайын уның эргәһенә сәскәләр ултыртабыҙ, йыйыштырып торабыҙ.

9 Май – Еңеү көнөндә бында ауыл халҡы ветерандарҙы иҫкә алырға йыйыла. Стелланы асыр өсөн ауыл халҡы күп көс һалған.

Ауылыбыҙҙың бишенсе мөғжизәһе – **мәсет**. Ул 2004 йылда асыла. Ауылдың аҡһаҡалдары һәм ағинәйҙәре йыйыла бында. Ураҙа, Ҡорбан ғәйете байрамдарында мәсеттә аяттар уҡыйҙар.

Ауылыбыҙҙың алтынсы мөғжизәһе – **Сыбар тауы**. Беҙҙең яҡтағы тауҙарҙың иң бейек нөктәһе. Был тауҙан тирә–яҡ күрше ауылдар – Аҙнағол, Торай, Теләүембәт, Бикес, Тәүәкән ауылдары күренеп ята. "Элек ошо *Сыбар тауына* 1 Май байрамында күрше ауылдарҙың йәше-ҡарты уйынға йыйылып, йырлап–бейеп күңел аса инек", – тип һөйләне миңә өләсәйем.

Тыуған яғын бик ныҡ яратҡан икән Рәмил ағай. "Ҡайтырмын" тигән шиғырында *Сыбар тауын* былай тип иҫкә алып үтә.

Ауылымдан сығып киткәнемдә
Мәңге ҡайтмаҫымды белмәнем.
Сыбар тауы, Ҡужый, Сатраларҙы
Һағынып үтер ғүмер, тимәнем.

Ауылыбыҙҙың етенсе мөғжизәһе – уның кешеләре, билдәле улдары һәм ҡыҙҙары, тип уйлайым. Ғәлимә инәй – беренсе Президентыбыҙ Мортаҙа Ғөбәйҙулла улының әсәһе. Республиканың атҡаҙанған машина эшләүсеһе – Ғәлиән Яҡшыбаев, шағир һәм журналист – Венер Йәнбәк, Республикабыҙҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, күренекле шағир – Рәмил Йәнбәк, Ханты–Мансы автоном округы мөфтөйө кәңәшсеһе – Мөхтәр Сәғитов. Теләүембәт ауылында оҙаҡ йылдар математика уҡытыусыһы булып эшләгән Дилара Вәли ҡыҙы һәм башланғыс кластар уҡытыусыһы Миңлегөл апай.

Ауылыбыҙ тураһында яҙыу миңә оҡшаны. Эшемде яҙғанда мин ауыл тураһында күп нәмәләр белеп ҡалдым, үҙем өсөн күп нәмәләр астым. Тыуған яғымдың матурлығы, тарихы һоҡландырҙы. Ауыл китапханаһында Ильяс ағай менән бергә күп яңылыҡтар астым, ауыл халҡы менән аралаштым, анкета тултырҙым.

Уҡытыусыбыҙ Лилиә Һаҙый ҡыҙы менән анкета төҙөнөк. Яуаптарҙы ауыл халҡы тултырҙы. Анкетаны ҡарап сыҡҡандан һуң шундай һығымтаға килдек: беҙҙең фекерҙәр тура килә икән. Ауыл халҡы мөғжизәле урын тиеп 13 объектты күрһәткән, улар араһында минең 7 мөғжизәм дә бар.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Р.Йәнбәк, Х.Әмәкәсов. “Дауыттар һәм Ҡайыптар” китабы. Өфө, 2002.
2. Р.Йәнбәк. ”Аҡ ялан“. Шиғырҙар йыйынтығы.
3. Башкортостан гәзите. В.Йәнбәк. “Ҡабырғай тауы шиғыры“.
4. И.Сәғитов. “Ауылым кешеләре”. Альбом.

Башҡарҙылар: **Рафиҡова Ләйсән Илгиз ҡыҙы,**
Фәизов Азат Азамат улы, 8-се класс.
Етәксеһе: **Мысырғалина Х.Ә.**

БИКҠУЖА АУЫЛЫ ТИРӘҺЕНДӘГЕ ЕР–ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ КИЛЕП СЫҒЫУ ТАРИХЫ

Бикҡужа ауылы бай тәбиғәтле ерҙә урынлашҡан. Уның тарихына килгәндә, түбәндәгеләрҙе бәйән итеп китергә була.

1906 йылғы янғындан һуң, *Түбәнге Сорғояҙ* ауылынан күпләп кешеләр йәйләү булған ерҙәргә килеп, 100-ләп аласыҡ ҡороп ебәргәндәр, көҙөнә йорт

һалып кергәндәр. Хужалыҡты яратып, тырышып эшләгәндәр күп булған. Ауылдың үрге осонда арҡыры үҫкән ҙур ғына ҡыуаҡлыҡ, йәш ҡайындар, муйыллыҡ бар. Ел ыңғайына ауылға хуш еҫ таралған. Ауылдың түбәнге ос яғында ла, артҡы урамда ла тирәк ағастары үҫер булған.

Шулай итеп, йәшеллеккә күмелеп ултырған ауыл барлыҡҡа килгән. Ауыл *Бикҡужа* исемен йөрөтә. Әммә беҙгә, ауыл халҡына, *Сорғояҙ* тигән исеме яҡынараҡ. Сөнки *Сорғояҙға* бәйле бик күп легендалар һәм риүәйәттәр телдән-телгә күсеп йөрөй. Бына шуларҙың береһе.

Сорғояҙ күле

Олатай-өләсәйҙәр осоронан алып, беҙҙең көнгәсә *Сорғояҙ* ҡышын ап-аҡ ҡарға төрөнә. Яҙ етеп, ҡояш йылыта башлау менән ундағы ҡар һыуы, әйтерһең дә, бер ҙур соҡорға йыйыла башлай. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, үтә күренмәле зәп-зәңгәр һыулы күл барлыҡҡа килә. Был күлдә тулы һыулы итер өсөн уны уратып алған *Түңәрәктауҙан, Бирле тауынан* "сор-сор" итеп ҡар һыуҙары түбәнгә табан аға башлай.

Сорғояҙ күле бик шифалы. Шуға ла йәше лә, ҡарты ла яҙ көнө *Сорғояҙ күленә* килеп унда һыу инеп, йә кисеп йөрөйҙәр. Кем дә кем 7 тапҡыр был күлдә булған, ул үҙен ете ауырыуҙан ҡотҡарыр булған, тиҙәр. Етмәһә, *Сорғояҙға* аҡҡоштар, торналар, ҡыр ҡаҙҙары йыл һайын туп-туп булып төшәләр. Уларға һоҡланмаған кеше юҡ. Ә йәй етеү менән, ул төрлө төҫлө хуш еҫле сәскәләргә, үләндәргә төрөнә.

Батыроскан ҡаяһы

Сорғояҙ күленән алыҫ түгел ғорур баҫып тора *Батыроскан ҡаяһы*. Унын тарихы граждандар һуғышына барып тоташа. Беҙҙең яҡтарҙы ла был

дәһшәтле һуғыш урап үтмәгән. Шул осоҙа аҡтар, ауылға бәреп инеп, ҡыҙылдар менән алыша башлайҙар.

Әммә ҡыҙылдарҙың көстәре аҡтарҙыҡына ҡарағанда аҙыраҡ була. Был аяуһыҙ һуғышта аҡтар еңә башлай һәм бер бөртөк кенә тороп ҡалған ҡыҙылармеецтың артынан ҡыуа төшәләр. Әммә был егет, дошмандарҙың ҡулына терелəй эләкмәйем тип, ҡаянан аты менән бергә һикерә лә һәләк була. Шуға ла был ҡаяға *Батыросҡан* тигән исем биргәләр.

Ҡушалаҡ тауы

Ҡушалаҡ – ауылдың эргәһендә генә урынлашҡан тау битләүе. Унда нескә билле ҡайындар, ғорур ҡарағайҙар, имәндәр үҫә. Ә яҙ етеү менән, *Ҡушалаҡ* үҙе бер мөғжизәгә әйләнә. Унда нимәләр генә юҡ! Ә бына исеменә килгәндә, ул *ҡуш улаҡ* тигәнде аңлата. Ҡар ирей башлау менән, тау аҫтына табан, үҙҙәренә юл ярып, бер-береһе менән уҙышып йылға барлыҡҡа килә. Был йылғаның һыуы таҙа, үтә күренмәле, шифалы.

Борон Йомағужа ауылына ошо тау аша йәйәү ҙә, ат менән дә йөрөгәндәр. Был тау уйһыуынан йылға аҡҡан, ә йылға аша таш күпер булған. Тау битләүендә йылғаға ҡуш (ике) улаҡ ҡуйылған. Ул улаҡтар йүкә ағасы ҡайырыһынан эшләнгән булған. Юлаусылар ошо улаҡтар ҡуйылған йылға буйында туҡтап һыу эсеп, ял итеп китә торған булғандар. Тап ошо *ҡуш улаҡ* һүҙбәйләнешенән "*Ҡушалаҡ*" булып китеп, тау исеменә әйләнә, халыҡ телендә һаман һаҡлана.

Бай юлы

Был тау аша электән юл булған. Был юл "Буташ" тауы менән Петропавловка ауылын тоташтырған. (Петропавловка ауылы 350 йорттан торған ҙур ауылдарҙын береһе булған, үҙенең баҙары булған. Белорецк

яҡтарынан тимер рудаһы төшөргәндәр. Ағиҙел йылғаһы буйлап һал менән килеп, халыҡтың башҡа кәсептәре менән етештерелгән тауарҙар һатылған.)

Шулай уҡ *Буташ тауында* етештерелгән "поташ" матдәһе лә ошо ауыл баҙары аша Ағиҙел йылғаһы буйлап һал менән Рәсәй ҡалаларына ебәрелгән.

Айыубүләк тауы

Был тауҙы ҡуйы урман баҫҡан булған, үҙенен ҡыр йәнлектәренә бай булыуы менән дан тотҡан. Шулай уҡ тау битендәге урман үҙенең айыуҙары менән дә, уларҙың күпләп үрсеүҙәре менән дә халыҡта *"Айыубүләк "* тауын барлыҡҡа килтергән. Был тауҙа урманда һунарсылар йәнлектәр тотоу менән шөғөлләнгәндәр.

Юлсыҡҡан тауы

Был тау үҙенең юлы менән үҙенә исем алған. Юл күбеһенсә һунарсылар юлы булыуы менән халыҡ телендә ҡалған, сөнки был юл менән һунарсылар Урал тауының йәнлек менән бай урмандарына йөрөгән. Һунарсылар йәнлек аулап аҙналар буйы Урал тауҙары урмандарында йөрөр булған.

Түңәрәк тау

Был исемгә тау үҙенең түңәрәк булыуы менән лайыҡ булған. Тау битләүендә сейә уңа торған булған, шуға ла уны ҡайһы берәүҙәр *Сейәле тау* тип тә йөрөтә. Был тауҙың иң бейек еренә менһәң, тирә-яҡ ауылдар, тәбиғәт, унда үҫкән урман, яландар ус төбөндәге һымаҡ ҡына күренеп тора. Шулай уҡ был тау битләүендә ер еләге лә күп була.

Буташ тауы

Был тау битләүендә "*поташ*" етештерелгән. (*Поташ* – ул үҫемлек көлөнән калий тоҙҙарынан алына торған һелтеле ҡаты аҡ матдә). Башҡортостанда XVIII быуатта 30-ға яҡын поташ заводтары эшләп килгән һәм 570 тонна поташ етештерелгән; ул Ағиҙел, Кама, Волга йылғалары буйлап бөтә Рәсәйгә таратылған. Поташ (углекислый калий К2 СО3) сукно, һабын, быяла, буяуҙар, тире иләүҙә ҡулланылған.

Халыҡ телендә был тау *Поташ тауынан ,,Буташ"* тип әйтелә башлаған. Уның йылғаһы ла *Буташ* исемен йөрөтә.

Бирле тауы

Тау үҙенең текәлеге менән башҡа тауҙарҙан айырылып торған. Был тау аша ылау менән үтеп булмай, тик йәйәүлеләр генә үтә ала. *Бирле тауы* итәгендә йыуа (ҡыр һуғаны) бик уңа. Шуның өсөн дә яҙғыһын был тау итәге йыуа яратыусылар тауына әйләнә. Ошо тау аша үтеүе бик ҡыйын булғанға, тау халыҡ телендә *,,Бирле" тауына* әйләнгән (*бирләнеү* – киреләнеү).

Был тарихи яҙмаларҙы мин Рафиҡова Ләйсән, ҡартайым Рафиков Ринат Тимерғәле улынан яҙып алдым. Ул 1948 йылда Тубәнге Бикҡужа ауылында тыуған, ауыл советының идара етәксеһе булып эшләгән. Шулай уҡ әсәһе – минең ҡарт ҡарсәйем – Рафиҡова Маһираның һөйләүҙәрен файҙаландым. Ул 1923 йылда ошо ауылда тыуған, ауылдың иң оло кешеһе. Ғүмерен балалар уҡытыуға арнаған. Әлеге ваҡытта уға 95 йәш.

Башҡарҙы: **Садыҡова Айгизә Айрат ҡыҙы**
Етәксеһе: **Хәсәнова Нурзилә Хисмәтулла ҡыҙы**

ТАРИХ – УЛ БЫУАТТАР ХӘҠИҠӘТЕ
(Бәндәбикә кәшәнәһе)

Күгәрсен районы топонимдары илдең хәтер хазинаһы булыуы яғынан уникаль мираҫ. Илде, телде, тарихты белер өсөн ер-һыу атамаларының барыһын да – боронғоларын да, һуңғыраҡ осорҙа барлыҡҡа килгәндәрен дә бик ентекләп йыйыу, өйрәнеү кәрәк.

Башҡортостан тәбиғәте менән танышырға тип килгән кешеләргә беҙ тәбиғәт ҡомартҡыларын күрһәтеп, уларҙың быуаттар төпкөлөнән килгән

тарихи исемдәрен әйтеп бирә белмәһәк, легендаһын һөйләмәһәк, тарихыбыҙҙы, үҙебеҙҙе һанға һуҡмау, топонимик мираҫыбыҙҙы күрәләтә юҡҡа сығарыу була. Шуға ла Башҡортостандың бер мөйөшө булған Күгәрсен районының атамаһын өйрәнеү актуаль проблемаларҙың береһе, тип иҫәпләнем. Шуларҙың береһе – *Бәндәбикә кәшәнәһе.*

Бәндәбикә кәшәнәһе – башҡорт мәҙәниәтенең 15-16 быуат ҡомартҡыһы, *Бәндәбикәнең* ҡәбере өҫтөнә ҡуйылған ҡоролма. *Бәндәбикә* IX быуатта хәҙер Күгәрсен районы Мәҡсүт ауылы булған ерҙәрҙә, ә элек ошо тирәләрҙә йәшәгән ырыу-аралар менән етәкселек иткән. Ырыуын әйҙәп, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торған үтә лә аҡыллы, үҙ халҡының берҙәмлеген һаҡлаусы, яҡлаусыһы ғына түгел, кәңәшсеһе лә булып, «Ерәнсә сәсән» легендаһында исеме бөгөнгө көндәргәсә һаҡланып ҡалған шәхес. Ул үҙ заманында иң оло исемгә – «Әүлиә» исеменә лайыҡ булып, тарих биттәрендә быуаттар буйына һаҡланған.

Риүәйәт буйынса, *Бәндәбикә* бик зирәк аҡыллы ҡатын булған. Ҡаҙаҡтар менән үҙ-ара һуғышты бөтөрөүгә ҙур көс һалған. 1966 йылда археолог Нияз Мәжитов етәкселегендәге археологтар Мәҡсүт ауылына килеп, ауыл ҡарттарының рөхсәте менән ике йәй кәшәнәне ҡаҙалар. Иң һуңында, 1967 йылда, әүлиә-инәйҙең һөлдәһенә етәләр һәм кәшәнәне тергеҙәбеҙ, һөлдәне яңынан ерләтәбеҙ, тип, уның һөйәктәрен алып китәләр. Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, был эш туҡталып ҡала.

Бәндәбикә әбей Мәҡсүт ауылы ерендә, Эйеккә һул яҡтан ҡойған Бәндәбикә йылғаһы буйында йәшәгән. Ул заманда йылғаның һыуы мул булған, балығы күп булған, буйы ҡуйы ағаслыҡ менән ҡапланған.

Йылғаның төньяғындағы ҡалҡыулыҡта *Бәндәбикә ҡорғаны* бар. Ул тирмә өй һымаҡ итеп кирбестән эшләнгән. *Бәндәбикәнең* ҡыш йәшәй торған өйө – ыҙмаһы булған.

Бәндәбикә үҙенән бик күп йәшкә кесе *Ерәнсә сәсәнгә* кейәүгә сыҡҡан. Уны үҙ өйөнә алып ҡайтҡан. *Бәндәбикә* үҙе лә бик абруйлы, һынсыл, батыр, тәүәккәл ҡатын булған. Ил аҙаматтары һәр саҡ уның кәңәшен тотҡан, уны хөрмәт итер булғандар. Берҙән-бер ваҡыт *Бәндәбикә* әбей ауырыҡһына башлай. Ә *Ерәнсә сәсәндең* тап ир ҡорона тулған сағы. Һәр яуҙан еңеп ҡайтыуы арҡаһында күңеле лә үҫә бара бының. *Бәндәбикә* ауырыҡһынып киткәс, был айырыуса йүгәнһеҙләнә. Егеттәрен йыя ла бер көн әйтә: Ҡаҙаҡтар беҙҙең илгә барымта менән күп килделәр. Йәгеҙ әле, егеттәр, бер ҡыҙыҡ булһын, беҙ ҙә уларҙың йәйләүҙәренә барымта яһап ҡайтайыҡ.

Егеттәрҙең ҡайһылары икеләнеберәк ҡалған, ә ҡайһылары:

– Ҡурҡаҡ кеше беҙ түгел, – тип, Ерәнсә сәсәндең һүҙен ҡеүәтләгәндәр. Һүҙҙе төйнәгәс, Ерәнсә сәсән, *Бәндәбикә* янына ҡайтып, үҙ фекерен әйткән икән, *Бәндәбикә* уға ҡаршы төшкән:

– Һин үҙ илеңдә батыр исемен яуланың. Батырлыҡ янына аҡыл да кәрәк. «Ил һаҡлаған – ирәйеп йәшәгән, ил баҫҡан – иҙелгә таянған», – тигәндәр. Ә һин хәҙер, ахмаҡланып, йәштәрҙе насар эшкә ҡотортҡанһың. Ил баҫыу беҙҙең

ғөрөфкә һыймай. Исем һатмағыҙ, «Теймәҫте хоҙай һөймәҫ», тигәндәр. Насар уйҙан кире ҡайтығыҙ! – тип өгөтләгән, ти, ул хәл өҫтөндә ятҡан көйө.

Халыҡ та уның һүҙен ҡеүәтләгән, ти. Бәндәбикәнең ауырыуы тағы көсәйгән. Ул, туғандарын йыйып:

– Хәлем насар, шәбәйә алмам. Әгәр үлеп-нитеп китһәм, өйөмә индереп һалығыҙ ҙа ишек-тәҙрәләрен күмегеҙ. Өйөм минең ҡәберем булһын, – тип васыят әйткән, ти.

Бәндәбикә оҙаҡ та тормай үлгән. Ҡарттар уны, васыяты буйынса, үҙ өйөндә ерләгәндәр. Ә *Ерәнсә сәсән* егеттәре менән ҡамауҙа ҡалған, күптәре үлгән. Ҡаҙаҡтың ил һаҡсылары уларҙы хөкөм майҙанына килтергәндәр. Унда аҡһаҡалдар йыйылған булған. Әсирҙәр баштарын түбән эйеп торалар икән. Улар янына бер ҡаҙаҡ батыры килеп баҫҡан. Шул ерҙә *Ерәнсә сәсән*, Бәндәбикәнең әйткәндәрен хәтерләп, бик ныҡ үкенгән, ти.

Аҡһаҡалдар:

– Батырҙар көрәшергә тейеш. Әгәр батырҙары еңһә, был илбаҫарҙарҙы азат итергә. Әгәр ҡаҙаҡ батыры еңһә, яу менән килгән батырҙың йөрәгенә бысаҡ ҡаҙап үлтерергә, ҡалғандарын ҡайтарырға. Был мажараны улар ҡайтып ил ҡарттарына һөйләрҙәр, – тип, хөкөм сығарғандар. Ҡаҙаҡ батыры Ерәнсә сәсәнде йығып, күкрәгенә ултырған да йөрәгенә ҡаҙарға әҙерләнгән генә икән, Ерәнсә сәсән ҡысҡырып көлөп ебәргән.

– Туҡта! Үлтермәй тор! Ниңә көлә, һорашайыҡ! – тип ҡысҡырғандар, ти, аҡһаҡалдар. Ерәнсә сәсән аяғүрә баҫҡан да:

– Минең ҡатыным Бәндәбикә миңә... – тип әйтеүе була, аҡһаҡалдар:

– Бәндәбикә!.. Беләбеҙ Бәндәбикәне! Хуш! һөйлә! – тиҙәр ҙә бер-беренә ҡарап ҡуялар.

Әллә һин уның ире *Ерәнсә сәсәнме*?

Эйе, мин Ерәнсә сәсән. Бәндәбикә беҙҙе ил баҫыуҙан ҡырҡа тыйҙы. «Ил һаҡлау – ҙурлыҡ, ил баҫыу – хурлыҡ», тине. Мин уның һүҙен тотманым. Егеттәрем менән барымтаға киттем. Уның әйтеүе дөрөҫ булды, хурлыҡҡа ҡалдыҡ. Шуға үҙемдән көләм, – тигән Ерәнсә сәсән.

Бәндәбикәне әүлиә тип ишетә инек, ысынлап та, әүлиә икен. Ҡатының хөрмәтенә барығыҙҙы ла азат итәбеҙ, – тигәндәр ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары.

Былар йонсоп илдәренә ҡайтыуҙары була, улдары үлеп ҡалған кешеләр Ерәнсә сәсәнгә ташланалар:

– Ҡайҙа беҙҙең улдарыбыҙ? – тиҙәр. – Һүҙ тыңламай ни ҡырҙың? Ил тыңламай хур булдың!

Ерәнсә сәсән ҡайғыға ҡала. Хурлығынан ул түҙә алмай атына менеп, көнсығышҡа ҡарай сабып китә лә, Кәңшәт тауына барып менә. Шунан ҡырла буйлап йән-фарман елеп килә лә тау битләүендәге ҡаянан һыбай көйө һикерә. Шунда аты ла, үҙе лә һәләк була. Ерәнсә сәсән убаһы ағаслы Үрген йылғаһының уң яғынан, Наҙый йылғаһының Үргенгә ҡойған еренә яҡын, йылғаны уң яҡлап, Ҡоро Урсай уяҙына барған юлдың өҫ яғында, тәпәш кенә һырт өҫтөндә. Уның тирә-яғы һөрөлгән. Ҡәбер өҫтөндә оҙон таш ултыра.

Ҡәбер өҫтөндәге ҡоролма үлсәме нигеҙендә 8,7х7м, өҫтәрәк һигеҙ ҡырлы көмбәҙ менән тамамлана. Ҡоролма ҡыҙыл кирбестән һалынған, һоро кирбестән шыршы орнаменты менән биҙәлгән. Ишек уйымы 2,25х1,86м. Иҙәнгә саман кирбес түшәлгән.

Бөгөнгө көндә кәшәнә ҡыҙыл кирбестән яңынан һигеҙҡыр формаһында, дүрт аркалы, бишенсе арка ишек итеп төҙөлгән.

Ҡулланылған әҙәбиәт

Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары. Өфө: Китап, 2001.

Башҡорт халыҡ ижады. II том. Өфө: Китап, 1997.

Башҡарҙы: **Сарбулатова Алина Юнер ҡыҙы,** 8-се класс

Етәксеһе: **Камардина Зәйтүнә Миңлегәле ҡыҙы**

КЛАСТАШТАРЫМДЫҢ ФАМИЛИЯЛАРЫНЫҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ МӘҒӘНӘҺЕ

«**Фамилия**» һүҙе латин теленән алынған. Рим империяһында ул башта бер хужаның ҡолдарына ҡарата ҡулланылған. Шунан инде ғаиләнең һәм уның ҡолдарының ҡушаматы итеп әйтелгән. Артабан ғаилә башлығы, ғаилә ағзалары, туғандары бер ҡушамат менән йөрөтөлә башлаған.

Фами́лия (лат. *familia* – ғаилә, нәҫел, ара) – бер нәҫелдән йә бер ғаиләнән икәнде күрһәткән, дөйөм ҡанбаба исеменән алынған атама.

Фамилияның ниндәй сер һаҡлауын белер өсөн уның сығанағына мөрәжәғәт итергә, тарихын өйрәнергә, аңларға кәрәк, сөнки ул эҙләнеүселәр өсөн бай материал булып тора.

Беҙҙең илдә барлыҡ граждандарҙың фамилияһы бар. Улар паспортта, тыуыу, никах тураһындағы таныҡлыҡтарҙа яҙылған. Кеше фамилияһының барлыҡҡа килеүе, уның нисә йылдар йөрөүе менән ҡыҙыҡһынамы икән? Бала саҡтан уҡ беҙ уның барлығын беләбеҙ, әммә уға иғтибар бирмәйбеҙ кеүек. Беҙ уны нисек бар, шулай ҡабул итәбеҙ.

Иң беренсе фамилиялар дворяндарҙа барлыҡҡа килә башлай. Улар 14-15 быуаттарҙа, кеше үҙ ерҙәрен, ҡалаларын, милеккә булған хоҡуҡтарын законлаштыра башлағанда формалаша башлай. Был фамилиялар йыш ҡына кешенең йәшәгән урынынан тыуа, уларҙың эш-фиғеленән сығып бирелә башлай.

Фамилияларҙың барлыҡҡа килеүе

Фамилияларға бағышланған хеҙмәттәрҙе уҡып сыҡҡас, мин класташтарымдың фамилияларын тикшерергә булдым. Бөтәһе 27 фамилия. Минең алда һорауҙар торҙо: Улар ҡайҙан барлыҡҡа килгән? Нимә аңлата? Нисек төҙөлгән? Уларҙы ниндәй төркөмдәргә бүлеп була? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, ғилми–эҙләнеү эшен фамилияларға бағышланған һүҙлектәрҙе ҡарауҙан башланым.

1) *Әхтәмова* фамилияһы ғәрәп телендәге *Әхтәм* исеменән алынған. Ул “йомартлыҡ” тигәнде аңлата. Был фамилияны башлаған кеше үҙенең киң күңеле, итәғәтле булыуы менән айырылып торған, күрәһең. Булған мөлкәтен дә кеше менән бүлешергә яратҡандыр, сөнки һаран булмағанды бар кеше ярата.

2) *Байғазаков* фамилияһы ҡаҙаҡ һүҙенән алынған. «*Бай ҡаҙаҡ*» тигәнде аңлата был исем.

3) *Бакун* фамилияһы ҡушаматтан килеп сыҡҡан. Рәсәйҙең күпселек төбәктәрендә алдарға яратҡан, хәйләкәр, юха, арттырып һөйләргә яратҡан кешене *бакуня* тип йөрөткәндәр. Был фамилия “*юҡты һөйләү*” тигәнде аңлата.

Икенсе версия буйынса, антропонимистар *Бакун* фамилияһын *Абакум* (*Аввакум*) тигән ир кеше исеменән алынған тип иҫбатлайҙар.

4) *Ғәбиҙуллин* фамилияһы мосолман ирҙәренең *Ғәбиҙулла* исеменән килеп сыҡҡан. Уның тәүге өлөшө ғәрәп теленән алынып, “*Ғәбит*” – “*ярҙамсы, ҡол*” тигәнде аңлатһа, икенсе өлөшө “*Улла*” – “*Алла*” тигәнде анлата. Балаға *Ғәбиҙулла* исемен биргән ата–әсә үҙ балаһын ысын мосолман итеп күрергә, бәхетле, аҡыллы булыуын теләйҙер.

5) *Дәминдәров* фамилияһы төрки теленән алынған тип иҫбатлай ғалимдар. Дәминдәр “*каһарман*” тигәнде аңлата. Был исемде йөрөткән кеше

ҙур хыялдар, бейек идеялар менән йәшәйҙер, алдына ҡуйған маҡсаттарына гел генә ирешәләр. Кеше бәхете өсөн үҙ бәхетенән баш тартырға ла күп уйламай көслө, ҡаһарман Дәминдәров фамилияны йөрөткән кешеләр.

6) *Дүсәлиева* фамилияһы татар *Дүсәли* исеменән барлыҡҡа килгән. Ул ике компонеттан тора: “*дүс*” – “дуҫ, иптәш” тигәнде аңлата, “*әли/гали*” – “бейек һәм бөйөк” мәғәнәһен бирә. Бөйөк пәйғәмбәребеҙҙең дүртенсе улы ла *Әли* исемен йөрөткән. Ата-әсә балаһын дуҫ-ишле, бөйөк итеп күрергә теләйҙер.

7) Йәш ғаилә исемлегенә төрки теленән килгән *Зарипов* фамилияһын индерергә мөмкин. Был исем ғәрәп теленән алынған, «*Зариф*» һүҙе «матур, итәғәтле, тапҡыр, сос һүҙле» тигәнде аңлата. *Зарипов* фамилияһы төрки-ғәрәп теленән хасил булған. Оратор оҫталығы булғанды ла аңлата был фамилия. Ата-әсә һүҙгә оҫҡор, кеше менән мөнәсәбәттәрен тиҙ яйға һалыуын, тапҡыр телле булыуын теләп, балаға *Зариф* тип исем ҡушаларҙыр.

8) *Иванов* фамилияһы бала тыуғас та суҡындырғанда бирелә торған исемдәрҙең береһенән алынған. 988 йылдан һуң һәр суҡынған кеше руханиҙан (священник) исем алырға тейеш булған. Был исем уны ғүмере буйы бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалап йөрөтөргә тейеш булған. Ул киң таралған урыҫ исеме *Ивандан* алынған.

9) Төрки теленән *Кәримова* фамилияһы ла алынған Ул *Кәрим* исеменән барлыҡҡа килгән. “Асыҡ йөҙлө кеше, миһырбанлы, киң күңелле, хөрмәтле, ҡәҙерле” тигәнде аңлата был фамилия.

10) *Коротова* фамилияһы ҡушаматтан барлыҡҡа килгән. Буйға бәләкәй кешеләргә «короток» тип атап йөрөткәндәр. *Корот* һүҙенә -ов суффиксын ҡушып, фамилия яһағандар.

11) *Ҡотлосурина* фамилияһы мосолман исеме *Ҡотлосуранан* килә. “Ҡотло” – “ҡот” һүҙен аңлата, “сүрә” – “Ҡөрьәндең сүрәһе” икәнен билдәләй.

12) *Кузовенко* фамилияһы *Кузов* ҡушаматынан алынған. Кузов – кәрзинкә, бәшмәккә йөрөй торған һауыт исеме. Шуға күрә был фамилияның башы һөнәрҙе белдергән исемдән алынған тип уйлайҙар күпселек ғалимдар. Бәлки, улар кәрзинкә ишеү, ҡортсолоҡ менән мәшғүл булғандарҙыр. Ҡортсолоҡ менән эш итеү кузов һүҙенә бәйле, сөнки умарталарҙы машинаның кузовына тейәп, урманға алып барғандар. Кузов һүҙенә –енко суффиксы өҫтәлеп, яңы фамилия барлыҡҡа килә һәм “йәш кеше” тигәнде аңлата.

13) *Наҙарголов* фамилияһы Наҙарғол исеме нигеҙендә барлыҡҡа килә. “Иртә таңдан тороусы” тигәнде аңлата был исем. Киң популярлыҡ яулаған фамилияны йөрөткән кешеләр үҙенең фамилияһы менән мотлаҡ ғорурлана ала.

14) Сиркәү биргән исемдәр араһында *Никитин* фамилияһы ла бар. Яңы тыуған балаға йыш ҡына унын атаһының исемен биргәндәр. *Никитин* – “еңеүсе” тигәнде аңлата.

15) *Нуркаева* фамилияһы төрки теленән килгән. *Нур* – “яҡтылыҡ, нур” тигәнде аңлата, ә икенсе өлөшө “*кай*” – төрки телендә “йәйге ямғыр” булып тора.

16) *Одинцов* фамилияһы баланың эске ғаилә исемдәренән алынған. Оҙаҡ көтөп алынған тәүге ир балаға *Одинец* тип исем ҡушҡандар, тора-бара был исем фамилияға әүерелгән.

17) *Первушкина* фамилияһы ла эске ғаилә исемдәренән алынған. *Первуша* – беренсе тигәнде аңлата. Элек һәр бер тыуған баланы беренсе, икенсе, өсөнсө тип исемләп тә йөрөткәндәр. *Первуша* тора-бара *Первушкина* тигән фамилияға әйләнгән. Ул гел генә “беренсе, баш булырға” ынтылыуҙы аңлата.

18) *Салауатова* фамилияһы башҡорт исеменән килеп сыҡһа ла, тамырҙары ғәрәп һүҙенә барып тоташа. “*Салауат*” һүҙе “доға” тигәнде аңлата. Ғалимдарҙың фекерләүенсә, был исемде күптән көтөп алынған балаға доға уҡып ҡушҡандар.

19) Минең фамилиям *Сарбулатова* төрки теленән килгән. Тәржемә итһәң, “көслө, ҡоростай” тигәнде аңлата. Фамилиям йыш ҡына экиәттәрҙә осрай. Уны батырҙарға ғына ҡушҡандар. *Булат* исемле ҡорос бар, ул үҙенең ныҡ, һығылмалы булыуы менән айырылып тора. Нәк ошо һыҙаттар булһын өсөн, балаға *Булат* исемен биргәндәр. “*Сарлы*” һүҙе “*һырлы*” тигәнде аңлата. Тимәк, минең фамилиям һырлы, матур булат.

20) *Сорокина* фамилияһы киң таралған фамилияларһың береһе. Ул ҡош исеменән барлыҡҡа килгән. Ҡош исеменән яһалған фамилиялар хайуандар, балыҡ исемдәренән яһалғанға ҡарағанда йышыраҡ осрай. Был фамилялар баланы төрлө бәлә-казанан да һаҡлап торған булғандар.

Икенсе төр ғалимдар был фамилияны географик урындан алынған тип раçлай, сөнки элек аристократик ырыуҙарға улар йәшәгән, көн күргән урындарҙың исемен фамилия урынына биргәндәр. Украинала *Сорокино* тигән ҡала бар, бәлки, *Соркиндар* шул ҡалаға нигеҙ һалыусы булғандарҙыр.

21) *Сюпов* фамилияһы татар, башҡорт, үзбәк**,** ғәрәп исеме *Йосоптан* алынған. Ә был исем, үҙ сиратында, *Иософ* исеменән алынған һәм “*Алланың бүләге*” тигәнде аңлата.

22) *Туленкова* фамилияһы *Туленок* тигән ҡушаматтан барлыҡҡа килгән. “Тулить, крыть, прятать” тигән һүҙҙәр уның нигеҙен тәшкил итә. Шуға күрә был фамилияны йөрөткән кешеләр хәйләкәр, алдаҡсы булғандыр, күрәһең.

Икенсе версия буйынса, *Туленок* украин теленән алынған. Ул аҡ икмәккә аҡ май һөртөлгән тигәнде аңлата. *Туленок* ҡушаматын икмәк бешереүсе йәки тәмле ашарға яратыусы ала алған. Артабан был ҡушамат фамилияға әүерелә.

23) *Федина* фамилияһы баланы суҡындырғанда бирелгән исемдән алынған. Урыç ҡанундары буйынса, урыçтар яңы тыуған балаға берәй пәйғәмбәренең исемен бирергә тейеш булған. Сиркәү ҡанундары буйынса

Федор – Феодор грек һүҙенән алынған. “*Теос*” һүҙе “Алла” тигәнде, ә “*дорон* – бүләк” тигәнде аңлата.

24) *Хамзина* фамилияһын йөрөүсе, һис шикһеҙ, үҙенең фамилияһы менән ғорурлана ала, сөнки ул көньяҡ мәҙәниәтендә ҙур урын биләй. Ғәрәп исеме *Хәмзә* “үҙәккә үтерлек әсе” тигәнде аңлата. Был исемде балаларына ҡушҡан ата-әсә, балаһының алла тарафынан яҡланырын, һаҡланырын теләгән һәм мотлаҡ шулай булырына ышанғандар.

25) *Чильдинов* фамилияһы белорус теленән алынған. Был фамилия Рәсәйҙә һирәк осрай. Антропонимистар фекеренсә, был фамилия яңғыҙлыҡ исемдән алынған.

Класс етәксебеҙҙең фамилияһы *Камардина*. Төрки теленән килгән “ҡамыр” һүҙе уның нигеҙендә. *Камарда* ҡушаматын йөрөткән кеше, бәлки, икмәк, бәлеш бешереү менән мәшғүл булғандыр һәм бик ҡунаҡсыл кеше булып дан алғандыр.

Икенсе версия буйынса, был фамилия ғәрәп телендәге *Камалдин* исеменән килә, уның диалект варианты *Камардин*. Был һүҙҙе урыҫ теленә тәржемә итһәң, “ышаныс, инаныс” тигәнде аңлата.

Әхтәмова – йомартлыҡ, Туленкова – хәйләкәр, Федина – ышаныслы, Бакун– күп һөйләй, Сабулатова – һырлы булат.

Класташтарымдың фамилияларын төркөмләү

Мин үҙемсә уларҙы төркөмләргә булдым һәм беренсе төркөмгә Рәсәйҙә киң таралған **яңғыҙлыҡ исемдәрҙән (70%)** барлыҡҡа килгән фамилияларҙы алдым.

ғәрәп теленән килгән: Әхтәмова, Кәримова, Хамзина, Сюпов.

мосолман исемдәренән: Ғәбиҙуллин, Дүсәлиева, Назарғолов, Салауатова, Ҡотлосурина.

белорус исеменән: Чильдинов

ҡаҙаҡ исеменән: Байғазаҡов.

суҡындырғанда бирелә торған исемдәрҙән: Федина, Иванов, Никитин
төрки теленән килгән: Зарипов, Дәминдәров, Нуркаева, Сарбулатова.

Икенсе төркөмгә **һандарҙан (11%)** килеп сыҡҡан фамилиялар: Одинцов, Первушкина.

3 төркөм – кушаматтарҙан барлыҡҡа килгән фамилиялар (11%) : Бакун, Туленкова, Кузовенко.

4 төркөм ҡош исеменән алынған фамилия (4%) : Сорокина

5 төркөм географик урынды билдәләгән фамилиялар (4%) : Коротова.



Фамилияларҙың мәғәнәһе

Әхтәмова – йомартлыҡ, Байғазаҡов – бай ҡаҙаҡ, Бакун – күп һөйләй, Ғәбиҙуллин – Алланың ҡоло, Дәминдәров – ҡаһарман, Дүсәлиева – бөйөк дүҫ, Зарипов – тапҡыр, сос һүҙле, Иванов – аҡыллы, Кәримова – миһырбанлы, Коротова – бәләкәй буйлы, Ҡотлосурина – ҡөрьәндең сүрәһе, Кузовенко – йәш кеше, Наҙарғолов – иртә таңдан тороусы, Никитин – еңеүсе, Нуркаева – йәйге ямғыр, Одинцов – беренсе, Первушкина – тәүге, Салауатова – доға, Сарбулатова – һырлы булат, Сорокина – һайыҫҡан, Сюпов – Алланың бүләге, Туленкова – хәйләкәр, Федина – ышаныслы, Чильдинов – батыр, көслө.

Шулай итеп, фамилияларҙың мәғәнәһе бар. Ул бик ҡыҙыҡ тема. Фамилияларҙа халыҡтың тарихы, ғөрөф-ғәҙәте, уй-фекерҙәре һ.б. сағылған. Фамилиялар фән өсөн бай сығанаҡ.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башкирские шежере. Уфа, 1960.
2. Башкирские шежере. Исследования и публикации. Уфа, 1983.
3. Веселовский С.Б. Ономастикон. М.: 1974.
4. «Рухи байлыҡ - мәңгелек» китабы. Автор: Ғ. В. Әбҡәҙирова.

Интернет сайттары:

1.www.ufalog.ru
2.www.taynafamilii.com\ua
3.www.famili.info

Сәғитов Илгиз Ирәндек улы

ДАУЫТ-ҠАЙЫП АУЫЛЫ ТИРӘҺЕНДӘГЕ ГИДРОНИМДАР

Дауыт-Ҡайып ауылы Күгәрсен менән Көйөргәҙе районы, Ырымбур өлкәһе сигендә, тау-урмандар араһында урынлашҡан. Шуғалыр ҙа ауылдаштарым тирә-яҡтағы йылға-шишмә, тау-урман атамаларын бик яҡшы белә.

Картала ауылыбыҙ урынлашҡан ер, *Бәләкәй Наҡаҫ тауҙары*, ә иң бейек нөктәһе *Наҡаҫ тауы* итеп күрһәтелгән. Халыҡ уны *Башлау тауы* тип йөрөтә, сөнки ошо тауҙан күп йылғалар баш алған: *Юшатыр, Туғыҙтимер, Ташлы, Көплө* һ.б.

Халык эскән төп йылға – *Буҙйылға*. Дөрөҫ атамаһы *Боҙйылға* булырға тейештер, сөнки йылғаның һыуы бик һалҡын, унда йәйен дә һирәк кеше һыу инә ала.

Дауыт-Ҡайып ауылы янында Буҙйылға

Ауылыбыҙға ингән ерҙә генә *Ҡабырғай шишмәһе* тауҙың битенән атылып сыға. Шишмәгә тимер торба ҡуйылып, тирә-йүне таш менән уратып алынған. Күрше Аҙнағол ауылынан тура юлдан, тау ситләп ҡайтып килгән йәйәүле юлсылар, туҡтап, һыуһындарын ҡандыра. Килен төшөргәндә лә тап ошо *Ҡабырғай шишмәһенән* юл башалайҙар. Шишмәнең исеме *Ҡабырғай тауының* исемен йөрөтә. *Буҙйылға* тауҙың бер ситен, яҙғы ташҡында ашап, текә ярға – ҡабырғаға әйләндергән һәм *Ҡабырғай* исеме килеп сыҡҡан.

Ауылдың Өҫкө урамы яғынан *Оҙон сағыл* һәм *Урта сағыл тауҙарынан Берсүмес* менән *Берғашыҡ йылғалары* ағып төшә. Һыуҙары аҙ ғына булып сылтырап аҡҡанға шулай исем ҡушҡандар. Ауылдың Аҫҡы урамының осонда *Сағыл аҫты* йылғаһы ағып килә. Арыраҡ *Һалҡын шишмә йылғаһы* юл башлай. Һыуы бик тәмле, халыҡ, яратып, шундай исем ҡушҡан. Артабан *Билал йылғаһы* юл ала. Улар бер-бер артлы Буҙйылғаға ҡушыла. Ауылдың көньяғынан, Ырымбур өлкәһе еренән, Башлау тауҙарынан *Тубылғы төп, Сатра* һәм *Төбәк йылғалары* юл башлай. Улар, ауылдан өс-дүрт саҡрым өҫтә бергә ҡушылып, *Буҙйылға* исеме ала. Ә *Буҙйылға* ауылдан өс-дүрт саҡрым түбән, *Аҙнағол ауылы* янында *Наҡаҫ йылғаһына* ҡушыла.

Берғашыҡ йылғаһы

Наҡаҫ йылғаһының исемен кемдер русса “Наказать” һүҙенән сыҡҡан, тип күрһәтә (әлбиттә, был хата ҡараш) һәм уны Көйөргәҙе районындағы *Кинйәбай* (Ҡаҙарма) ауылы менан бәйләй. Имеш, батша һалдаттарын казармала наказать иткәндәр. 1764 йылғы Бошман-Ҡыпсаҡ, Сәнкем–Ҡыпсаҡ, Һыуын-Ҡыпсаҡ башҡорттарының Сәйет слободаһы татарҙарына ерҙе ҡуртымға биреу грамотаһында *Ҙур* һәм *Бәләкәй Наҡаҫ* йылғалары күрһәтелгән. Шулай булғас, йылғанын исеме урыҫтар күсеп ултырғанға тиклем бик күптән үк барлыҡҡа килгән булған. Ә *Наҡаҫ* исеме “наҡыҫ”, әҙ һыулы тигәнде анлата. Бөгөнгө көндә бер генә *Наҡаҫ йылғаһы* бар. *Бәләкәй Наҡаҫ йылғаһының* бөгөн нисек аталғанын белеп булмай.

Был грамотала *Әсе йылға* аталып кителә. *Әсе йылға* ауылдан 5-6 саҡрым көнбайышта башлана һәм *Наҡаҫ йылғаһына* ҡушыла. Егерменсе быуат уртаһында *Әсе йылға* буйында *Ворошиловка* тигән урыҫ ауылы була. Урыҫтар Әсе йылғаны *Каменная* тип атап йөрөтә. *Әсе йылға* буйында ташкүмер ятҡылығы ла табыла. Артабан *Бәләкәй йылға* ағып төшә. Был ике йылғала егерме беренсе быуат башында быуалар төҙөлдө.

Әсе йылғала быуа

Ауылыбыҙ янында бер генә күл бар – *«Әсе күле”.* Күл артыҡ ҙур түгел, балығы ла юҡ, сөнки һыуы әсе, тоҙло. Ҡоро йылды күл кибә.

Дауыт-Ҡайып ауылы шағир Рәмил Йәнбәктең, а Кинйәбай ауылы шағирә Тамара Ғәниеваның тыуған ауылы. “*Буҙйылға*”, “*Ҡабырғай шишмәһе*” исемле шиғырҙар һәм йыр ҙа бар.

Мин ҡайҙарҙа бөгөн йөрөһәм дә,
Кендегем бит һиндә, *Ҡабырғай*!
Һине данлап ошо шиғырымды
Ҡабырғаңа ине яҙырға.

Рәмил Йәнбәк “Ҡабырғайтауҙы данлау”.

Яуҙан арып ҡайтҡан батыр һымаҡ,
Сауҡалыҡ та талған тыныс йоҡоға.
Ауыл менән туғай араһында
Тыныс ҡына аға *Боҙйылға*.   (Авторы билдәһеҙ).

Башҡарҙы: **Хөсәйенов Арыҫлан Вәхит улы**, 10-сы класс.
Етәксеһе: **Сәлихова Гөлназ Салауат ҡыҙы**

КҮГӘРСЕН РАЙОНЫ ТӘҮӘКӘН АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Тәүәкән ауылына төньяктан ингән урам. Йәштәр урамы

Ауыл ни өсөн ике исем менән йөрөтөлә?

Тәүәкән ауылы Күгәрсен районының көнбайышында таулы, урманлы ерҙә урынлашҡан. Уны уратып ултырған ауылдар: көнбайышта – Дауыт-*Ҡайып,* төньяҡ-көнбайышта – *Аҙнағол, Чернигов*, төньяҡта – *Теләүембәт, Бикес,* көнсығышта – *Яңауы*л, көньяҡта – Ырымбур өлкәһенән *Алмалы*. Ауылдың икенсе исеме лә бар – *Сәңкем*. Ололар ауылды ошо исем менән йөрөтә. Күрше *Алмалы* ауылында урыҫтар йәшәй. *Сәңкем* тип тормай улар, *Чанка* тип йөрөтәләр.

Ә ни өсөн *Сәңкем* һуң? Сөнки бында *сәңкем-кыпсак* ырыуына ҡараған башҡорттар йәшәй. Был ырыу халҡы башлыса Нөгөш йылғаһы буйында йәшәй. Мәҫәлән, *Арыҫлан, Ерек, Ҡотлобулат, Түбәнге Таш, Кесе Шәрип, Эткөсөк, Әбет* ауылдарындағы башҡорттар тап ошо ырыуға ҡарай. Ә бына шул *сәңкем-ҡыпсаҡ ырыуы* башҡорттары йәшәгән *Тәүәкән ауылы* бөтөнләй икенсе урында, Наҡаҫ йылғаһына ҡойған бәләкәй генә *Күнйәп йылғаһы*

буйында ултыра. Унының күршеһе булған *Теләүембәт* ауылында ла *сәңкем-ҡыпсаҡтар* бар, ләкин улар менән бергә тағы *ҡара ҡыпсаҡ, бошман-ҡыпсаҡ, һауын-ҡыпсаҡ* ырыуҙарына ҡараған кешеләр йәшәй. Тимәк, *сәңкем-ҡыпсаҡ* ырыуы вәкилдәре йәшәгән ауыл Күгәрсен районында берәү – *Тәүәкән* ауылы ғына. Шулай итеп, *Сәңкем* – ҡыпсаҡтарға ҡараған бер ырыу булып сыға.

Ни өсөн халыҡ уны *Сәңкем* тип атай? Фәтих Азаматов үҙенең "Йәнтөйәктә – беҙҙең яҙмыштар" китабында был ауыл халҡы ҡасандыр Нөгөш йылғаһы буйынан күсеп килеп ултырған, тип яҙа. Яңы күсеп килгән кешеләрҙән:

– Һеҙ ҡайҙан? Ниндәй халыҡ булаһығыҙ? – тип һораһалар,

– Беҙ *сәңкем*! – тип яуаплағандарҙыр. Шуға ауылды *Сәңкем* тип атағандарҙыр.

Мәскәүҙәге Рәсәй дәүләт хәрби-тарихи картаһының 1786 йылда баҫылғанында *Бикес, Эткөсөк, Теләүембәт, Ҡайыпҡол* ауылдары янында, хәҙерге *Тәүәкән* урынында *Изяпово* тип яҙылған.

Рәсәй дәүләт хәрби-тарихи картаһының 1786 йыл

1802 йылда сыҡҡан икенсе картала иһә *Кинзяпово* тип яҙылған. Фәтих Азаматов *Кунзяпово* тигәндә хата ебәрелгән тип иҫәпләй. Сөнки *Күнйәп* - ауылдың уртаһынан аҡҡан йылға.

Дәүләт хәрби-тарихи карта. 1802 йыл

Ә бына өсөнсө картала инде “*д.Туваканово*” тип яҙылған, йылға *Сума* тип бирелгән. Тимәк, ауыл исеме йылғаға бирелгән, ә ауыл *Тәүәкән* булып киткән тип фаразларға була. Шулай итеп, *Тәүәкән* исеме ауылға XVIII быуаттан XIX быуатҡа күскән осорҙа бирелгән булып сыға.

Ырымбур өйәҙенең 1799-1802 йылдарҙағы картаһы

Тәүәкән Елебәковтың ауыл старшинаһы булыуы тураһында документтар һаҡланған. Унын абруйлы кеше булыуы, Воскресенский баҡыр иретеү заводы өсөн ерҙәрҙе һатыуы тураһында һөйләп ҡалдырғандар. Башта ул һатылған урында ла ауыл *Тәүәкән* тип аталған, аҙаҡ *Александровка* булып киткән. Воскресенский заводын төҙөгәндә башҡорттарҙы үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәреү күп булған. Шәрип ауылы кешеләре һөйләүенсә, элек *Тәүәкән* ауылы Нөгөштөң уң ҡушылдығы *Ҡандышлы йылғаһы* буйында ултырған. *Тәүәкән* менән *Шәрип ауылдарының* халҡы бер ауыл булып йәшәгән. Завод өсөн ерҙәрен Твердышев тартып алғас, ауылдың бер өлөшө, Нөгөштөң һул ярына күсеп, *Шәрип* ауылына нигеҙ һалған, ә икенсе өлөшө *Тәүәкән* уҙаман етәкселегендә Наҡаҫ буйына күсеп киткән. Йәшәгән урындарынан ҡыуылған ауыл халҡының бер өлөшө *Тәүәкән Елебәков* етәкселегендә Наҡаҫ йылғаһы буйына килеп, *Торай* (хәҙерге *Чернигов утары*) тигән ергә урынлашҡан, тип

һөйләй ата-бабалар. Был матур урынды Тәүәкәндең дуҫы *Буранбай* (хәҙерге *Бикес* ауылы кешеһе) күрһәткән. Ләкин Бошман-Ҡыпсаҡ волосы старшинаһы *Теләүембәт Яуғастин* быға риза булмай һәм сәңкемдәрҙе Күнйәп йылғаһы буйына, хәҙер йәшәгән урынға, күсерә. *Тәүәкән ауылына* нигеҙ 1745-1755 йылдарҙа һалынған.

Тәүәкән – йылға, шишмәләргә бай ауыл

Ауыл дүрт йылға – *Оло, Урта, Арҡыры, Бәләкәй йылғалар* тамағында ултыра. Ошо йылғалар *Күнйәп йылғаһына* ағып төшә. *Күнйәп* йылғаһы ауылды икегә ярып ағып ята. Ауыл еренең төньяҡ өлөшөндә ҙур булмаған *Сәүкә* һәм *Кешегырылған* йылғалары аға. *Оло, Урта, Арҡыры, Бәләкәй йылғаларҙың* исемдәренең бирелеше аңлашыла. *Оло йылға* – мул һыулы, *Арҡыры йылға* ауылды арҡырыға киҫеп аға. *Арҡыры йылғаны* сыҡҡас, Ҡайып ауылына бара торған юл башлана. Ә *Бәләкәй йылғаны* шишмә тип әйтһәң дә булалыр. Бәләкәй йылғаның башы *Ҡойо башы* тип атала.

Ҡойо башы

Сәүкә йылғаһының исемен уның ярында үҫкән ағастар араһында сәүкәләрҙең бик күп булыуы менән аңлаталар. Ул урында *Сәүкә кисеүе* лә бар. Элек был ерҙә *Мөхәмәтсалих Әбдрәхимов* старшина утар төҙөп үҙаллы йәшәгән. Ер һатып алып, иген сәскән, күп итеп мал аҫраған. Яр буйында 12 төп ҡарағай ултыртҡан. Хәҙер был ерҙе ике исем менән – *Сәүкә кисеүе* йәки *Салих кисеүе* тип йөрөтәләр. Мөхәмәтсалихты бик һаран кеше булған тип тә һөйләйҙәр. Ошо кисеүҙә кеше малын эсермәгән, ти. Шунан берәү быны сыбыртҡы менән ярғас ҡына аҡылға ултырған, ти. Әлеге ваҡытта был иҫтәлекле урын яңынан ҡарағайҙар ултыртып кәртәләп алынды, халыҡҡа ял итер өсөн урын булдырылды. Элеккеләрҙән ике ҡарағай иҫән ҡалған. Ҡайһы бер кешеләр был ерҙе “*Ике карағай* ” тип тә йөрөтә. *Кешегырылғанды* иһә

граждандар һуғышы менән бәйләйҙәр. Ә бына *Күнйәп йылғаһының* аңлатмаһын белеүсе юҡ. Ололар был турала белмәй. *Күнйәп* урманда бәләкәй генә шишмәнән башлана. *Саптар яб* тирәһендә урғылып сыҡҡан шишмәләрҙән йылға күп һыулы булып китә. Түбәндәрәк *Аҡһаҡал кисеүе* бар. Ошо кисеүҙән өҫтәрәк Күнйәпкә *Туҡмаҡ йылғаһы* килеп ҡушыла. Ошо йылға буйында ерек, ҡарама, йүкә, саған, имән, ҡайын һәм башҡа япраҡлы ағастар үҫә. Аҡһаҡал кисеүенән һуң *Ҡаҙарма кисеүе* бар. Уның янында боронғо заманда һалдаттар йәшәгән. Нигеҙ урындары бар, тиҙәр. “*Казарма*” һүҙенән килеп сыҡҡан. Күнйәп йылғаһы *Накаҫка* ҡоя. *Бишкайын* яланынан үрҙә урман араһында *Биштейен йылғаһы* аға (халыҡ *Биштин* тип атай.) Ул *Ҡарамалы йылғаһына* ҡоя.

Тәүәкән ауылында шишмәләр ҙә күп. *Ғөбәй шишмәһе* тип Башҡортостандың беренсе президенты Мортаза Рәхимовтың атаһы Ғөбәйҙулла Зөфәр улының өйө артындағы шишмәне йөрөтәләр. Ул колхоз председателе булып эшләгән. Бик абруйлы, егәрле, ғәҙел етәксе булған. Ваҡыт табып, ошо шишмәне лә тәрбиәләп торған.

М.Ғ.Рәхимовтың тыуған йорто

Элегерәк ауылды эсәр һыу менән тәьмин иткән шишмәне *Гәрәй шишмәһе* тип йөрөтәләр. *Гәрәй Рәхимов* Мортаза Ғөбәйҙулла улының бер туған абзыһы. Ул да шишмәне ҡарап торған, ауылдаштарына саф, таҙа һыу эсергән. Хәҙерге ваҡытта был шишмә матур итеп кәртәләп алынған. *Ҡарамалы йылғаһы* буйында урыҫ ауылы урынлашҡан булған. Хәҙер ул ауыл юҡ. Артабан Төйләгән районының *Алмалы* тигән урыҫ ауылы бар. *Алмалы ауылы* элекке башҡорт ерҙәрендә ултырған.

Ҡарамалы йылғаһы

Бер башҡорт кешеһе *Алмабикә* исемле ҡыҙын кәрт уйынында отторған да урыҫҡа биреп ебәргән. Ауыл исеме шунан ҡалған.

Күнйәп йылғаһы буйында *Тирмән быуаһы* тигән урын бар, элек ошонда һыу тирмәне тотҡандар, йылға быуылған булған. Ауылда ике быуа бар: *Бәләкәй* һәм *Ҙур*.

Ҙур быуа

Бәләкәй быуа

Тауҙарҙан яҡшы тик тау ғына

Ауылдың көнбайышында төньяҡтан көнбайышҡа табан *Бәләкәй Наҡаç* тигән тау теҙмәһе бар. Халыҡ ауылға тура күренеп торған ерен *Митрофан* тип атай. Мораҡҡа барған тура юл элек ошо тау аша үткән. Йәйәүләп көйәнтәләп eләк, йомортҡа һатырға ла йөрөгәндәр. Элегерәк киске уйында:

Митрофан тауҙары,
Митрофан тауҙары.
Егеттәре әрмейәлә
Уны көтә ҡыҙҙары, – тип йырлағандар.

Тау башында элек ете өйҙән торған утар булып, Октябрь революцияһына тиклем *Шарлаҡ утарына* күскән. Был теҙмә ауылдан төньяҡ-көнбайышта мөһабәт булып ятҡан *Сыбартауҙан* башлана. *Сыбартауға* барған юлды *Раш юлы* тиҙәр.

Сыбартау легендаларға бай тау ул. Борон-борондан тирә-яҡ ауылдарҙың халҡы (*Тәүәкән, Бикес, Теләүембәт, Аҙнағол, Дауыт-Ҡайып*) май айының тәүге бер көнөндә, тау башына йыйылып, байрам иткән. Ундай йыйындар Бөйөк Ватан һуғышынан һуң да үткәрелгән, ләкин хәҙер халыҡ бергәләшеп *Сыбартауға* йыйылмай, ә ғаиләләре менән айырым-айырым яланға сыға. Ана шул төрлө ауыл халҡы бер тауға йыйылғас, ул алыҫтан кейемдәрҙән сып-сыбар булып торған, исеме шуға ҡушылған, тиеүселәр бар. Икенсе вариантта күҙ көнө иҫ киткес төҫтәр сыбарлығынан алынған, тип әйтелә.

Биштейен тауынан *Биштейен йылғаһы* башлана, тип әйткәйнек инде. Был тауҙың легендаһы ла бәхәсле. Кемдер унда бер һунарсы *биш тейен* атып алған, ти. Кемдер ысын исеме – *Биштин*, бер бай *биш тинен* юғалтып, шул

урында ағастарҙы ҡырҡтырып эҙләткән, тигән легенда һөйләй. Әммә Фәтих Азаматов был исемдең хата булыуы тураһында яҙа. Сөнки архивта табылған материалдарҙа *Биштейен* тип яҙылған. Ул – бәләкәй Наҡаҫ тау теҙмәһендәге иң бейек тау. Уның бейеклеге диңгеҙ кимәленән 667 метр (сағыштырыу өсөн: унан көньякта 10 саҡрым ерҙә күтәрелгән *Ямантау* – 598 метр, Мәләүез эргәһендәге *Көнгәк* тауы – 511 метр). Ҡыш буран сығыр булһа, ошо *Биштейен тауындағы* урман ныҡ, шомло итеп шаулай икән. Йәйен шунан килгән ямғыр мотлаҡ яуып үтә.

Ауылға көнсығыштан ингән юл

Урмандар, яландар, сабынлыҡтар һәм башҡа ер-һыу атамалары

Сыбартауға барған саҡта Бәләкәй йылғаның башынан – *Ҡойо башы* тигән ерҙән үтәһең. *Раш юлына* бороласан ерҙә *Ауыҙаҡлан ауыҙы* етә. Саҡ ҡына үрҙәрәк *Кәзә төбәге* тигән ер бар. Бара биргәс, *Таш кисеүгә* етәһең. *Таш кисеү* тип яҙғы ҡар һыуынан барлыҡҡа килгән йылға аша сыға торған урынды әйтәләр. Йәй көндәре был үҙәндә һыу булмай.

Арҡыры йылға эргәһендә *Йүкә төбө* тигән аҡлан ята. Артабан *Бирге* һәм *Арғы урыҫ үткәүе* тигән аҡландар бар. Был ерҙәрҙән урыҫтар үтеп йөрөгән тиҙәр. Арғы урыҫ үткәүе эргәһендәге бәләкәс кенә яланды *Сәләхи төбәге* тиҙәр. Урта йылға буйлап *Шаһи һаҙы* ята. Юлдан бара торғас, *Таллаҡланға* (Таллы аҡлан) барып сығаһың. Ары *Таллаҡлан тауы* башлана. Таллаҡландың аръяғында *Тәрән соҡор* бар. Бирге урыҫ үткәүенән көнбайышта Йүкә төбөнән *Йүкә суйына* табан юл китә. Ошо юлға боролған ерҙә *Ауыҙаҡлан ауыҙы* етә. Шунан боролоп *Ҡабыҡҡыуыш* урыны бар. Эргәһендә *Үлек бүләге* бар. Элек шунда зыярат булған. Ул ер һаҙматҡа әйләнгәс, зыяратты яңы урынға күсергәндәр.

Ауылдың көнбайышында, Арҡыры йылға буйында, *Ҡорт баҡсаһы* тигән ер бар. Элек, совет осоронда, колхоз умарталығы булған.

Ҡорт баҡсаһы

Ҡаҙарма кисеүе бар. Шул кисеүҙе сыҡҡас, *Мырҙағәли төбәге* ята. Был ҙур ялан *Гәрәй сабынлығы* тип тә атала.

Гәрәй сабыны. Мортаза Гөбәйҙулла улы тыуған яғының тәбиғәте ҡосағында

Аҫҡараҡ төшкәс, *Дегет бүләге* ята. Был – элек дегет ҡайнатҡан аҡлан. Был яланда алһыу төҫтәге ҡулға йәбешеп торған сәскә күп булған. Ул сәскәне

лә “*Дегет бүләге*” тип йөрөткәндәр. Ағаслыкты үткәс, *Сатра* башлана. Ул 11 гектарлап майҙанды алып тора. Элек бында иген сәселгән, хәҙер көтөүлек.

Фәтих Әлмөхәмәтов тигән ауыл аҡһаҡалы һуҙып тороп:

“*Сатрала* кәкүк саҡыра,

Ҡараманан бейек ҡайында”, – тип, йырлап ебәрә торған булған. Дегет бүләгенән кисеү аша сыҡҡас, *Бишҡайын яланы* башлана. Ул 26 гектар. Элек иген сәскәндәр, хәҙер унда сабынлыҡтар. Элек был ерҙә бер төптән биш ҡайын үҫеп ултырған. Дегет бүләгенән кисеү аша сыҡҡан кисеүҙе *Бишҡайын кисеүе* тиҙәр.

Ауылдың көньяҡ-көнсығышында *Ҡайынлыҡ* тигән бәләкәй генә урман үҫеп ултыра, сөнки ул ерҙә тик ҡайын үҫә. Уның артында *Шәһәр кыуағы* тигән ер ята.

Ауылдың көньяғында *Буровой* тигән *аҡлан* бар. 20-се быуаттың 70-се йылдарында унда газ сығарыр өсөн буровой урынлашҡан булған. Ошо ерҙәрәк Бәләкәй быуаның төньяҡ-көнбайышында *Түңәрәк* урман ята. Ағастар түңәрәк кенә итеп, бер урында өйкөм генә булып үҫкәндәр.

Буровой аҡланы

Унан ары *Ҡарағайлыҡ* тигән урман тора. Сөнки ошонда ғына бер гектарҙай ҡарағай урманы үҫеп ултыра.

Төньяҡтараҡ *Мәҙинә әбей урманы* тигән урман ята. Яңғыҙ йәшәгән *Мәҙинә әбей* һәр саҡ унан ҡул арбаһы менән үҙенә утын ташығанға шул исем ҡушылған.

Ҙур быуаның аҫ яғында *Күл төпкөлө* тигән аҡлан бар, элек унда күл булған тиҙәр. Күл төбөнә йылға аша *Ҡыҙыҡай биргән* яланы ята. Был яланда бер ҡыҙҙы кейәүгә биреп, оло туй яһағандар. Шул яланға күрше булып *Ҡарама төбө* тигән урын бар. Ошо ерҙәргә текәлеп *Абдулла талы* тора.

Элек Күнйәп йылғаһында *Мандыр тирмәне* булған. Хәҙер урыны шулай атала. Күнйәптең уң яғында *Тоҙлосабын* ята. Аҫтараҡ – *Ҡартсабын.* Артабан *Рязань ере* китә. Уны халыҡ “*Разан*” тип йөрөткән. Ҙур ғына урыҫ ауылы булған ул. Сәңкемдәр *Разанға* магазинға йөрөгәндәр. Хәҙер ул ауыл юҡ.

“Своя поля”ға юл

Ҙур быуаның көньяғында *Своя поля* тигән ялан бар. Октябрь революцияһына тиклем ошо ер өсөн урыҫ менән башҡорт араһында ғауға сыҡҡан. Урыҫ: “Эта земля – моя”, – ти, Тәүәкән кешеһе лә: “Своя поля”, – тип урыҫсалап һупалай. Землемерҙар килеп, был ерҙең Тәүәкән ауылыныҡы икәнен әйткәс кенә, ғауға баҫыла. Шунан ул ерҙе *Своя поля* тип атай башлағандар.

Был урын менән хәҙерге заманда ла ҡыҙыҡ хәлдәр тыуып тора. “Тәүәкән” ДУАП-ы директоры Болғаиров Айраттың ауылға яңы килеп эшләй башлаған сағы була. Эшкә китеп барған бер тракторсыны туҡтатҡан да ҡайҙа барыуын һораған. Теге: “*Своя поляға*”, – тигән. Директор уны, үҙ еренә бесән эшләргә китеп бара икән тип, бик ныҡ итеп әрләп киткән, ти.

Ауыл үҙәге. “Тәүәкән” ДУАП-ы контораһы. Ауыл советы хакимиәте

“Ғәлимә” мәсете

Ауылда ике зыярат бар. *Үрге зыярат* Бикестән килгән асфальт юлдың уң яғында, *Түбәнге зыярат* көнсығышта, Күнйәп йылғаһының һул яғында урынлашҡан. Миңлеғужа Ҡаразбаев әйтеүенсә, түбәндәгеһендә *Әбдрәхимовтар, Ҡаразбаевтар, Ғәфәровтар, Ғәлиевтар, Исхаҡовтар* ерләнә. Үргеһендә – *Рәхимовтар, Әлмөхәмәтовтар, Шәңгәрәйевтәр,*

Миңлейәровтар, Яхиндар, Әмиргәлиндар, Иҫәнгилдиндар, Мөхәмәтйәровтар, Рафиҡовтар, Мырҙашевтар, Шәһәровтар.

Ауылдың төньяғында *Ике ҡарағай* тигән урын бар. Үрҙәрәк *Ҡалҡыу йорт* тигән урын бар. *Сәүкә кисеүенән* аҫтараҡ *Салих кисеүе* бар. Төньяҡтараҡ *Прогресс* утары урынлашҡан. Бер нисә генә өй ҡалып, бөтөүгә китеп барған был утар президентыбыҙ М. Ғ. Рәхимов етәкселек иткән осорҙа яңы һулыш алды. Инкубатор, мал һуйыу комплексы, ит эшкәртеү, тәбиғи аҙыҡтар етештереү цехтары асылды. Хәҙер утарҙа бер урам булып 40 йорт ҡалҡып сыҡты. Балалар Тәүәкәнгә йөрөп уҡый. Утар янынан *Кешеғырылған* йылғаһы аға.

Үрге яҡ

Тәүәкән ауылы халыҡ атағанса *Үрге яҡ, Түбән яҡ, Аҫҡы урам, Аръяҡ, Молокан* тигән өлөштәрҙән тора. Аръяҡ урам халыҡ телендә *Әбейҙән ҡасҡан урам* тип атала. Элекке замандарҙа балалары өйләнһә лә башҡа сығармай бергә йәшәгәндәр.

“Әбейҙән ҡасҡан” яҡтан үҙәккә юл

Мәҙәниәт йорто

Хәҙер аръяҡта ике урам – *Ҡайынлы* һәм *Күнйәп*. Ауылдың иң ҙур үҙәк урамы – *Сәңкем* тип атала.

Сәңкем урамы

Беренселәрҙән булып, был урамға Исәнгилдин Кәбир, Шәһәров Рәхимйән өй төҙөгән.

Йәнәһе, кәләштәрен бейемдән – әбейҙән ҡасырып алып киттеләр инде. Шуға ла урам *“Әбейҙән ҡасҡан”* тип аталған.

10 йыл элек кенә төҙөлгән урамдарҙың исеме – *Яңы, Йәштәр, Туғайлы.*

Йәштәр урамы

Туғайлы урамы

Таулы, урманлы ерҙә ултырған Тәүәкән ауылының тәбиғәте бик үҙенсәлекле. Эйек буйындағы ауылдарға ҡарағанда, бында яҙ һуңлап килә, ҡыш иртәрәк башлана. Тәбиғәт йомшағыраҡ. Башҡа ерҙә халыҡ ҡоролоҡтан ныҡ интекһә, бында уның зыяны аҙыраҡ була. Һуңғы йылдарҙа ауыл күҙгә күренеп матурлана. Яңынан-яңы объекттар төҙөлә.

Тәүәкән ауылы. Мәсет манараһынан төшөрөлгән

Ауыл үҙәге. “Тәүәкән” ДУАП-ы контораһы. Ауыл советы хакимиәте.

“Ғәлимә” мәсете

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Азаматов Ф.Х. Йәнтөйәктә – беҙҙең яҙмыштар. Тәүәкән ауылы тарихы. Өфө: Китап, 2002. 336 бит.

2. Шаһивәлиев Ишмөхәмәт. Күгәрсен районының топонимдар һүҙлеге. “Мораҙым” гәзите, 2017 йыл, № 22.

Информаторҙар

1. Каразбаев Миңлеғужа, 1934 йылғы.
2. Әлмөхәмәтов Фәүжәт, 1935 йылғы (2007 йыл вафат).
3. Әлмөхәмәтов Фәтих, 1934 йылғы (2009 йыл вафат).
4. Шаһивәлиев Ишмөхәмәт, 1942 йылғы.

Ҡушымта

Мортаза Рәхимов

М.Ғ.Рәхимов Фәүжәт Әлмөхәмәтов менән

М.Ғ.Рәхимов ғаиләһе менән

М.Ғ.Рәхимов

Башҡарҙы: **Хәйруллина Ильмира Илшат ҡыҙы**, 7-се класс
Етәксеһе: **Бәҙәмшина Зәһүрә Фәйзулла ҡыҙы**

ҮРГЕ СИРБАЙ АУЫЛЫ ҺӘМ ЯХИНДАРҘЫҢ КИЛЕП СЫҒЫУ ТАРИХЫ

Сирбай ауылы

Борон заманда ошо һәйбәт ерҙәр өсөн оло һуғыш сыға торған булған. Бер төркөм кеше үҙҙәренә ҡаршы булған тархан кешеләрен Эйек аръяғына ҡыҫырыҡлап сығарғандар һәм еңгәндәр. *Сиреү* йәнәһе *ғәскәргә бай* тигәнде аңлатҡан. Еңгән төркөм кешеләренә шулай тип *сиреүгә бай* йәки *Сирбай* тигән исем ҡушҡандар.

Сирбай ауылында 1929 йылда колхоз төҙөлә. *Быкин* исеме бирелә. 24-25 өйҙән торған *Сирбай ауылы* бер колхоз тип иҫәпләнә.

1932 йылда, 9 ауылды берләштереп, *Август колхозы* барлыҡҡа килә. Унда *Сирбай, Санъяп, Дөмбәй, Сайыр, Ҡасҡын, Ҡыҙылъяр ауылы* инә.

1961 йылда, колхоз бөтөрөлөп, *Октябрь совхозына* әйләндерелә.

Яхиндар нәҫеленең килеп сығышы

Беҙҙең нәҫел Ҡарағалпаҡ АССР-ы менән бәйле.

Бынан 400 йылдар элек булған был хәл. Егермеләп һыбайлы ҡуянға һунарға китәләр. Ҡаран йылғаһы буйындағы Үле Эйек ҡамышлығына килеп сығалар. Улар ҡамышлыҡ эсенә инеп киткән эҙҙе күрәләр. Яңы ғына яуып үткән ҡар өҫтөндә кеше эҙе ярылып ята икән. Кешеләр эҙ буйлап килһәләр, аҫтына ҡалын итеп ҡамыш түшәп, бер кеше йоҡлап ята, ти. Уның кем булыуын һорашалар. Ул үҙен *Яхья* тип таныта. Себер тарафынан ҡасҡан була. Уны ауылға алып ҡайталар, муллаға алып баралар. Мулла уны, йәшәһен, тип ауылда ҡалдыра. Тора-бара ғаиләле булып китә. Улы тыуғас, *Әҙелбай* тип исем ҡуша. Әҙелбай үҫә, өйләнә. Уның ҡатыны Барсынһылыу була. Өс ул үҫтерәләр. Улдары *Үлйәбай, Собханғол, Ҡотлоәхмәт* исемле була. Бер ваҡыт улдарын әрмиәгә саҡыралар. Улар һыбай Ташлыға баралар. Әсәһе лә бергә барған була. Малайҙары инеп киткәс, әсә теләк теләй. Эй хоҙайым, Үлйәбайым менән Собханғолом ҡалһын, ә Ҡотлахмәтен үҙең беләһең, ти. Баҡтиһәң, Ҡотлоәхмәт үгәй улы булған икән, Собханғол үҙенең фамилияһын Әҙелбай тигән.

Ә элек Яхьяны байҙар ғәйепләп, күрә алмайынса Себергә ебәргән булғандар икән, шунан ҡасып был яҡтарға килеп сыҡҡан булған. Шулай килеп сыҡҡан беҙҙең нәҫел.

Әҙелбаевтар
Шәжәрәһе
Собхангол
Әҙелбай
Яхъя
Миңзифа
Сәвит
Әминә
Ишбикә
Сабира

Башҡарҙы: **Хәсәнова Лилиана Һөйөндөк ҡыҙы**.
Етәксеһе: **Хәсәнова Нурзилә Хисмәтулла ҡыҙы**

ТЫУҒАН ЕРЕМ – ИЗГЕ ТӨЙӘГЕМ: БЕСӘНСЕ АУЫЛЫ

Борон-борон заманда
Урал тигән ил булған,
Ата-бабам йәйләгән,
Ҡурай моңо данлаған,
Батыры күп ил булған,
Байлығы күп ер булған.
Тыуған ерем сәскә ата,
Әйтерһең бер тамаша;
Барса милләт берҙәй татыу
Нурҙан күҙҙәр ҡамаша.
Алға ҡыйыу елдерәбеҙ
Дуҫлыҡ, туғанлыҡ аша.

Бесәнсе ауылы

Бесәнсе ауылының ҡасан барлыҡҡа килеүен, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, асыҡлап булмай, ләкин уның бик боронғо ауыл булыуы шик тыуҙырмай. Уны *Күсәрбаев Низаметдин* һөйләп ҡалдырған риүәйәттән күреп була: “Бынан 397 йыл элек, йәғни 1587 йылда, – тип һөйләгән ул 1967 йылда, – был урынға *Йома* исемле кеше килеп ултырған. Ул Ҡыпсаҡ ырыуынан булған. Уның йәше 60-ҡа еткәндә улы тыуа. Уға *Теләүкабул* тигән исем ҡушҡандар. *Теүәлкабулдың* улына *Бесәнсе* исеме биргәндәр. Үҫеп етеп, ғаилә ҡорғас, *Бесәнсе* аталарынан 1-2 саҡрым алыҫҡараҡ, *Керәүле йылғаһы* буйына, хәҙерге *Ҡырын кисеү* янына барып ултырған. Уның эргәһенә башҡа ырыуҙарҙан да күсеп килеп һыйынғандар. Ауылда 16 өй булып киткән. *Бесәнсе* ауылының төп халҡы ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә, дөрөҫөрәге, ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең бошман-ҡыпсаҡ ырыуына ҡарай.

Ата-бабаларыбыҙ ер-һыуҙың ҡәҙерен белгән, *Бесәнсе* (*Хоҙайбирҙин*) ауылына тәбиғәттең иҫ киткес матур төйәген һайлағандар. Ауыл мәшһүр Ағиҙел йылғаһының Урал тауҙарынан ағып килеп, үҙенең иң көньяҡ нөктәһендә дуға яһап, төньяҡҡа боролған һәм көньяҡтан ағып килгән бәләкәй *Керәүле йылғаһының* Ағиҙелгә ҡушылған ерендә урынлашҡан. Төньяҡта, Ағиҙелдең уң яғында, ауылды һыуыҡ елдәрҙән һаҡлап, мөһабәт *Көнгәк тауы* баҫып тора.

Көньяҡта, үрге зыяраттан башлап *Горбат, Знаменка ауылдары* ерҙәренә тиклем ҙур майҙанды ауыл халҡы *Тибеҙлек* тип атаған ерҙәр биләй.

Бишағас тауы

Көнбайыштан, Керәүле йылғаһын ауылға ҡыҫып, *Ҡыҙҙар тауы* ҡаплап тора. Ауылдың көнсығыш яғында, ике саҡрым да юҡтыр, ҡупшы *Бишағас тауы* тора. Был тау бейек тә, ҙур ҙа түгел. Уның ауылға ҡараған көнбайыш итәгендә ағаслыҡ. Ошо бәләкәй генә тау битендә тәбиғәттең төрлө зоналарына хас булған үҫемлектәр үҫә. Тауҙың аҫҡы өлөшөндә ҙур бөҙрә ҡайындар үҫһә, өҫтәрәк ғәжәп кәкре-бөкрө кәрлә ҡайындар, уҫаҡ, йүкә, саған, имән ағастары, миләш, йәмшегән, сейә, әлморон ҡыуаҡтары, ә түбәгә яҡын тау йыуаһы үҫә. Иртә яҙҙан төрлө төҫтәге умырзая, иҫ китерлек гүзәл сәскәләр һипкән хуш еҫ, матур биҙәктәр кешеләрҙе йәлеп итә.

Бишағастың көнсығыш бите текә. Унда ағас юҡ, тик ҡылған ғына үҫә. Тауҙың шул яғында бер саҡрымдай ерҙә Юлбаш ауылы урынлашҡан. Өлкән быуын кешеләре элек тауҙа бик күп бурһыҡ, һыуһар булыуын хәтерләй. Әле лә *Бишағастың* көнсығыш итәгендә һыуһар өңдәре бар. Уларҙың иртәнсәк оялары янында, кеше һымаҡ баҫып, ҡояш сыҡҡанын ҡаршылап һыҙғырғанын күҙәтеүе үҙе бер мөғжизә.

Элек яҙғы сәсеү эштәре башланғанға тиклем *Бесәнсе, Ялсы, Һапаш, Вәлит, Сайыр, Кәкүк, Түләбәй ауылдарының* ир-егеттәре, ҡыҙ-ҡырҡындары һәр йыл һайын йома көндәрендә ошо тауға йыйыла торған булған. Уйын-көлкө эңер төшкәнсе дауам итә. Аҙаҡтан ауылдарына таралышып, йәштәр таң

атҡансы күңел асҡан. Бына шул ваҡыттағы ҡара-ҡаршы әйтешеп бейегән таҡмаҡтарҙың береһе. Ул Ихсанова Миңлебикәнән яҙып алынды:

Зайым-зайым-зайым
Зайым-зилалайым.
Һеҙ таҡмаҡ әйтеп алығыҙ
Ә мин бейеп алайым.

Зайым-зайым-зайым
Зайым-зилалайым.
Кисә һин уйнамағайның,
Бөгөн мин уйнамайым.

Унда шулай уҡ «Косилка-молотилка», «Түңәрәк» бейеүҙәре ойошторолған. 1950 йылдарҙа *Бишағастың* һөҙәк көнбайыш итәгенең күп өлөшөн һөрөнтө ергә әйләндерҙеләр.

Тарихтан билдәле булыуынса, Наполеон армияһы Рәсәй ерҙәренә ябырылғас, Ватанды һаҡлар өсөн урыҫ ғәскәрҙәренә ярҙамға 30-ға яҡын башҡорт полкы ебәрелә. Ошо һуғышҡа китер алдынан Ырымбурҙың хәрби губернаторы Г.С.Волконский исеменән Эйек, Яйыҡ, Һаҡмар буйҙарында йәшәгән, яуға китергә тейеш булған башҡорттарға *Көнгәк тауы* янында йыйылырға тигән фарман килә.

Һуғышҡа киткән яугирҙарҙың тәүге төркөмдәре *Бишағас тауында* лагерь ҡороп урынлашалар. Ә граждандар һуғышы осоронда был тау аҡтарҙың тупланған урыны була.

Ошо юл буйында ғына ултырған ус төбөнә генә һыйырлыҡ ғәжәп матур тауҙы тәбиғәт ҡомартҡыһы итеп һаҡлап ҡалдырырға кәрәк ине.

Ҡыҙҙар тауы

Бесәнсе ауылын көнбайыштан, Керәүлене ауылға ҡыҫып, *Ҡыҙҙар тауы* ҡалҡып тора. Ул төньяҡтан башлана, көньяҡ сиккә тиклем ике яҡлап уйһыулыҡтар һәм сағылдар теҙмәһенән тора. Һәр береһенең исеме лә булған: *Бейексағыл, Бәләкәйсағыл, Ҡырғыҙ сағылы, Йәмшегән уйы*. Тау битләүҙәрендә йырып сыҡҡыһыҙ урман үҫкән, һунарсыларҙың яратҡан төбәге булған, емеш-еләк ҡотороп үҫкән. Хәҙер унда ҡоро ялан.

Элек-электән, хатта һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла, яҙ көндәре тау бите кибеп, йәшеллеккә күмелә башлағас та, йәштәр, бала-саға ошо тауға менеп күңел асҡан. Йыр-моң, ҡурай тауыштары әллә ҡайҙарға яңғырап торған.

Искаҡ тауы

Ҡыҙҙар тауынан үрҙә булған *Искаҡ тауының* да үҙ тарихы бар. Тау башында *Зәйнәғәбдинов Искаҡ* тигән бабай ерләнгән. Ул заманында ауылдың иң уҡымышлы кешеһе булған. Йылайыр кантоны Ҡыпсаҡ волосында писарь,

1926-1932 йылдарҙа ауыл шураһы рәйесе, сәркәтибе вазифаларын башҡарған. Уны күрә алмаған кешеләр ағыулағас, ауыл халҡы, хеҙмәттәрен баһалап, үҙе теләгән тау башына хөрмәтләп ерләгән.

Хоҙайбирҙин ауылында ямғыр оҙаҡ яумай торһа, ошо зыяратҡа ҡатын-ҡыҙ, бала-саға *Керәүле йылғаһынан* һыу алып, тау битләүенә менгәндәр ҙә 41 сүмес һыу һипкәндәр. Ҡайтыр саҡта 41 аҡ таш йыйып, *Керәүле йылғаһына* һалып киткәндәр.

Шулай итеп, ауылыбыҙҙағы *Ҡыҙҙыр тауы* менән *Бишағас тауы* күп тарихи ваҡиғаларҙың шаһиты. Граждандар һуғышы йылдарында *Бесәнсе ауылы* бер нисә тапҡыр ҡулдан-ҡулға күскән. Ҡыҙылдар *Ҡыҙҙар тауында* булһа, аҡтар *Бишағаста* тупланған. Был тауҙарҙа, бигерәк тә *Ҡыҙҙар тауында*, окоп эҙҙәре һаман да бар. Туптарҙан атҡан йәҙрәләрҙең ауыл өҫтөнән сыйылдап осоп барғанын, ауылда ярылғанын Бөйөк Ватан һуғышынан һуң да ололар һөйләй торғайны. Йәҙрә шартлауҙан ҡалған соҡорҙар ҙа уңалмаған. Элек олатайҙарҙың шул йылдарҙа «*ҡыҙылдар*», «*аҡтар*» булып уйнауы ошо ваҡиғаларҙан ҡалған.

Ҡыҙҙар тауы «Тәбиғәттең ете мөғжизәһе» китабына индерелгән.

Тыуған илем – гүзәл еркәйем!
Олатайҙар биргән мираҫты
Һаҡларбыҙ, яҡларбыҙ даныңды, ғәзиз ер,
Беҙ ниндәй хеҙмәттә булһаҡ та.

Ҡулланылған әҙәбиәт

Азаматов Ф.Х., Аҙнағолов Ю.Ғ. «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!». Өфө, 2000.
Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге музейҙан алынды.

Башҡарҙы: **Шәрипова Гөлсәсәк Шәүкәт ҡыҙы**, 7-се класс
Етәксеһе: **Бәҙәмшина Зәһүрә Фәйзулла ҡыҙы**

ҮРГЕ СИРБАЙ АУЫЛЫНЫҢ ТАРИХЫ ҺӘМ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Сирбай ауылы тарихы

Сирбай ауылы Монаш түбәһенә ҡарай. *Үрге* һәм *Түбәнге Сирбайға* 1816-1834 йылдарҙа бүленә. 18-се быуат башында *Түбәнге Сирбай* (*Бире ауылы*) бик ҙурайып китә. Ауылда 25 өй була, 180 кеше йәшәй. Халыҡтың мал-тыуар аҫырап, ит-һөт ризығы менән туҡланып йәшәгәнен иҫәпкә алһаҡ, 80 өйлө ауылда малдың бик күп булыуы, көтөүлектең етешмәүен төҫмөрләргә була. Шунлыҡтан *Түбәнге Сирбайҙан* (*Бире ауылы*) 17 ғаилә 1734 йылда бүленеп, Етеболаҡ йылғаһының Оло Эйеккә ҡойған еренә, йәғни Етеболаҡ тамағына

килеп төпләнәләр. Ул ваҡытта тәбиғәт ҡосағы икенсерәк булған. Ҡуйы туғайлыҡ араһында ҡуйы, бейек үлән, мал көтөүгә иркен болонлоҡтар үҙе ни тора. Ауылды уратып алған емешкә бай туғайлыҡтары, әрәмәләре, гөл сәскәле болондары, эргәлә генә аҡҡан Оло Эйек йылғаһы. Ҡыр өйрәктәре төйәк иткән Етеболаҡ йылғаһы һәм таҙа һыулы шишмәләре. Яҙ көндәрендә ҡуҙғалаҡ, йыуа ишелеп үҫкән Ҡалынталы, балан, муйылға бай Оло әрәмәһе, ҡарағатлы, еләкле Ғабдрахман ҡыуағы, бейә бәйләгән ҡыуаҡ, Йыуалы күл, Мүкле күл – бөтәһе лә ошо урында тәүләп төйәк иткән кешеләрҙең атаған ер-һыу атамалары күңелгә һеңгән.

Тарихҡа бай беҙҙең Сирбай

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ 1732-1735 йылдарҙа Тимашев баярға Ташлынан Ҡалдарға тиклем һуҙылған 12 мең дисятина урманды сәй, шәкәр, он, ярма, ситса тауарға алданып, бушҡа тигәндәй һаталар. Бер йылда үтмәй, баяр ошо урманға яҡын урынлашҡан Бөрйән башҡорттарының өс ауылын (урманды ҡырҡалар, тип) урындарынан ҡыуырға ҡуша. Уларҙың халҡы Оло Эйек буйына Түбәнге Сирбай (Бире ауылы) тигән ергә килеп урынлаша. Бик ҙур булмаһалар ҙа, өс ауыл ҡушылғас, ярайһы уҡ ҙурайып китә, мал йөрөтөргә урын тарая.

1834 йылдың йәй айҙарында 17 ғаилә бүленеп, Оло Эйектең һул яҡ ярына, Етеболаҡ тамағына күсеп ултыра. *Сирбаев* фамилияһын йөрөткән *Айтуған, Байтуған, Яхья, Ильяс* бер туғандар булғандарҙыр. Ситән үреп, шаҡарманан, кәҫтән өй эшләп йәшәй башлайҙар. Кейеҙ тирмәләр тик хәлле кешеләрҙә генә булған. Был ауылды *Урге Сирбай* тип йөрөтә башлағандар.

18-се быуат аҙағына халыҡ һаны арта башлай, 300 кешегә барып етә. 1806 йылда мәсет һалына. Ауыл Ырымбур губернаһы Йылайыр кантоны Бөрйән-Ҡыпсаҡ волосына ҡарай. (Материал Сирбай ауылында йәшәгән Айытҡолов Ғәйфулла олатайҙан алынды).

Сирбай ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары

Беҙҙең *Сирбай* ауылы бик матур. Бында бик күп төрлө ҡыҙыҡлы ерҙәр бар. Мәктәп эргәһендә генә *Урге Мөрсәләй* ауылына киткән яҡта юл аша бер күл бар. Ул **Йыуалы күл** тип атала. Һуғыш алды йылдарында ул мул һыулы, балыҡҡа бай күл була. Аҡҡош, ҡыр өйрәктәре осоп килер булған, күлде уратып йыуа үҫкән.

Ауылдың хөрмәтле кешеһе Яхин Миңлеәхмәт олатай былай ти торғайны: “Күлдең таҙа һыуы аша йыуаның төбө ап-аҡ булып күренеп тора ине”

Йыуа, ауыр һуғыш йылдарында ауыл халҡы өсөн төп ризыҡтың береһе булған. Балалар ҙа, ололар ҙа йыуаны ҡосаҡ-ҡосаҡ йыйып алып ҡайтҡан. Хәҙер был күлде ағас баҫып алған. Күлдең исеме генә ҡалған.

Ҡалын тал

Ҡыҙыл яр ауылына барған юлда *Ҡалын тал* төбәген үтеп китәһең. Был ерҙә күп талдар, баланы, муйылы менән дан тотҡан була. Кохоз ваҡытында йәшелсә баҡсаһы менән умарталыҡ та була.

1973-1974 йылдарҙа иген баҫыуына, сәсеүлекте күбәйтәбеҙ тип, ағастарҙы, ҡыуаҡтаҙы ҡырҡып бөтөрөп, ерҙе аҡтарып һөрөп китәләр.

Сәсеүлек булмай ул ер. Ҡамыш үҫеп китә. Тәбиғәтте генә боҙалар. Әлеге ваҡытта был урында ауылдағы кешеләрҙең бесәнлеге.

Етеболаҡ йылғаһы буйында

Етеболаҡ йылғаһы аръяғында *Оло әрәмә, Ғабдрағман ҡыуаклығы* тигән төбәктәр бар. Элек-электән һутлы үләнле, бесәнлеге, муйыл ағастары, баланы менән ауыл халҡын үҙенә әйҙәп торған.

Колхоз ваҡытында олоһо ла, үҫмерҙәре лә бергә рәхәтләнеп бесән эшләгәндәр.

Оло әрәмәнән арыраҡ **Йүкәлек** тигән урын бар. Йүкә ағастары ҡуйы булып үҫкән. Ул ваҡыттарҙы иҫкә алырға ғына ҡалды. Ул ваҡытта ауыл осонда умарталыҡ та булған.

Ғабдрахман ҡыуаклығы

Борон заманда йәшәгән ти *Ғабдрахман* тигән кеше. Ул кеше егәрле, уңған булған һәм уның үҙенең бесәнлеге булған. Уны хөрмәтләп, ошо ергә уның исемен биргәндәр.

Ҡыҙҙар тауы

Беҙҙең ауыл эргәһендә тау бар. Ул *Кыҙҙар тауы* тип атала. Яҙ етеү менән, тау битләүҙәре ҡарҙан әрселә башлағас, яҡын-тирәләге ауылдарҙан

ошо тауға йәштәр йыйыла торған булған. *Санъяп, Ҡаскын, Сирбай ауылы* йәштәре йыйылып, төрлө уйындар ойоштороп, йырлап, бейеп күңел асҡандар. Йыр, бейеү көлкө тауыштары әллә ҡайҙа, йыраҡҡа ишетелеп торған. Күп йәштәр был тауҙа бер-береһе менән танышып, йәр тапҡандар, ҡауышҡандар.

Һарайса тауы

Өфө-Иҫәнғол юлы буйында, *Һарайса тауы* алыҫтан күренеп тора. (*Һары Айса* һүҙенән алынған). *Һары Айса* батыр кем булған, ҡасан йәшәгән? Әлегә билдәһеҙ. Борон батырҙар *Һарайса тауынан* тороп, унан 15-17 саҡырым көньякта ятҡан бейек тауҙа торған икенсе батырҙар менән уҡ атышҡан.

Һарайса тауы янынан *Һарайса йылғаһы* аға. Уға ла ошо батыр исемен биргәндәр.

Легенда буйынса, *Һары Айса* һун ырыуынан булған. Ғәскәр менән үтеп китеп барғанда, ошо тауҙа туҡталалар. Тауҙа алыш ойошторалар. Был алышта *Һары Айса* еңә. Ауыл халҡы уның көсөнә һоҡланып, тауға һәм йылғаға уның исемен бирә.

Ҡаҙаҡ ҡыҙы ҡәберлеге

Бик борон заманда булған был хәл. Элек беҙҙең тирәнән йыш ҡына ҡаҙаҡтар үҙҙәренең көтөүҙәрен ҡыуып үтер булғандар. Бына бер заман хан көтөүе менән беҙҙең ауыл янында ялға туҡтай. Уның бик сибәр ҡыҙы булған һәм ул бәйге ойошторорға ҡарар иткән. Кем дә кем ошо бәйгелә еңә, хан ҡыҙын шуға бирәм, ти. Был ярышҡа бик күп батырҙар килә. Моҡас ауылынан да батырҙар ҡатнаша. Бәйгелә беҙҙең ауыл батыры еңә. Хан ҡыҙы ла егетте оҡшата. Тик ҡаҙаҡтарға был оҡшамай. Ҡыҙ үҙебеҙҙә ҡалырға тейеш тип, теге егетте үлтерәләр. Хан ҡыҙы быны белеп ҡала һәм ул да үҙенә ҡул һала. Хан ҡыҙы ҡарағай төбөнә күмелә. Ҡаҙаҡтар был ҡәберлекте онотмайҙар, яҙғыһын килеп, ҡарағайҙы ҡыҙыл таҫмалар менән биҙәп китәләр.

Башҡарҙы: **Юскаев Ильвир Ильяс улы**, 9-сы класс
Етәксеһе: **Юскаева Рәсимә Фәрит ҡыҙы**

ҠАЛДАР АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Башҡорт булған кеше борондан үҙен уратып алған тирә-яҡ тәбиғәт, кешеләр менән ҡыҙыҡһыныр булған. Беҙҙең Ҡалдар ауылы мәктәбендә тарих дәрестәрен уҡытҡан Ҡаранаев Фәсхетдин Ғималетдин улы ауыл, мәктәп тарихы менән бик ҡыҙыҡһынып, шул турала күп кенә материал туплаған. Әммә ауырыуы арҡаһында уның менән осрашып булманы. Ниндәйҙер материалды ололарҙан һорашып, ҡайһыларын райондың «Мораҙым» гәзитендә сыҡҡан мәҡәләләрҙән алып, үҙаллы эҙләнеү эштәрен алып барып, ошо фәнни-эҙләнеү эшен башҡарҙыҡ.

Ҡалдар ауылы тураһында

Ҡалдар ауылы – Күгәрсен районындағы ҙур ауылдарҙың береһе. Унда башҡорттар, мишәрҙәр һәм татарҙар йәшәй. Ауылда ике урам бар, ауылды бүлеп, ике шишмә аға. *Ҡалдарҙа* ун йыллыҡ мәктәп бар, уның тарихы 100 йылдан ашыу.

Шулай уҡ ауылда йәшәгән халыҡты мәсет, балалар баҡсаһы, медпункт, өс магазин, мәҙәниәт йорто хеҙмәтләндерә.

Ҡалдар ауылына 1775 йылда нигеҙ һалынған. Тарихсы-ғалим Ә.З. Әсфәндиәров был турала шулай тип яҙған: «На правом берегу реки Зирикли, впадающей с правой стороны в реку Мень, на рубеже XVIII-XIX веков возникла деревня Калдарово. Основал ее Калдар Ишбулатов (1725-1812). Его сын Таиш, 1766 года рождения; дети Таиша: Алибай, Мавлюмберды. Братья Таиша Калдарова Абдулхалик и Кучак (близнецы 1771 г.), Яныбай и Суюндук. Деревня имела в 1816 году – 13, в 1859 году – 40 (230 жителей), в 1920 году – 44 двора». (Асфандияров, 46-сы бит).

Ҡалдар ауылында хәҙер ҙә *Ҡалдаровтар, Мәүлиевтар, Юскаевтар, Халиҡовтар* фамилияһын йөрөткән ғаиләләр йәшәй.

Ҡалдар ауылы атамаларының килеп сығышы тураһында педагог, хеҙмәт ветераны Рауил Болғаиров райондың «Мораҙым» гәзитендә «Ҡалғандан – Ҡалдар, яуҙан – Яуыш» исемле мәҡәлә баҫтырып сығарған. Уның фекере буйынса, *Ҡалдар* ауылының уҙаманы Әхмәдзәки Вәлиди армияһында хеҙмәт иткән Әхмәҙулла Аҡбирҙин (1896-1988 йй.) һөйләгән бер тарихи ваҡиға менән бәйле: элек сит-ят баҫҡынсыларҙан ер-һыуҙы, ауылыңды, үҙ йортоңдо һаҡлап ҡалыр өсөн бәрелеш, ыҙғыш йыш булған. Яуҙа ир-ат ҡына түгел,

ҡатын-ҡыҙ, хатта бала-саға ла ҡатнашҡан. Ошондай бер ҡан ҡойош яуҙа ике яҡ та ныҡ ҡырыла. Йылға буйындағы ағас ҡыуышында бер малай менән бер ҡыҙ ғына иҫән-һау ҡала. Улар үҫәләр. Нигеҙ ҡоралар, ауыл иҫән-һау ҡалғандар хөрмәтенә *Ҡалдар*, ә йылға *Яуыш* (йәғни *яу урыны*) тип аталып киткән. (Болғаиров, 2014, 3-сө бит).

Ҡалдар ауылында ике урам бар, уларҙың береһе – *Үҙәк*, икенсеһе – *Йәштәр урамы* тип атала. *Үҙәк* атамаһы ауылдың ошо урамы беренсе һәм *үҙәк* булыуын белдерә, был урам бик оҙон, 2 км-ҙан ашыу.

Ҡалдар ауылы

Йәштәр урамы үткән быуаттың һуңғы ике тиҫтә йылында барлыҡҡа килгән. Мәсет ошо урамда.

Мишәр зыяраты янында, Үҙәк урамға арҡыры, оло юл сатында *Сирмеш утары* тип йөрөтөлгән *урам* бар. Уның килеп сығышы ауылға күсеп килгән Пенза мишәрҙәре менән бәйле. Тәүге күсеп ултырыусыларҙың береһе булған Яҡуптың (1870) юлда улы тыуа, уға *Хәсән* тип исем ҡушалар, ҡушаматы *Юлдаш* була һәм шунан *Юскаев* фамилияһы китә.

Мишәрҙәр тәүҙә *Әлимғол (Кәкүк) ауылы* башҡорттары ерен ҡуртымға ала, әммә аяҙ бер көндә тотош донъялары янып бөтә. Урыны насар тип, улар Яуыштың көньяғына күсеп ултыралар, шулай итеп, *Сирмеш утары* барлыҡҡа килә. Был утар әлеге ваҡытта ла бар, әммә ололар ғына уны *Сирмеш* тип йөрөтә.

Ауылда *Юскаевтар, Нарбиковтар* һәм *Мәүлиевтар* фамилиялы ғаиләләрҙе *мишәрҙәр* тип йөрөтәләр.

Ҡалдар ауылының топонимдары

Ҡалдар ауылының атамаһы кеше исеменән килеп сыҡҡан, быны «Башҡорт АССР-ының топонимдар» һүҙлеге лә раҫлай (84-се бит).

Яуыш атамаһының килеп сығышы билдәһеҙ, беҙҙең эҙләнеүҙәр буйынса, был исем *яу* һүҙе менән бәйле. Тарихта башҡорттарҙың үҙ-ара һәм ҡаҙаҡтар менән барымта-ҡарымталары булыуы билдәле. Ошондай бәрелештәрҙән һуң ҡалған ир баланы *Түләбай ауылы* башҡорттары үҫтереүе, аҙаҡ башҡа сығарыуы һәм шулай *Ҡалдар ауылы* барлыҡҡа килеүе хаҡында халыҡ араһында тарих йөрөй.

Ҡалдар ауылының башҡорт осонда *Ерекле шишмәһе* аға, ул Яуыш кеүек үк Мәнеүгә ҡушыла. *Ерекле* тигән атама уның ярҙарында *ерек ағасының* күп үҫеүе менән бәйле. Ике шишмә аша күперҙәр һалынған.

Ерекле *Әсе күленә* килеп ҡушыла. Түләбай ауылы янында *Әсе һаҙы* булһа, бында күл. Уның һыуы эсергә яраҡһыҙ, әммә йәй унда ҡош-ҡорт күп була. Бик эҫе йәйҙә күл тотош ҡорой, уның аҫтындағы ләме генә күренеп ята.

Ҡалдар Мәнеү йылғаһының һул яҡ ярында ултыра. *Мәнеү* атамаһының килеп сығышы тураһында фәнни әҙәбиәттә мәғлүмәт бик аҙ. Уны *манып алыу, маныу* тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан, ҡыҙ исеме тигән гипотезалар бар. *Мәнеү йылғаһы* Ағиҙелгә ҡоя. Үҙенең юлында ул бик оҙон юл үтә. Уның ярҙарында *Ҡадир, Түләбай, Ҡалдар, Волостновка, Павловка ауылдары* урынлашҡан.

Мәнеүҙә йәй көнө һыу инергә, ә ҡышын конькиҙа шыуырға була. Уның һыуы кәмей, әммә бөтөнләй үк ҡоромай.

Ҡалдар ауылы янында *Ғәббәс мула туғайы* бар. Был атама кеше исеменән килеп сыҡҡан. Борон Ғәббәс исемле мулла йылҡыларын туғайҙа тотҡан.

Мәнеү йылғаһына Әлимғол ауылы яҡлап *Ишкәнәк йылғаһы* ҡоя. Атаманың килеп сығышы билдәһеҙ. *Иш* башҡорт телендә *ике* йәки *ҡуш* тигәнде белдерә, был йылғаның ике ярында емеш-еләк бик уңа.

Шулай итеп, Ҡалдар ауылының топонимдарын өйрәнеү уларҙың күбеһенең кеше исемдәренән, шулай уҡ объекттың төрлө сифаттарын, билдәләрен сағылдырыуын күрһәтте; килеп сығышы билдәле булмаған атамалар ҙа бар.

Фәнни-эҙләнеү эшебеҙҙә Ҡалдар мәктәбендә һаҡланып ҡалған материалдар, олатайыбыҙ Псәнчин Сәхәүетдин Шәмсетдин улы һөйләгәндәре, «Мораҙым» гәзите, ғаилә архивы материалдары ҡулланылды.

Әҙәбиәт

1. Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. Уфа: Китап, 2009.
2. «Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге». Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980.
3. Болғаиров Р. Ҡалғандан – Ҡалдар, яуҙан – Яуыш // «Мораҙым» гәзите, 2014. 3 октябрь, №115, 3-сө бит.

Күгәрсен районында үткән конференцияның фотолары

Үткән конференцияларҙың фотолары

ДИПЛОМ
СЕРТИФИКАТ
ДИПЛОМ

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Баш һүҙ 3

Абдуллина Г. Н. Әүлиә тауының үткәне һәм бөгөнгөһө 4

Байназарова Г.М. Үрге Һаҙ ауылының топонимдары 10

Батталов А. И. Бәндәбикә кәшәнәһе һәм уның тураһында уйланыуҙар 15

Вәлитов С. Нуҡай ауылының ер-һыу атамалары 21

Вәлишина Г. Р. Мирхәт Әхмәҙулла улы Хәсәновтың “Бала саҡ тураһында хәтирәләр“ китабында Теләүембәт ауылы тарихы 22

Ғимранова К.Р. Йомағужа ауылының топонимдары 27

Ғимранова К.Р. Күгәрсен районы топонимдарының структур-семантик үҙенсәлектәре 29

Ғәббәсова А.Ғ. Бикбулат ауылының ер-һыу атамалары 32

Идельбаева Р.Х. История школы деревни Тляумбетово 37

Идельбаева Р.Х. Башҡорт халҡының азатлығы өсөн көрәшеүселәр – Сәфәр һәм уның улдары Ғабдулла менән Хөрмәтулла Иҙелбаевтар 46

Ишкинин Д. Наҙарғол ауылының ер-һыу атамалары 52

Йомаҡаева И. Й. Ил инәһе – Бәндәбикә 54

Йомаҡаева И. Й. Мәксүт менән Ерекле ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары 56

Йосопбаева К.Ә. Күгәрсен ауылының топонимдары 59

Йәрмөхәмәтова Л.Р. Бай (Туйөмбәт) ауылының ер-һыу атамалары 63

Мағизова И. Үрге Бикҡужа һәм Түбәнге Бикҡужа ауылдарының йәнле һөйләү теле ... 66

Миңлебаева Л.Х. Юлдыбай ауылының топонимдар һүҙлеге 70

Намаҙғолова Ә.Р. Дауыт-Ҡайып ауылының ете мөғжизәһе 76

Рафиҡова Л.И., Фәизов А. А. Бикҡужа ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары һәм уларҙың килеп сығыу тарихы 78

Садыҡова А. А. Тарих – ул быуаттар хәҡиҡәте (Бәндәбикә кәшәнәһе) 83

Сарбулатова А.Ю. Класташтарымдың фамилияларының барлыҡҡа килеүе һәм уларҙың мәғәнәһе 86

Сәғитов И.И. Дауыт-Ҡайып ауылы тирәһендәге гидронимдар 92

Хөсәйенов А.В. Күгәрсен районы Тәүәкән ауылының ер-һыу атамалары 95

Хәйруллина И. И. Үрге Сирбай ауылы һәм Яхиндарҙың килеп сығыу тарихы 110

Хәсәнова Л. Һ. Тыуған ерем – изге төйәгем: Бесәнсе ауылы 113

Шәрипова Г. Ш. Үрге Сирбай ауылының тарихы һәм ер-һыу атамалары 116

Юскаев И. И. Ҡалдар ауылының ер-һыу атамалары 119

Фотолар 125

ТЫУҒАН ЯҠ: ТОПОНИМДАР ҺӘМ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусыларҙың
IV Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары
16 апрель 2018 йыл

4-се йыйынтыҡ

РОДНОЙ КРАЙ: ТОПОНИМЫ И РАЗГОВОРНЫЙ ЯЗЫК

Материалы IV Республиканской научно-практической
конференции одарённых школьников
по диалектологии и ономастике
16 апреля 2018 г.

Сборник № 4

Лиц.на издат.деят. Б848421 от 03.11.2000 г. Подписано в печать 17.04.2019.
Формат 60Х84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times.
Отпечатано на ризографе. Усл.печ.л. – 8,2. Уч.-изд. Л. – 8,0
Тираж 100 экз. Заказ № 1013

ИПК БГПУ 450000, г. Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а

Издательско-полиграфический комплекс
БГПУ им. М.Акмуллы
Уфа, 450000, Октябрьской революции, 3А
Телефон: +7 (347) 272 64 32